ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22-28 сентябрь (нарысай) 2018

№38 (820)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Киләсәк юлдарын күҙаллап...**



4

**Өфөбөҙ...**

Рәсәй балының баш ҡалаһы булыр



5

**Малайҙар тулы донъям...**



6-7

**Ҡурай моңон...**

донъяға танытты



11

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыуҙың ҡыҙыу миҙгеле дауам итә. Шулай итеп, 2019 йылдың беренсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 609 һум 96 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 641 һум 16 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары 550 һум 38 тингә яҙыла ала. Ошо арауыҡта гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер, ғәҙәттәгесә, матур китапҡа өмөт итә ала. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Бөгөн - Бөтөн донъя автомобилһеҙ көн. Әйтегеҙ әле, бер генә көн булһа ла машинаһыҙ йәшәй алаһығыҙмы?

*Гөлсинә СӘЙФЕТДИНОВА, хеҙмәткәр, Өфө ҡалаһы:* Машинаһыҙ бер көн тороу мөмкин, әлбиттә. Бәхеткә күрә, эш урыным яҡын булғас, иртәнге һауаны һулап, унда йәйәү йөрөүҙе хуп күрәм. Ә машинам йорт алдындағы дөйөм туҡталҡала тора. Балалар ситтә, әллә ниҙә бер ҡайтып китәләр. Яңғыҙым йәшәгәс, машинам миңә бер иптәш кеүек. Шәмбе көн етһә, ашҡынып машинам менән күрешәм, уны тоғро юлдашым күреп, баҡсама йә ауылға ҡарай юлға сығам. Йәш саҡтарҙа автобусҡа һуңлап, ашығып йә билет булмайынса, яфалар күреп юл йөрөүҙәр аҙ булманы. Баш ҡалабыҙ эсендә уғата ҙур проблема ине йәмәғәт транспорты. Тәүҙә - Черниковканан, аҙаҡ Дан бульварынан балаларҙы баҡсаға, аҙаҡ башҡорт мәктәбенә мәктәпкә нышып тултырылған автобус-трамвайҙарҙа алып йөрөгән саҡтар ыҙаһы бөгөн дә иҫкә төшөп, ытырғандырып ҡуя: нисек түҙелгәндер ундай мәхшәргә?

Бөгөн дә ҡала автобустарында хәл яҡшырҙы тип әйтеп булмай. Унын ҡарауы, берәй ергә барам, тиһәң, машинаңа ултырҙың да киттең. Бөгөн бит машина байлыҡ йә дәрәжә күрһәткесе булыуҙан күптән туҡтап, уңайлылыҡ, ваҡытыңды экономиялап, оҙон юлды яҡынайтыусы кәрәкле нәмәгә әйләнде. Мәҫәлән, телефон, ҡул сумкаһы һымаҡ уҡ. Шуға ла мин уны яратып-һөйөп кенә тотонам. Ул шул тиклем яҡын иптәшкә әүерелә, хатта икенсе, "текәрәк" машинаға алыштырғы ла килмәй. Машина ла үҙенә ҡарата мөнәсәбәтте һиҙәлер ул, бер тапҡыр ҙа һемәйтеп, боҙолоп ултырғаны юҡ. Шуныһы ҡыҙыҡ, бер тапҡыр ауылдан ҡалаға ҡайтып етеп, ишек алдына инеп ултырғас, тишелде тәгәрмәсе. Шунан үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ инде, нисек машинаңа рәхмәттәр уҡымайһың!

Әлеге Бөтөн донъя автомобилһеҙ көн акцияһына күптәр ҡушыла алыр ине, тип уйлайым. Йәмәғәт транспорты, бағыса, проблемалы булһа ла, икенсе яҡтан, унда тормош ҡайнай: кешеләр менән аралашырға, уларҙың холоҡ-фиғеле күренештәренә шаһит булырға, ҡыҙыҡлы йә ғибрәт хәлдәрҙе күҙәтергә тура килә. Ә машинаһынан төшмәгән кешеләрҙең ҡайһы берҙәре, бигерәк тә тәгәрмәсле дуҫы дәү һәм дә текә булһа, ябай халыҡтан, аралашыуҙан, тимәк, тормоштан алыҫлаша, тупаҫлыҡҡа, тәкәбберлеккә бирелә; йәйәүлене ихтирам итмәй башлай, хатта ябайыраҡ маркалы машина хужаларына ла мыҫҡыллап ҡарай: уларҙан юл биреүҙе талап итә йә бәрҙертеп китергә лә күп һорап тормай. Шуға күрә, ниндәй генә эш кешеһе булма, ниндәй генә текә машинала йөрөмә, әленән-әле йомшаҡ креслонан айырылып, ергә төшөп, тирә-яғыңа бағып алыу бер кемгә лә ҡамасауламаҫ ине, тигән фекерҙәмен.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ДИАЛОГ*

# САЛ УРАЛДАН - САЛБУУРУНҒА,

## бөгөнгөнән - сал тарихҡа...



**Гөлгөнә БАЙМЫРҘИНА, Республика халыҡ ижады үҙәгенең фольклор буйынса төп белгесе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре: "Беренсе тапҡыр йыртҡыс ҡош тотоп шөғөлләнеп ҡараным. Ҡурҡыта, шулай ҙа өйрәтеүсе егеттәрҙең әйткәнен иҫтә тотоп, тулҡынланыуымды һиҙҙермәҫкә, үҙемде ҡулға алырға тырышам. Шунан тағы ҡырғыҙ бөркөтсөләренең: "Тынservлан! Ҡошто арба!" - тигәнен дә күҙ алдында тотам... Уңыш йылмайҙымы, Хоҙай ярҙамымы - әммә беренсе тапҡыр бөркөт менән һунар итеү ярышында ҡатнашып, икенсе урын яулауыма тәжрибәле бөркөтсөләр ҙә аптыраны. 25-28 килолыҡ ҙур ҡош ҡулыңа килеп ултырғас, ниндәй тойғолар кисергәнде әйтеп аңлатып булмайҙыр ул. Башҡорт ҡатындары борон-борондан юҡҡа ғына ирҙәре менән бергә һунарға йөрөмәгән, ҡуша яу сапмағандыр, күрәһең. Сөнки күңелдә ҡайҙалыр төптә ятҡан булмышың уяна, хистәр бураны уйнай: ҡыуаныс. Ғорурлыҡ. Ҡапыл үҙеңде ҙурайып, үҫеп киткәндәй тояһың, кәүҙәң турая, башың юғары сөйөлә. Һин - батшабикә!"**

**(Ҡырғыҙстанда үткән Бөтә донъя күсмәндәр уйындары хаҡында 8-9-сы биттәрҙә уҡығыҙ).**

12+

✓ *"Автомобилһеҙ бер көн" акцияһын матур, файҙалы ғәҙәттәрҙең береһенә әйләндерергә кәрәк ине ҡала властарына. Күпме авария булмай ҡалыр ине, күпме яғыулыҡ янда ҡаласаҡ, унан ары ҡалабыҙ һауаһы ла бер аҙ сафлана төшөр ине.*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЕТӘКСЕ БУЛ!

***Әхнәф ТИМЕРБУЛАТОВ, "Мең ырыуы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы советы рәйесе:*** Мине айырыуса борсоған мәсьәләләрҙең береһе - милли кадрҙар әҙерләү. Был мәсьәләне хәл итеү юлдарын барлағанда бөгөн Башҡортостан буйынса күрһәткестәр менән дә ҡыҙыҡһындым һәм республиканың 33 районы буйынса мәғлүмәт ҡараным. Улар араһында ни бары ике райондың ғына хакимиәт башлығы башҡорт кешеһе булып сыҡты. Ҡайһы бер райондар хакимиәттәрендә, мәҫәлән, Шишмә, Благовар райондары хакимиәттәрендә беҙҙең милләт вәкилдәре бөтөнләй юҡ. Ә бит Благовар районы мең ырыуының данлыҡлы кешеһе Ҡәнзәфәр бей тыуған ер, унда башҡорттар һаны әҙ түгел.

Был милли кадрҙарға ҡытлыҡ милли мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәһендә генә түгел, сәйәсәт, иҡтисад һәм социаль мәсьәләләрҙе хәл итеүгә лә ҙур йоғонто яһаған фактор. Шуға күрә, мәктәптә балаларға сифатлы белем биреүҙән тыш, уңышлы кеше булырға, етәксе вазифаһында эшләргә ынтылыш тәрбиәләргә лә кәрәк. Баланың аңына бәләкәйҙән һалынырға тейеш ул фекер, кешегә ялланып эшләр урынға, етәксе булам, тип үҫһен ул. Ни өсөн беҙ баланы сикләп, башҡаларҙан өҫтөн булма, тип өйрәтәбеҙ? Ҡайһы бер ата-әсәләр балаларының үҙҙәре белгән һөнәрҙе генә үҙләштереүен, йәғни ауылда тракторсы, механизатор, малсы булып ҡына эшләүен теләй. Был дөрөҫ түгел, бала тырышып уҡып, белем алып, һөнәри үҫешкә ынтылыш менән йәшәргә тейеш. Әлбиттә, "Һин дә мулла, мин дә мулла - атҡа бесән кем һала?" тигәндәй, бөтәһе лә "мулла" булып бөтә алмай. Етәксе булыу өсөн дә тәжрибә, яуаплылыҡ талап ителә. Әммә шул маҡсатҡа ынтылышы булған кешегә барыбер бер йүне табыла.

Тағы ла шуны әйтергә кәрәк, башҡорт кешеһе ҡайҙа ғына эшләгәндә лә милләттәштәренә лә ярҙам итергә ғәҙәтләнһен ине. Беҙ өйрәнерлек миҫалдар байтаҡ, үҙебеҙҙең арала булмаһа, башҡа милләттәрҙән үрнәк алырға ваҡыт. Бындай тәрбиә бала саҡтан килергә тейеш, сөнки бәләкәй саҡта ишеткән, күргәндәр иҫкә ныҡ һеңеп ҡалыусан. Етәксе бул һәм милләттәшең менән иңгә-иң терәшеп эшлә, тип өйрәтәйек балаларыбыҙға. Беҙҙең йәштәр бөтәһе лә тырыш, уҡып белем алалар, әммә оло быуын башҡорт етәкселәренә алмашҡа килеүселәре һирәк. Уңышҡа өлгәшеү өсөн тәүҙә кеше үҙе нимә теләгәнен күҙ алдына килтерергә тейеш, тиҙәр, беҙҙең балалар юғары вазифа биләп, республика мәнфәғәтенә эшләйәсәген кескәйҙән белеп үҫһен ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Бөгөн - Бөтөн донъя автомобилһеҙ көн. Әйтегеҙ әле, бер генә көн булһа ла машинаһыҙ йәшәй алаһығыҙмы?

**(Башы 1-се биттә).**

***Азамат СӘЙФУЛЛИН, һәүәҫкәр автомобилсе, Өфө районы:*** Бик теләһәм дә мин бер көн дә автомобилһеҙ йәшәй алмайым, сөнки Шамониндан Өфө ҡалаһының икенсе осона - Өфө моторҙар эшләү берекмәһенә - 35 километр араға йөрөп эшләйем. Машинам булмаһа, унда эшләү хаҡында һүҙ ҙә булмаҫ ине. Өфөгә лә йомош-юл менән йыш барам. Хатта Шамониндың үҙендәге магазинға ла машина менән барырға тура килә, сөнки, берҙән, ул өйҙән алыҫтараҡ; икенсенән, әйбер күтәреп, йәйәү йөрөгө лә килмәй. Унан инде тәбиғәткә ялға сығаһыңмы, балыҡҡа йөрөйһөңмө - тағы машинаһыҙ булмай. Ауылға әсәй янына ла йыш ҡайтабыҙ. Әле һеҙ әйткән Бөтөн донъя автомобилһеҙ көн, миңеңсә, ҙур мегаполистар өсөн файҙалылыр, тигән уйҙамын. Мәҫәлән, бөгөн баш ҡалабыҙ Өфө буйынса ғына ла һауа атмосфераһын зарарлы яғыулыҡ ҡалдыҡтары менән ағыулау кимәлененң 50 проценты автомобиль транспортына тура килә, тигән рәсми мәғлүмәтте күреп, ғәжәпкә ҡалғайным яңыраҡ. Ысынлап та, ҡаланан ситтә йәшәгән кеше өсөн Өфөгә килеп инеү менән һауа тынсыулығы шундуҡ беленә: тын ҡыҫыла, хәлһеҙлек барлыҡҡа килә, кислород етешмәй. Ҡалалағы автомобиль хужаларынан, исмаһам, бер көнгә булһа ла машиналарынан төшөп, йәйәү йә йәмәғәт транспортында эшкә барыуҙарын талап итеү мөмкин эштер, тип уйлайым мин. Физик әүҙемлек һәм юл-транспорт көсөргәнешенән ял итеп алыу уларҙың үҙҙәренә лә файҙа ғына булыр ине, моғайын.

***Фәтих БАЙГИЛДИН, сәләмәт тормош рәүеше алып барыусы:*** Дөрөҫ, сәләмәт тормош алып барыу өсөн бөгөн кеше аяғы баҫмаған утрауҙа йә Агафья Лыкова һымаҡ тайгала йәшәргә кәрәк тә бит, тик был мөмкин түгел: эшләргә, ғаилә аҫрарға бурыслыһың. Бының өсөн иһә һауһаҡ, сәләмәт булыу мотлаҡ, юғиһә, эшеңдән ҡолаҡ ҡағыуың һә тигәнсе. Автомобилһеҙ бер көн генә түгел, мин аварияға осрап, саҡҡа әҙәм булғандан һуң байтаҡ йылдар инде руль артына ултырғаным юҡ. Улым машинаны ремонттан һуң һатып, кредит аҡсаһы ҡушып, яңынан алды, үҙе йөрөй. Ә мин эшкә йәмәғәт транспортында, велосипедта йөрөргә ғәҙәтләндем. Йыл һайын баш ҡалабыҙҙа үткәрелгән веломарафонда ҡатнашмай ҡалғаным юҡ, велосипед спортын үҙ иткән бик күп яҡты уйлы, яҡшы кешеләр менән дуҫлаштым. Әйткәндәй, баш ҡалабыҙҙа әлеге көндәрҙә "Эшкә - велосипедта" акцияһы бара, унда теләгән бер кеше ҡатнаша ала. Уның төп маҡсаты - велосипедтың сәләмәтлек өсөн файҙалы булыуы һәм тирә-яҡ мөхиткә зарарһыҙлығы хаҡында ҡала халҡының тағы бер иҫенә төшөрөү. Ғалимдар фекеренсә, велосипедта ярты сәғәт кенә йөрөү ҙә организмдың физик әүҙемлеккә бер көнлөк ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә икән.

"Автомобилһеҙ бер көн" акцияһын матур, файҙалы ғәҙәттәрҙең береһенә әйләндерергә кәрәк ине ҡала властарына. Күпме авария булмай ҡалыр ине, күпме яғыулыҡ янда ҡаласаҡ, унан ары ҡалабыҙ һауаһы ла бер аҙ сафлана төшөр ине, бәлки. Яндекстан Өфө яңылыҡтарына күҙ һалғанығыҙ бармы? Алты мәғлүмәттең өсәүһе - мотлаҡ автотранспорт-юл хәрәкәте һәләкәте тураһында бит. Әлеге машинаһыҙ бер көн әллә кемдәрҙең ғүмерен, һаулығын һаҡлап ҡалырға ярҙам итәсәк. Унан, бензин мәсьәләһе лә киҫкенләшә бара бит. Тик белмәйем, машина тип күҙе тонған, йәйәү йөрөүҙең ни икәнен онотҡан ялҡау халыҡты мөмкинме икән һуң ҡуҙғатыу, яҡшы башланғысҡа йәлеп итеү...

Был акцияны иғлан итеүен иткәс, уның ҡәтғи үтәлеше тураһында ла уйларға ине, юғиһә, бит ҡоро һүҙ булып ҡына ҡала килә һәм уның ни бары календарь битен "биҙәп" тороуы көлкө булыр ине, ҡыҙғаныс булмаһа әгәр. Акцияны ойоштороусылар ЮХХДИ контролен, эш биреүселәр ҡатнашлығын файҙаланып, үҙ ҡулы аҫтында эшләүсе автоһәүәҫкәрҙәрҙе бер көн машиналарынан айырылып торорға өйрәтә алырҙар ине, моғайын. Хәйер, эште ойоштороам, тиһәң, уның тәьҫирле саралары бик күп, тик фантазияны бер аҙ эшләтергә кәрәк. Халыҡ-ара кимәлдә иғлан ителгән икән - ул көн, ысынлап та, ғәмәлгә индерелһен!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ХАЛЫҠ ГӘЗИТЕ



**Мәғариф өлкәһендә байтаҡ йылдар эшләгән кеше буларaҡ, балаларға белем биргәндә лә, уларҙа изгелек, Тыуған илгә һәм туған телгә тоғролоҡ, ғәҙеллек кеүек иң күркәм сифаттар тәрбиәләүҙә лә ярҙам итеүсе "Киске Өфө" гәзите минең генә түгел, ә бөтә республика уҡытыусылары һәм тәрбиәселәренең иң яҡын дуҫы.**

Элегерәк ҡайҙа ғына йөрөһәм дә халыҡҡа "Киске Өфө" гәзите тураһында һөйләп йөрөй торғайным, хәҙер бындай рекламалауға гәзит мохтаж түгел, сөнки уны бөтә ерҙә лә беләләр һәм яратып уҡыйҙар. Үҙем почта килгәс тә иң тәүҙә "Киске Өфө"нө, һуңынан башҡа республика гәзиттәрен уҡыйым һәм аҙаҡтан ҡыҙыҡ өсөн генә "Комсомольская правда" кеүек пиар-гәзиттәргә күҙ йүгертеп сығам. "Киске Өфө"лә йәнең теләгән әйберҙе уҡырға була, Урал аръяғы халҡы әйтмешләй, юҡ нәмә үҙе юҡ унда. Кеше башҡа йән эйәләренән нимәһе менән айырыла - ул уйлай белә, кешене уй йәшәтә. Был баҫмала һине уйландыра, дөрөҫ йүнәлеш күрһәтә торған рубрикалар ифрат күп һәм төрлө-төрлө. Шиғриәтме, арҙаҡлы ғалимдарыбыҙ, фән әһелдәренең "Диалог" һәм "Монолог"тағы сығыштарымы, халҡыбыҙға ғына хас юморға бай көләмәстәрме, нимә ул тормош тигән һорауға яуап биреүсе афоризмдар һәм риүәйәттәрме, матур йәшәү, аҡыллы булыу өсөн, ниндәйҙер ваҡиғанан фәһем һәм белем алыу өсөн кәрәкле бөтә мәҡәләләр тупланған унда.

Бөгөн телевизорҙан күрһәтелгән "бысраҡ" күренештәрҙән дә, ҡайһы бер гәзиттәр яҙған пиарҙан да халыҡ тиҙҙән ялҡасаҡ. Өс-дүрт-биш йыл элек телевизорҙан яңылыҡтар, Үҙәк каналдарҙан күрһәтелгән бәхәсләшеү ярҙамында дөрөҫлөк эҙләүсе тапшырыуҙарҙы ҡарарға ярата торғайным. Баҡтиһәң, улар дөрөҫлөк эҙләмәй, ә бер-береһенә пиар яһай һәм аҡса көрәй булып сыҡты. Ошондай шарттарҙа халыҡты тәрбиәләүсе "Киске Өфө" һымаҡ баҫмаларҙың кәрәклеген тағы ла яҡшыраҡ аңлай башлайһың. Милләтемә хеҙмәт итеүсе бындай гәзиттең булыуы менән бәхетлемен.

**Әхиәт ҒӘЙЕТБАЕВ,**
**Ә. Исҡужин исемендәге 9-сы балалар музыка мәктәбе директоры.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүҙең 28 йыллығы уңайынан 2018 йылда Республика көнөн байрам итеү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Район һәм ҡала округтары хакимиәттәренә учреждениеларҙы, урамдарҙы, майҙандарҙы, йәмәғәт биналарын һәм торлаҡ кварталдарҙы дәүләт символикалары менән биҙәргә, Республика көнөнә арналған тантаналы саралар үткәрергә, шулай уҡ байрам уңайынан мәҙәни, спорт саралары һәм йәрминкәләр ойошторорға тәҡдим ителде.

✓ Өфөнөң ике юғары уҡыу йорто фәнни ойошмаларҙың абруйлы халыҡ-ара рейтингына индерелде. Өфө дәүләт авиация техник университеты Рәсәйҙең ғилми ойошмалары араһында - 44-се, донъя исемлегендә 714-се урынды биләне. Өфө дәүләт нефть техник университеты - 67-се һәм 741-се позицияла. Рейтингта Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге лә бар - 37-се һәм 705-се урындар.

✓ Башҡортостан бал етештереү буйынса Рәсәй төбәктәре араһында беренсе урынды биләй. Ошо хаҡта республика Башлығы Рөстәм Хәмитов 2021 йылда умартасылыҡ буйынса XLVII "Апимондия" халыҡ-ара конгресына әҙерлек һәм уҙғарыу мәсьәләләре буйынса кәңәшмәлә хәбәр итте. Республикала 350 мең бал ҡорто күсе иҫәпләнә, йыл һайын 5-6 мең тонна тауар балы етештерелә, тип билдәләнде. Ул илебеҙҙә етештерелгән бөтә тауар балынан һигеҙ процент, Башҡортостандың Волга буйы федераль округындағы өлөшө 23 процент тәшкил итә.

✓ Рәсәй Хөкүмәте 2019 йылдың 1 ғинуарынан хеҙмәткә түләүҙең минималь күләмен 11 280 һумға тиклем арттырырға тәҡдим итте. Ошо йылдың 1 майынан эшкә һәләтле кешенең йәшәү минимумы хеҙмәткә түләүҙең минималь күләменә тиңләштерелде. Бөгөн ул 11 163 һум тәшкил итә. Урал коэффициентын иҫәпкә алып, Башҡортостанда минималь эш хаҡы 12 837,45 һумға тиң.

✓ Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына ҡарата иң яҡшы бейеүгә конкурс башланды. Конкурсты Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле иғлан иткән. Бейеүҙәрҙе 2019 йылдың 21-22 ғинуарында Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле сәхнәһендә тапшырыу ҡаралған. Ғаризаны 2018 йылдың 1 октябренә ҡәҙәр ебәрергә кәрәк: email: gaant39@mail.ru. Белешмәләр өсөн телефон: 8 (347) 276-18-49.

✓ *Хаталы яҙған кешегә хушкүңеллелек тәрбиәләй алманым үҙемдә, сөнки хаталы яҙыу - ул орфография ҡанундарын белмәүҙе генә аңлатмай. Грамоталылыҡ - ул кешенең белемен, мәҙәнилеген дә күрһәтеп торған сифат билдәһе ул.*



БӘХӘС ҠОРАМ

# "АҢҒЫРА АЙЫУҘАН УРАЛДАҒЫ ҠУРҠҠАНДАЙ..."

**Гәзитебеҙҙең быйылғы 36-сы һанында журналист һәм яҙыусы Миләүшә Ҡаһарманованың "Хаттар яҙышайыҡ әле!" тигән мәҡәләһе баҫылып сыҡҡайны.**

Яҙыусы булараҡ та, аралашыусан, ихлас кеше булараҡ та, авторҙы йәшәйешебеҙҙең ҡасандир һөйөнөслө, тулҡынландырғыс бер күренеше булған эпистоляр жанрының тормош арбабыҙҙан төшөп ҡалыуы моңһоуландыралыр, әлбиттә. Ысынлап та, хат яҙышыу кеүек матур йола кеше ғүмерен йәнләндереп, уға биҙәк өҫтәп торғандай ине. Ыңғай йөкмәткеле, ҡыуаныслы хаттар булһа, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта кеше яҙмыштарын үҙгәртеп, уны икенсерәк йүнәлешкә бороп ебәргән хаттар ҙа күп булғандыр, тием. Унан һуң, ҡайһы бер хаттарҙың, йөкмәткеһенән бигерәк, матур итеп, таҙа һәм хатаһыҙ яҙылыуы ла шарт ине бит, сөнки ул, берҙән, хат яҙыусының йыйнаҡлығын, үҙенә талапсанлығын күрһәтеп торһа, икенсенән, был хат алыусыға ла ихтирам билдәһе булараҡ ҡабул ителә ине. Тап бына ошо юҫыҡта күп йылдар элек үҙем менән булған бер хәл тураһында бәйән итмәксемен.

Мәктәпте тамамлап, университеттың филология факультетына имтиханды тарихтан, һаңһыҙ һәм бер иштән үтеп торған партия съездарын бутағаным өсөн "өслө"гә тапшырһам да, рус теленән диктантты "бишле"гә яҙып, уҡырға индем, ҡанатланып йөрөгән саҡ. Етмәһә, өлкән курста уҡыған ағайым, арҡамдан ҡағып, һинән башҡа "бишле"алыусы юҡ, тип уғата осондороп та ебәрҙе, ахыры. Уҡыуҙар башланды. Шул саҡ бүлмәләш ҡыҙҙың ағаһы армиянан ҡайтып барышлай ятағыбыҙға хәл белешергә һуғылды. Берғәләшеп күңелле итеп сәй эсеп, Салауат Юлаев һәйкәленә барып килгәс, һалдат егет ауылына ашыҡты. Шулай ҙа йәйын табып, минең ҡолаҡҡа: "Рөхсәт итһән, һинә хат яҙырмын", - тип шыбырҙаны. Миңә булған иғтибарҙы һиҙеп, аҙаҡ әхирәтем уйынлы-ысынлы "еңгә" тип ирештерер булып китте. Көндәрҙән бер көндө Октябрь байрамына был егеттән вәғәҙә иткән хаты менән открыткаһы килеп төштө. Егеттәрҙән хат алыу ул саҡ ғәҙәти хәл булһа ла, миңә бер кемдең дә яҙғаны юҡ ине әле. Ауылындағы хәлдәр, урман хужалығына эшкә урынлашыуы хаҡында бәйән итеп, минең менән хатлашып торорға, дуҫлашырға теләүен белдергән, байрам менән ҡотлаған. Хатты аҙағына тиклем уҡып бөтөргәнсе, был кешегә ҡарата уяна биреп ҡуйған хискенәләр юҡҡа сығып, тулҡынланыуымдың әҫәре лә ҡалмағайны: ярты битлек хатында өс-дүрт тупаҫ хата ебәргән дәбаһа "егетем"! Фу-у, башҡортса ла дөрөҫ яҙа белмәгән кеше менән нисек дуҫлашмаҡ кәрәк! Ғәрләндем. Күп уйлап торманым, ҡағыҙ, ручка алдым да йәшлек ҡыҙыулығы менән: "Һинең менән дуҫлашҡым килмәй, башҡаса миңә хат яҙма - күберәк китап уҡы!" - тип хаталарын ҡыҙыл менән төҙәтеп, хатын кире һал да ебәр... Шуның менән башланып та өлгөрмәгән дуҫлыҡ ебе шарт өҙөлдө. Ошо хәтирә юҡ-юҡта иҫкә төшә ҡалһа, дөрөҫ эшләнемме икән, нинә кеше күңеле менән ҡаты ҡыландым, рәнйетмәнемме уны, тигән һорауҙар борсоп ҡуя. Ошо өс хәреф хатаһының яҙмыш хатаһына сәбәпсе булыуы ла бар ине бит... Бәхеткә, әхирәтем һүҙҙәренә ҡарағанда, ул ауылындағы бер ҡыҙға өйләнгән, балалары үҫә, тормошонан ҡәнәғәт. Мин дә үҙ яҙмышымды таптым - шул ғына тынысландыра выжҙан ғазабын. Ә шулай ҙа әлеге көнгәсә хаталы яҙған кешегә хушкүңеллелек тәрбиәләй алманым үҙемдә, сөнки хаталы яҙыу - ул орфография ҡанундарын белмәүҙе генә аңлатмай. Грамоталылыҡ - ул кешенең дөйөм кимәлен, йәғни белемен, мәҙәнилеген дә күрһәтеп торған сифат билдәһе ул, минеңсә. Яҙа-һыҙа белеү генә грамоталылыҡты аңлатмағанын бөгөн һәр кем яҡшы белә: тома наҙанлыҡ революциянан һуңғы йылдарҙа уҡ тамырынан бөтөрөлә. Бөгөнгө заман грамоталылыҡ төшөнсәһенә яңы бурыстар йөкмәтә: үҙеңде аҙмы-күпме йәмғиәткә файҙалы кеше итеп тояһың икән, үҙ-үҙеңде ихтирам итһәң, тормоштан артта ҡалырға теләмәһәң - һәр йәһәттән: сәйәсәт һәм халыҡ-ара мәсьәләләрҙә, ил етәкселегенең эске һәм тышҡы сәйәсәтендә, иҡтисад, финанс һәм социаль өлкәләрҙә, техника яңылыҡтары, спорт донъяһы, әҙәбиәт һәм мәҙәниәт киңлектәрендә бигүк тәрәндән булмағанда ла, исмаһам, аҡты-ҡаранан айыра белерҙәй хәбәрҙар булыу һәм фекер йөрөтә белеү, һәр күренеш-хәл-ваҡиғаға үҙ ҡарашыңды булдыра алыу һәләте - шул уҡ грамоталылыҡтың бер билдәһе. Дөрөҫ, был тәңгәлдә грамоталылыҡты үҙен һәр йәһәттән белемле тип иҫәпләп, өҫтән-мөҫтән хәбәр һөйләп йөрөргә яратҡан дилетанттарҙан айыра белеү ҙә кәрәк.




Һәм тағы. Үҙе йәшәп, көн итеп ятҡан туған ере, иле, халҡы хаҡында, уның томдарға һыймаҫ ҡаһарман тарихы хаҡында бер ни белмәгән наҙандар аҙмы ни арабыҙҙа! Халҡыбыҙҙың героик үткәндәре үҙе генә лә ни тиклем тәрән белем, фекер айышы һәм бай мәғлүмәт сығанағы булып тора! Ә шулай ҙа тарихыбыҙҙың хәл иткес мөһим, героик этаптары һәм ваҡиғаларына ҡарата битарафтар быуа быуырлыҡ, үкенескә. Яңыраҡ ҡына шундай бер наҙанлыҡ күренеше шаһиты булдым. Әмәлгә ҡалғандай, сентябрь айындағы күренекле даталар хаҡында һүҙ сыҡты. "Был ай миңә оҡшамай, - ти әңгәмәсем, йәйге каникулдың һуңғы көндәрендә Өфөгә ҡунаҡҡа килгән 9-сы синыф уҡыусыһы. - Бер байрамы ла юҡ, исмаһам". "Нисек инде - юҡ, ә Белем көнө һуң?" - тием аптырабыраҡ. "Ул ниндәй байрам булһын! Мәктәпкә йөрөү минең өсөн - каторга!" - ти был бала. Уның шундай кәйефтә булыуының үҙ сәбәптәре барҙыр, моғайын да, тик әле һүҙ байрамдар хаҡында ине. "Ә бына 2 сентябрь - Бөтөн донъя һуғышы тамамланған көн - байрам түгелме ни һинә?"- тип ныҡышам. "Һуғыштың 9 майҙа бөткәнен дә белмәйһеҙ!" - тип ауыҙ йыра был "грамотей". Әйткәндәй, был бер үҫмерҙең генә наҙанлығы булһа икән! Күптәрҙең 1812 һәм 1941-1945 йылдарҙағы Ватан һуғыштары менән 1914 һәм 1939 йылғы донъя һуғыштарын бутап һөйләүҙәрен ишеткән бар, һәм уларҙың араһында, үкенескә, мәктәп уҡыусылары ла байтаҡ. Был балаға ла, 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт атлы полктары Наполеон ғәскәрен ҡыйрата барып, Парижға барып ингән, ә Бөйөк Ватан һуғышында генерал Шайморатовтың Башҡорт атлылар дивизияһы ҡаһармандарса һуғышҡан, тип ябайлаштырыбыраҡ аңлатып торорға тура килде. Ошонан һуң "өҫтә" генә ятҡан билдәле мәғлүмәттәргә лә эйә булмаған кешенең туған халҡыбыҙ, Башҡортостаныбыҙҙың быуаттар төпкөлөндә ятҡан сал тарихын күптән белмәй икәнлеген аңлап, әрнейһең.

Ә бына тыуғандан алып "әсәй" тип асылған туған телеңде белмәү, фекереңде дөрөҫ, эҙмә-эҙлекле бәйән итә алмау, буталсыҡ һәм сит һүҙҙәр ҡушып, "сейле-бешле" хәбәр һөйләү - үҙе үк наҙанлыҡҡа тиң түгелме ни? Был бәләләрҙең күбеһе мәктәптә туған тел, рус һәм сит телдәрҙән, тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү, география, биология кеүек фәндәрҙән уҡытыусының ялҡытҡыс монологынан, балаларҙы ҡыҙыҡһындыра белмәүенән, материалды тормоштан, тарихтан йәнле миҫалдар аша аңдарына еткерә алмауынан да килеп тыуалыр. Тарих фәненә иһә, булып үткән ваҡиғаларҙан фәһемле, ғибрәтле, ҡыҙыҡлы эпизодтарҙы, батыр шәхестәребеҙ яҙмыштары хаҡында бәйән итеү юлы менән ҡыҙыҡһыныу уятырға була бит. Тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә үткәндәрҙе ныҡытыу өсөн билдәле яҙыусыларҙың классик әҫәрҙәренән миҫалға һөйләмдәр эҙләп табырға ҡушыу ҙа етә. Аҙаҡ бала ундай китаптарҙан айырыла алмаясаҡ, үҙ тәжрибәмдән сығып әйтәм.

Әйткәндәй, хатаһыҙ, дөрөҫ яҙырға ғына түгел, ә һөйләм стилистикаһын төшөнөү, тыныш билдәләре ҡуйырға өйрәнеү өсөн китап уҡыу - иң һөҙөмтәле күнекмә. Лев Толстой, Иван Тургенев әҫәрҙәрен уҡып, рус телен камил үҙләштергән кешеләр бар. Бөгөн, үкенескә, классик әҙәбиәт уҡыған кешеләр юҡ кимәлендә. Исмаһам, әсә телендә сыҡҡан гәзиттәрҙе алдырып уҡыһаҡ ине әҙәм балаһы: ниндәйҙер кимәлдә улар ҙа наҙанлыҡтан ҡотолоу сараһы булып тора, бик күп файҙалы мәғлүмәттәр алырға мөмкин. Үкенес, гәзит уҡыу ҙа бөгөн, тимәк, фәҡәт зыялы, аң-белемгә ынтылышлы заттарҙың ғына шөғөлөнә әйләнде. Ҡыҙыҡ, ә гәзит тә, китап та уҡымағандар ни эш бөтөрә, буш ваҡыттарын ни менән үткәрә икән? Йәш-елкенсәктән, билдәле, интернет ауына сырмаланып үтә ғүмере. Бер-береһе менән СМС аша хәбәрләшә, диалог ҡора улар. Һәм бына ошонда күренә лә инде бөгөнгө йәштәрҙең "интеллект" кимәле. Һүҙ һайын хата ебәреүҙәре өҫтөнә, күпме әр һәм һүгенеү һүҙҙәре ҡуллана улар! Сәстәрең үрә торор. Бына быны инде аралашыу культураһы, грамоталылыҡ тип әйтергә бер нисек тә тел әйләнмәй. Бөйөк шағир һәм мәғрифәтсебеҙ Мифтахетдин Аҡмулла, күрәһең, ниндәй замандар килерен үтә күргән: "Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу кәрәк..." - тигән юлдар бөгөн дә бит кисә генә яҙылған кеүек яңғырай...

Ә һеҙ ни уйлайһығыҙ ошо әйтелгәндәр тураһында, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ?

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Рәсәйҙең Иҡтисади үҫеш министрлығы ил иҡтисадын тотоп торған һәм тотоп торасаҡ (2024 йылғаса фараздар) ун төбәк исемлеген баҫып сығарҙы. Федерацияның ошо субъекттары 2018 йылда тулайым төбәк продукты күләменең яртыһынан күберәген барлыҡҡа килтерә - 52,1 процент. Исемлеккә Мәскәү, Санкт-Петербург, Мәскәү һәм Свердловск өлкәләре, Ханты-Манси автономиялы округы, Ямал-Ненец автономиялы округы, Краснодар һәм Красноярск крайҙары менән бергә Башҡортостан Республикаһы ла ингән.

✓ Дәүләт Думаһы депутаттары беренсе уҡыуҙа рәсәйҙәрҙе пенсия алды йәшендә (пенсияға биш йыл ҡалғас) эшкә алыуҙан баш тартҡан йәки нигеҙһеҙ эштән ебәргән өсөн енәйәт яуаплылығы тураһында закон проектын ҡараны. Быны өсөн 200-360 мең һум штраф һалыу йәки 360 сәғәткә тиклем мәжбүри эштәр тәғәйенләү тәҡдим ителә. Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының түбәнге палатаһының өс фракцияһы: "Берҙәм Рәсәй", "Ғәҙел Рәсәй", ЛДПР закон проектын тәүге уҡыуҙа хупланы. Коммунистар ҡаршы сығыш яһаны.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте 2019 йылда Ураҙа һәм Ҡорбан байрамдарын билдәләү көндәрен хәбәр итте. Республика Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, 2019 йылда 4 июнь - Ураҙа, ә 11 август Ҡорбан байрамы тип иғлан ителгән.

✓ Йәкшәмбе, 23 сентябрҙә, урындағы ваҡыт буйынса иртәнге 7 тула 4 минутта көҙгө көн менән төн тигеҙләшә. Көҙгө тигеҙләнеш - астрономик көҙҙең башланыуы ул. Был көндә бөтә Ер шарында көн менән төн оҙайлығы бер тигеҙ - 12-шәр сәғәт. Башҡортостандың баш ҡалаһынан астролог Ирина Винюкова әйтеүенсә, был көн ҡыҙыҡлы булмаҡсы. Ул йәкшәмбе иртәһендә пландар яҙырға, медитация менән шөғөлләнергә йәки саф һауала йөрөргә кәңәш итә.

✓ Башҡортостан уҡыусыларын VIII "Башҡортостан ҡоштары" республика балалар интернет-конкурсында (йәй/көҙ миҙгеле) ҡатнашырға саҡыралар. Конкурс өсөн материалдарҙы "Башҡортостан ҡоштары" конкурсы сайтына ебәрергә кәрәк. Эштәр 2018 йылдың 1-7 октябрендә ҡабул ителә, 2018 йылдың 1 ноябрендә еңеүселәр иғлан ителә.

***✓ Юридик мутлашыуҙар алдында муниципалитет яҡлауһыҙ ҡала, ә ниндәйҙер юридик банда ҡала ерҙәрен тартып ала. Шуға күрә яңы йүнәлеш булдырырға мәжбүрбеҙ, сығымдарҙы кәметеү маҡсатында күперҙе күсерәсәкбеҙ.***

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы оператив кәңәшмә башлыса үткән эштәргә йомғаҡ яһауға һәм киләсәккә пландар билдәләүгә бағышланды.**

# КИЛӘСӘК ЮЛДАРЫН КҮҘАЛЛАП...



Пландарға килгәндә, улар, нигеҙҙә, юл төҙөлөшөнә ҡағылды. Хакимиәттең Юлдар һәм яһалма ҡоролмаларҙы төҙөү, ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы Радмил Мөслимовтың ентекле сығышы ла ҡаланың юл инфраструктураһы объекттарын төҙөүҙең перспективалары тураһында булды. Ҡала хакимиәте инициативаһы менән Башҡортостан Республикаһының Юл хужалығы буйынса Эксперт советына ҡарауға яңы транспорт инфраструктураһы объекттарын төҙөү мәсьәләләре даими сығарылып тора. Ниһайәт, 30 августа Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов үткәргән кәңәшмәлә әһәмиәтле ҡарарҙар ҡабул ителә.

- Күперҙәрҙең ағымдағы техник торошон иҫәпкә алып һәм техник регламентҡа ярашлы, 2021 йыл һуңына тиклем Шаҡша ҡасабаһы эргәһендә 1984 йылда Ҡариҙел йылғаһы аша һалынған күпергә, шулай уҡ 1971 йылда Галле ҡалаһы исемендәге урам киҫелешендәге иҫке Затон күперенә капиталь ремонт эшләнергә тейеш, - тине Радмил Әфтәхетдин улы. - Шулай уҡ 2023 йылға тиклем Зәки Вәлиди, Пугачев, генерал Рыленко урамдарында транспорт коридорын проектлау, реконструкциялау, төҙөү буйынса эштәрҙе этаплап башҡарыуҙы тәьмин итеү бурысы ҡуйылды.

Ташкисеү районында Ҡариҙел йылғаһы аша күпер һалыу, Көньяҡ, Колгуевский, Кузнецовск Затоны биҫтәләрендә күп ҡатлы йорттар төҙөлөшө һөҙөмтәһендә был йүнәлештә транспорт ағымы артты, Пугачев урамында көн һайын тығындар барлыҡҡа килә. Киләсәктә Кузнецовск Затонында тағы ла 450 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлөшө күҙалланыуы транспорт хәрәкәтен тағы ла ҡатмарлаштырасаҡ. Был йүнәлештә Салауат Юлаев проспекты менән Зәки Вәлиди урамы киҫелешендәге юл сиселешен реконструкциялау талап ителә, шулай уҡ юл һыҙаттарын арттырыу ҙа кәрәк. Был проект эшләнгән, тормошҡа ашырыу өсөн әҙер, төҙөлөш-монтаж эштәре 808 миллион һум тора...

Әйтергә кәрәк, һәр бер участка буйынса Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялаловтың үҙенең комментарийҙары бар ине. Мәҫәлән, Пугачев урамы һәм Ташкисеү күпере буйынса ул бына нимә тине: "2004 йылда Ағиҙел йылғаһы аша һалынған иҫке күперҙең авария хәлендә булыуы асыҡланғас, ҡала хакимиәте һәм республика етәкселеге менән берлектә яңы күпер төҙөү мәсьәләһе килеп тыуҙы. Иҫке күперҙе япҡанда бөтөн транспорт ағымын яңы күпергә йүнәлтергә кәрәк ине. Әммә ҡайһы бер субъектив сәбәптәр арҡаһында урам юлы төҙөлөшө, проект әҙер булһа ла, хәл ителмәне. Һөҙөмтәлә нимәгә өлгәштек? Заманса күперҙән 4 һыҙатлы юл килә лә, Пугачев урамында ике һыҙатҡа килеп төртөлә. Һөҙөмтәлә урамда транспорт хәрәкәте сикләнә. Унда ни бары километр ярым киң урам кәрәк. Армавир урамында С. Перовская урамына сыҡҡан юл сиселешен эшләп, Ташкисеү күперенең ҡеүәтен файҙалана башланыҡ. Был күпер ҡала өсөн бик мөһим объект", - тип белдерҙе ул. Әйткәндәй, Пугачев урамында төҙөлөш эштәре 2019 йылға планлаштырылған.

Радмил Мөслимовтың артабанғы сығышы Дуҫлыҡ монументында транспорт хәрәкәтен көйләү мәсьәләһенә ҡағылды: "Киләсәктә бында Сочи урамы киҫелешендә транспорт ағымын айырыу маҡсатында юл сиселеше төҙөлөшө планлаштырыла. Дуҫлыҡ монументынан Ағиҙел яры буйына алып сыҡҡан йәйәүлеләр өсөн ер аҫты үткәүеленең проекты әҙер, ул тормошҡа ашырыуҙы көтә. Төҙөлөш- монтаж эштәре 142 миллион һум тәшкил итә".

"Был проектты тормошҡа ашырһаҡ, беҙ Дуҫлыҡ монументынан Салауат Юлаев һәйкәленә тиклем йәки, киреһенсә, иҫ киткес матур туристик маршрутҡа эйә буласаҡбыҙ. Был объектты ла бер йыл эсендә төҙөп бөтөргә кәрәк. Был йәһәттән тәжрибәбеҙ бар, сөнки һуңғы 35 йылда ике - Дан бульварында һәм Үҫмерҙәр китапханаһы туҡталыштарында шундай үткәүел төҙөнөк. Шулай уҡ Пушкин урамындағы Актерҙар йорто туҡталышында һәм Мостай Кәрим урамынан авиация университетына алып сыҡҡан ер аҫты үткәүелдәре проекттары әҙер, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы. - Мостай Кәрим урамының ике кварталын йәйәүлеләр урамы итеү варианты ла бар, был мәсьәләне ентекле эшләргә кәрәк".

Шәхси торлаҡ төҙөлөшө үҫеүенә бәйле, баш ҡаланың Октябрь районы территорияһында, атап әйткәндә Зинин, Нуғай, республиканың Иглин районына ҡараған Аҡбирҙе, Ҡарамалы, Шипово, Блохино, Охлебинино ауылдарында тимер юлын үтеү транспорт хәрәкәтен ауырлаштыра. Пик сәғәттәрендә бында 50-60 минут көтөргә тура килә. Бынан тыш, ошо участкаларҙа бик йыш авариялар күҙәтелә, кешеләр һәләк була. Был мәсьәлә буйынса ҡала хакимиәтенә граждандар бик йыш мөрәжәғәт итә. "2019-2021 йылдарҙа Зинин ауылында транспорт сиселешен төҙөү өсөн ҡала бюджетына финанстар бүлеү тураһында ҡарар ҡабул ителде", - тип белдерҙе Радмил Мөслимов. Ирек Ялалов мәсьәләгә асыҡлыҡ индереп: "Зинин ауылы эргәһендә яңы йүнәлеш проектын туйып һикергәндән эшләмәйбеҙ. Иҫке юл ниндәйҙер мөғжизә менән милек хоҡуғына күскән. Тәүҙә унда ваҡытлы биналар һәм ҡоролмалар ғына бар ине, хәҙер иһә капиталь төҙөлөш бара. Юридик мутлашыуҙар, юридик схемалар алдында муниципалитет яҡлауһыҙ ҡала, ә ниндәйҙер юридик банда ҡала ерҙәрен тартып ала. Шуға күрә яңы йүнәлеш булдырырға мәжбүрбеҙ, сығымдарҙы кәметеү маҡсатында күперҙе күсерәсәкбеҙ", - тине.

Ҡала хакимиәте шулай уҡ Салауат Юлаев проспектын Маршал Жуков урамынан Сельская Богородская урамына тиклем һуҙыу буйынса ла эшмәкәрлек алып бара. Унық проекты әҙер, дәүләт экспертизаһының һығымтаһын алған. Проекттың дөйөм хаҡы 12,9 миллиард һум тәшкил итә. Төҙөлөш эштәре 2022-2024 йылдарға планлаштырылған.

Юл һәм күпер төҙөлөшөндәге тағы бер мөһим объект - Затондан Интернационал урамы киҫелешенә тиклем тура юл асыу. Был да заман талабы, сөнки Лихачев промзонаһы, Алексеевский ауыл советына ҡараған биләмәләрҙең үҫеүе һөҙөмтәһендә транспорт ағымы арта. Ҡала хакимиәте заказы буйынса 2016 йылда объект проектланып, ыңғай һығымта ала. Проектты тормошҡа ашырыу өсөн 8,3 миллиард һум сығым күҙаллана. Бынан тыш, баш ҡалала яңы биҫтәләр барлыҡҡа килеүе лә уларға юлдар һалыу талабын көн үҙәгенә сығара. Был йәһәттән, Инорс, Глумилино, Затон, Дим районы буйынса проект документтары әҙерләнгән һәм ыңғай баһа алған, уларҙа юлдар төҙөүҙең дөйөм хаҡы 1,75 миллиард һумға барып баҫа.

Радмил Мөслимовтың сығышын йомғаҡлап, ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов: "Бөгөн махсус рәүештә юл төҙөлөшө тураһында ентекләп һөйләүҙе һораным. Күреүегеҙсә, проекттар 2004-2006 йылдарҙа уҡ эшләнгән. Тиҫтә йылдан ашыу ошо объекттарҙы төҙөү тураһында стратегик ҡарар ҡабул ителеүен көтөргә тура килде. Хәҙер инде яҡын киләсәктә, йәғни алдағы 5-7 йылда юл инфраструктураһын үҫтереү буйынса нимә менән шөғөлләнәсәгебеҙ билдәле. Алда амбициоз бурыстар торһа ла, улар ҡаланы үҫтереүҙең генераль планының бер өлөшө генә. Генераль план буйынса, беҙгә булған күперҙәргә өҫтәп, тағы ла Ҡариҙел, Ағиҙел, Дим йылғалары аша барлығы 10 күпер кәрәк. Шунда ғына ҡаланың транспорт инфраструктураһы мәсьәләләрен хәл итә аласаҡбыҙ. Шуға ҡарамаҫтан, бөгөн Хөкүмәт тарафынан хупланған объекттар ҙа хәлторошто бер ни тиклем яҡшыртыу мөмкинлеген бирәсәк. Ул ғына ла түгел, ҡаланың уңайлы йәшәү ҡалаһы булараҡ ылыҡтырыу көсөн арттырасаҡ. Икенсе яҡтан, яңы күперҙәр сыҡҡан урындарҙағы ҡала ерҙәренең инвестицион әһәмиәте артасаҡ. Ғәмәлдә, төҙөлөштән һуң был ерҙәр иҫәпкә алынып, инвесторҙарға тәҡдим ителәсәк", - тип белдерҙе.

Бөгөнгө көрсөк һәм иҡтисади тоторoҡһоҙлоҡ заманында ҡаланың, Хөкүмәттән ярҙам һәм хуплау булмағанда, яңғыҙы ғына киң ҡоласлы проекттарҙы тормошҡа ашырыуы икеле, әлбиттә. Әммә юҡҡа ғына түҙгәнгә - түш, тимәйҙәр. Тиҫтә йыл үтеп китһә лә, ниһайәт, ниәтләнгән проекттар тормошҡа ашырылыуына өмөт барлыҡҡа килде. Ә инде башланған эш - бөткән эш. Алдағы биш йыллыҡта бөгөн телгә алынған проекттарҙың тулыһынса тормошҡа ашыуына шаһит булырға яҙһын, тип теләйек.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Росгвардияның Башҡортостан буйынса идаралығы 17-28 сентябрҙә төбәктә "Ҡоралыңды тапшыр" иҫкәртеү операцияһын үткәрә. Ведомствоның матбуғат хеҙмәтендә асыҡлыҡ индереүҙәренсә, һәр кем законһыҙ һаҡланған ҡоралдар, боеприпастар, шартлатҡыс матдәләр һәм шартлатыу ҡорамалдарын тапшыра ала. Бының өсөн енәйәт йәки административ яуаплылыҡ янамай. Аҡсалата бүләкләү ҡаралған.

✓ Быйылғы эпидемиологик миҙгелдә рәсәйҙәр киҙеүҙең ике яңы хәүефле штамдарын тоя ала. Республикала киҙеүҙең яңы штамдарына ҡаршы вакциналау башланған да инде. Тап ул хәүефте кәметә - прививка яһатҡан кеше ауыры һа ла, ул сирҙе еңелерәк үткәрә. Иммунизация өсөн иң уңайлы осор - сентябрь-октябрь, сөнки грипп вирусы күсеп йөрөмәй, ә иммун системаһы вакцинаға яуап бирергә әҙер. Әммә прививканы сирҙең эпидемик күтәрелешенә тиклем эшләтергә кәрәк.

✓ СПИД һәм йоғошло ауырыуҙарға ҡаршы көрәш һәм иҫкәртеү үҙәге белгестәре Башҡортостанда ВИЧ менән сирләү тураһында яңы мәғлүмәттәр баҫтырып сығарҙы. Мәғлүмәттәргә ярашлы, республикала 324 йөклө ҡатын-ҡыҙ ВИЧ йоҡторған. Бөгөн 15 йәшкәсә 222 үҫмер иҫәптә тора, уларҙың 216-һы - әсәләренән (перинаталь юл), өсәүһе - парентераль (инъекциялар аша), берәүһе күкрәк һөтө аша йоҡторған. Шулай уҡ ВИЧ-инфекция менән тыуған 283 сабый (158 малай һәм 125 ҡыҙ) тураһында билдәле булды.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте йылылыҡ өсөн түләүҙең яңы системаһына күсеү ваҡытын кисектереү тураһында ҡарар ҡабул итте. Быға тиклем 2018 йылдың 1 октябренән республиканың 17 муниципалитеты ошо хеҙмәт өсөн йылытыу осоронда ғына түләй башлар тип күҙаллағайны. Ләкин үҙгәрештәрҙең граждандарҙың коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүе артыуына килтереү ихтималлығына бәйле, 5 сентябрҙә Башҡортостан Хөкүмәте яңы түләү системаһына күсеү хаҡында ҡарарҙы ғәмәлдән сығарған ҡарар ҡабул итте.

✓ Өфөлә ЮХХДИ-ның район-ара теркәү-имтихан тапшырыу бүлеге Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 147 адресы буйынса ремонтланған бинаға күсте. Ремонт ваҡытында бүлек бер нисә айға Индустриаль шоссеға күскәйне. Бүлмәләр граждандарға дәүләт хеҙмәттәре күрһәтеү өсөн тулыһынса әҙер, тип хәбәр иттеләр төбәк Дәүләт автоинспекцияһында. Эш ваҡыты: шишәмбе-шәмбе иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем; йәкшәмбе һәм дүшәмбе - ял көндәре.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӨФӨБӨҘ...

## Рәсәй балының баш ҡалаһы булыр



**Ошо көндәрҙә Өфөлә тәүге тапҡыр ойошторолған Бал фестивале старт алды. Баш ҡаланың Спорт һарайы алдындағы майҙанға был юлы республика район-ҡалаларынан 150-ләп умартасы йыйылды һәм үҙ продукцияһын һатыуға ҡуйҙы. Ҡала хакимиәте был юлы бал йәрминкәһен йылдағынан иркенерәк майҙанда уҙғарып, баш ҡала халҡына татлы уңыш өлгөләренең бар төрлөлөгө менән бер юлы танышыу мөмкинлеге бирҙе.**

Бал фестивален асыу тантанаһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡалала бал йәрминкәләре уҙғарыу йолаһының нығыныуын билдәләне, быйылғы сараны, умартасыларға ла, баш ҡала халҡына ла, килгән ҡунаҡтарға ла уңайлы булһын өсөн фестиваль рәүешендә үткәрергә ҡарар ителеүен белдерҙе һәм: "2021 йылда республикала үтәсәк "Апимондия" халыҡ-ара ҡортсолоҡ конгресы баш ҡалабыҙға Рәсәй балының баш ҡалаһы исемен ныҡлап беркетеп ҡуйыу мөмкинлеген бирәсәк", - тигән ышанысын да йәшермәне.

Өфөгә был исем дә йәбешер, шик юҡ, ә был көндө балға, бал һатыусыларға һатып алыусылар, балалар ғына түгел, хатта бал ҡорттары үҙҙәре лә һырып-һырыны. Балалар тигәндәй, уларҙы күҙәтеп кенә лә, был көндө иң тәмле бал ҡайҙа һатылыуын белә алыр ине иғтибарлы һатып алыусы. Балалар күберәк ҡайһы ағай йә апай эргәһендә урала, шуның балы татлыраҡ, тимәк. Һатып алыусыларҙы ылыҡтырыу өсөн ҡортсолар һәр кемгә бәләкәй генә пластик балғалаҡ менән "шәрбәт" тәмләп ҡарау мөмкинлеге биргәнгә күрә, бер нисә баланың туйғансы уҡ булмаһа ла, бал "эксперты" була яҙғансы бал ашауын үҙ күҙебеҙ менән күрҙек. "Балығыҙҙы тәмләп ҡарарға яраймы", тип, ҡыуыштан-ҡыуышҡа, тирмәнән-тирмәгә йөрөүсе әрһеҙ малай-шалайҙар араһында ла, бәлки, буласаҡ Ивнәй Шафиҡовтар, Әнүәр Дилмөхәмәтовтар барҙыр.

Ошо урында фестивалде тере тауыш менән йырлаусы йырсылар сығышы ла биҙәүен әйтеп, мәҡәләне тамамлағанда ла булыр ине. Тамамламай торайыҡ. Алда беҙ өс умартасы менән танышырбыҙ. Уларҙың өсөһө лә 35-тән кәм умарта тотмай, өсөһө лә был эштә "йылан аяғын киҫкән", тиһәк, хата булмаҫ.

Тәүге геройыбыҙ, Салауат районы Йонос ауылынан хәләле Ләйсән менән килеп еткән Айҙар Ғибәҙуллин беҙҙе өҫтәлен матур итеп биҙәүе менән ылыҡтырҙы. Айҙар Артур улы менән ихлас ҡына әңгәмә ҡороп алдыҡ. Ул БДУ-ның физика-технология факультетында уҡыған икән. "Беренсе курсты тамамлағайным, ҡорт тотоусы апайым бер күс бүләк итте. Умартаны күрше мәрхүм Филлер бабайҙан алып торҙом. Ул йылы көҙ был умартам мандый алманы - балын сит ҡорттар урланы ла бөттө", - тип, умартасылыҡ тауын нисегерәк, ниндәй юлдар менән яулауын бәйән итте Айҙар. Ошо бер күс егеттә ҙур ҡыҙыҡһыныу уята һәм ул икенсе йылында бер түгел, дүрт күс һатып ала, уларҙы имен йәйләтеү, ҡышлатыу өсөн махсус рәүештә өйрәнә башлай. "Ҡортсолоҡ менән 8 йыл ғына шөғөлләнһәм дә, бөгөн 65 умартам бар!" - тип, ҡыуанысы менән уртаҡлаша Айҙар. Йәш умартасы инә ҡорттарҙы махсус үрсетеү технологияһын ҡуллана икән. "Ошо ғилемде оло умартасыларға ла әйтеп, ҡолаҡтарына төшөрөргә маташып ҡарағаным булды, ҡайһы бер ағайҙар: "Мин үҙем беләм" тигәндән ары китә алманы. Ә умартаны дөрөҫ ишәйтеү өсөн ғилемле, белемле булыу кәрәк бит", - тине Айҙар Ғәбиҙуллин. Беҙҙең: "Был шөғөл сығымдарҙы аҡлаймы, табыш килтерәме?"- тип һорауыбыҙға: "Мерседес" алыуға етмәһә лә, икмәк-майға етерлек килем бирә", - тигән һүҙҙәре хәтергә уйылды.

Артабан йәрминкә майҙанының икенсе "урам"ына килеп сыҡҡайныҡ, башҡорт милли кейемендә йылмайып баҫып тороусы апайҙарҙы күреп, улар янына ла туҡталдыҡ. Әбйәлилдәр икән, район үҙәге Асҡарҙан килеп еткәндәр. Төркөм етәксеһе Мәзүнә Рәсих ҡыҙы Ибраһимова 1985 йылдан умартасы тип аталған ауыр йөк тарта булып сыҡты. "Иң тәүҙә 17 йыл райондың умартасылыҡ инспекторы булып эш башланым. Үҙгәртеп-ҡороуҙар башланғас, беҙгә, республиканың 54 инспекторына, иғтибар кәмене. Беҙ ярға ырғытылған балыҡ хәлендә ҡалдыҡ. Ҡайһыбыҙ үҙ эшен асты, ҡайһыбыҙ ситкә китеп, тереклек ҡылды, - тип башланы бәйәнен Мәзүнә Рәсих ҡыҙы, - ғүмер буйы туплаған белемде юғалтҡы килмәгәнлектән, мин дә үҙ эргәмә уҡыусылар туплап, умартасылыҡ йүнәлешендә алға атларға ҡарар иттем заманында һәм яңылышмағанмындыр, тип уйлайым. Бөгөн 35 уҡыусым бар, тиҫтә йыл буйы йәштәргә умартасылыҡ, ҡортсолоҡ серҙәрен төшөндөрәм. Улар минең менән бергә ҡырҙа, умарталыҡтар араһында йөрөп, яңы һөнәр үҙләштерә. Уҡыусыларымдың береһе - Шамил Йәрмөхәмәтовтар ғаиләһе менән килде бөгөнгө фестивалгә..."

Йәрмөхәмәтовтарҙы гәзит уҡыусы яҡшы хәтерләйҙер - былтыр Өфөлә үткән ҡортсолар ярышында династиялар араһында был ғаилә беренсе урын яулағайны. Беҙ был ярыш тураһында яҙып та сыҡҡайныҡ. Был юлы Йәрмөхәмәтовтар фестивалгә 9-сы синыфта уҡыусы улдары Иҙел һәм 5 йәшлек ҡыҙҙары Ғәзизә менән килгән. Өҫтәмә белем биреү дисциплинаһы уҡытыусыһы Фирүзә апай әйтеүенсә, бәләкәй Ғәзизәнең ҡунаҡтар алдында бейеүе бик йылы ҡабул ителгән. Умартасылыҡҡа бәйле әңгәмәбеҙ барышында Фирүзә Йәрмөхәмәтова балдың кеше һаулығына файҙаһын әйтеп үтте. Ғаилә башлығы Шамил ағай, һөнәре буйынса стоматолог булараҡ, ҡортсолоҡтоң да, стоматологияның да ғәйәт ҙур иғтибарлылыҡ, теүәллек талап итеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды.

- Стоматология күберәк психологик эш, ә умартасылыҡ физик эш булғанға күрә, икенсеһе беренсеһенә ҡамасау түгел. Киреһенсә, төп эшемдән арып ҡайтҡандан һуң мин 30-лаған умартамды тәрбиәләгән саҡта ял итәм, - тине ғаилә башлығы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һай, был бал тигәндәре! Мең тапҡыр һөйләгәнгә ҡарағанда, бер тапҡыр тәмләп ҡарау яҡшыраҡ. Һеҙ ҙә ошондай йәрминкәләргә сығып, бал еҫенә иләреп, бал тәменә кинәнеп ҡайтҡанығыҙ барҙыр бит. Йәшәһен умартасыларыбыҙ, йәшәһен башҡорт тоҡомло бал ҡортобоҙ, тиергә генә ҡала!**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТАШЛАМАҒА ...

**1 октябргә тиклем Башҡортостанда льготаға хоҡуғы булғандар киләһе йылда дәүләт ярҙамын ниндәй төрҙә алыуҙы хәл итергә һәм социаль пакет йәки аҡсалата компенсацияны һайларға тейеш.**

Быйыл 2019 йылға социаль хеҙмәттәр йыйылмаһын алыу формаһын үҙгәртеү тураһында ғариза биреү ваҡыты йәкшәмбе, 30 сентябрҙә тамамлана. Ҡануниәткә ярашлы, әгәр аҙаҡҡы көн ялға тура килһә, Пенсия фондының клиент хеҙмәтенә шәхсән мөрәжәғәт иткәндә ғаризалар унан һуңғы эш көнөндә, йәғни 1 октябрҙә ҡабул ителә. Әлеге ваҡытта социаль пакеттың хаҡы айына 1075,19 һум тәшкил итә, уға тейешле дарыуҙар менән тәьмин итеү, шифахана-курорт дауалауы һәм тимер юл транспортында йөрөү инә. Йылына бер тапҡыр - 1 октябргә тиклем бынан аҡсалата компенсация файҙаһына баш тартырға йәки ошо хеҙмәттәрҙе алыу хоҡуғын кире ҡайтарырға мөмкин. Льготаларҙы алыуҙың элекке тәртибен һаҡлау теләге булғанда ғариза яҙырға кәрәкмәй. Әгәр кеше был тәртипте үҙгәртергә теләй икән, ғариза яҙырға кәрәк. Рәсәй Пенсия фонды идараһы ағзаһы, Башҡортостан буйынса идарасы Фоат Хантимеров һүҙҙәренсә, республикала федераль льго--таға эйә 321 мең кеше йәшәй. Уларҙың 287 меңдән ашыуы (89 процент) социаль хеҙмәттәр йыйылмаһынан йәки уның айырым өлөшөнән аҡсалата компенсация ала. Социаль хеҙмәттәр алыу, уларҙан баш тартыу йәки алыуҙы тергеҙеү тураһында ғариза яҙыу өсөн ведомствоға килеү мотлаҡ түгел. Быны Пенсия фонды сайтында "Граждандың шәхси кабинеты"нда эшләргә мөмкин.

# БАЛАҢ - СТУДЕНТ...

**Пенсиялағы ата-әсәләрҙең балалары юғары уҡыу йорттарында йә колледжда уҡыған осорҙа дәүләт өҫтәмә матди ярҙам менән тәьмин итә.**

Закон буйынса уларға страховкалы пенсия арттырыбыраҡ түләнергә тейеш. Бының өсөн студенттың 23 йәштән дә өлкән булмауы һәм Рәсәй Федерацияһының, шулай уҡ сит ил уҡыу йорттарының төп мәғариф программалары буйынса көндөҙгө бүлектә уҡыуы шарт булып тора. Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров әйтеүенсә, билдәләнгән түләүҙәр ҡартлыҡ һәм инвалидлыҡ буйынса пенсияларға өҫтәлә. Пенсия фондына ғариза менән ата-әсәнең икеһе лә мөрәжәғәт итә ала. Өҫтәмә суммаһы 2018 йылда 4 982 һум 90 тин күләмендә билдәләнгән түләүҙең өстән бер өлөшөн тәшкил итә. Шулай итеп, пенсияға өҫтәмә түләүҙең суммаһы айына - аҫрауҙа 1 кеше булғанда - 6643 һум 87 тин, 2 кеше икән - 8304 һум 84 тин, 3 кешегә 9965, 81 һум тәшкил итә. 18 йәшкәсә балаларға түләү уларҙың уҡыуы йә аҫрауҙа булыуына ҡарамаҫтан билдәләнә, 18 йәштән олораҡ балаларҙың тыуыу тураһындағы таныҡлыҡтарына өҫтәп, уларҙың вузда уҡыуы һәм аҫрауҙа булыуын раҫлаған документтар ҙа талап ителә. Вуздан алынған белешмәлә уҡыуға алынған дата күрһәтелергә тейеш. Страховкалы пенсияға билдәләнгән түләү күләмен ҡайтанан иҫәпләү мөрәжәғәт иткән айҙан һуңғы айҙың тәүге көнөндә башҡарыла. Студент уҡыуын ташлаған йә ситтән тороп уҡыу бүлегенә күскән хәлдә уның ата-әсәһенең страховкалы пенсияһына өҫтәмә түләү туҡтатыла.

**РФ Пенсия фонды Башҡортостан бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Остеопороз

❖ Остеопорозды дауалағанда дарыуҙар ҡабул итеү менән бер рәттән организмды кремний менән байытырға кәрәк. Кремний һалынған һыу эсергә, сельдерей, ҡыяр, бәпембә япрағы, порей һуғаны, шалҡан, редис ашарға кәрәк. Ҡырҡбыуын (хвощ полевой) үләне төнәтмәһе файҙалы. Әммә кремнийҙың төп сығанағы - таҙа аҡ балсыҡ. Уны көнөнә 1 ҡалаҡ ашарға.

### Арпа

❖ Күҙгә арпа сыҡһа, ҡара икмәк киҫәген тоҙға манырға һәм ошо икмәк менән арпалы күҙгә баҫырға. 2-3 тапҡыр эшләгәндән һуң, арпа юҡҡа сығасаҡ.

### Экзема

❖ Баш тиреһе экземаһы булғанда, сәс ҡойолғанда аҙнаһына 1 тапҡыр башты йылы һыу менән йыуғандан һуң тирене 15 минут тирәһе тоҙ менән ышҡырға. Йылы һыу менән сайырға. 5-6 аҙнала дауалап була.

### Ирендәр ярылғанда...

❖ 6-7 грамм какао, 2-3 грамм балауыҙ һәм 10 грамм үҫемлек майынан яһалған майҙы һөртөргә була.

### Атеросклероз

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы һуғанды ҡабығы менән бергә турап, үҫемлек майында ялтынһыу-көрән төҫкә ингәнсе ҡыҙҙырырға. Ярты литр һыуға һалып, йомшарғансы бешерергә һәм бер аҙ һурпа өҫтәргә. Ошо һуғанлы ашты иртән ашап бөтөргә. Хәл яҡшырғансы көн һайын ҡабатларға.

### Артрит

❖ 200 грамлыҡ шешәгә камфора (рафинад шәкәренең 1/4 өлөшө тирәһендә) һалып, шешәнең 1/3 өлөшөнә скипидар ҡойорға, ошондай уҡ күләмдә зәйтүн майы өҫтәргә, ҡалған өлөшөнә шешә тулғансы спирт ҡойорға. 2 тәүлек төнәтергә. Төнгөлөккә һыҙлаған урынға һөртөргә.

❖ Әгәр ҙә ошо төнәтмәгә 100 г йоморҡа аҡһымы һәм бер аҙ гәрсис өҫтәһәгеҙ, быуын ревматизмын дауалаусы май килеп сыға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Берсә саҡырып, берсә яратып, берсә киҫәтеп, "Бәхтейәр! Баязит! Байназар!" тип уларға тәүлегенә әллә нисә тапҡыр өндәшәбеҙ. Тимәк, көнө буйы беҙҙең өйҙә матур теләктәр яңғырап тора.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# ТЫЙЫУҘАР

## Ирҙәргә ҡағылышлы тыйыуҙар:

- Ир-егет туйға саҡлы кәләшенә сәғәт бүләк итергә тейеш түгел.
- Ир кешенең әйберенән йыуғыс эшләмәйҙәр, был кәмһетеү була.
- Ир тотонған нәмәләр - бысҡы, балта, сүкеш аша атлама.
- Ҡатын-ҡыҙға ир кейемен кейергә ярамай, ирһеҙ ҡалыуы бар.
- Ирҙәргә ҡартым, тип әйтергә ярамай - бәхете кәмей.
- Ирҙәрҙең алдын ҡыймайҙар - гонаһ була.
- Ир кешенең кейемен баш түбән элмәйҙәр, был "Ҡаҙалып кит!" тип теләгән кеүек була.
- Балыҡ һөҙгәндә, ауҙы ашатлап үтергә ярамай, юҡһа, балыҡ кәмей. Балыҡ һөҙгән ерҙә ҡатын-ҡыҙ булырға тейеш түгел.
- Һунарҙан ҡайтҡанда ҡаршы осраған кешегә табышыңды әйтергә ярамай, иң һәйбәте - бер кемгә лә осрамау.
- Бүрегә ҡапҡан һалырға уйлаһаң, ул ҡапҡанды өйгә индерергә ярамай, оҙаҡ ҡына тышта торорға кәрәк. Ауҙы ла өйгә индермәйҙәр.

## Көндәлек хужалыҡта ҡулланылған тыйыуҙар:

- Иҙәнде арҡырыға йыуырға ярамай.
- Иҙәнде ишек төбөнән башлап йыума - мәйет теләй.
- Иҙән һепергәндә яңылыш ҡына аяҡты һеперергә ярамай, кәмһетелерһең.
- Көҙгөнө бүләк итергә ярамай, һәр кем уны үҙе һатып алырға тейеш.
- Көҙгөгә йыш ҡаранырға ярамай.
- Китапты асыҡ ҡалдырмайҙар.
- Килгән хаттарҙы йыйып бармайҙар, яндыралар.
- Әйберҙе сисмәгән килеш өҫтөңдә тегергә ярамай.
- Әйберҙе тиҫкәре яғы менән һалмайҙар, бәхет килмәй.
- Әйберҙе кейгәндә һул яҡтан кейә башламайҙар - юл уңмай.
- Ҡойонға осҡан нәмәне кейергә ярамай, сир табырһың.
- Бәйләгәндә энәнде сығармай тороп китмә - үлгәндә йәнең бүленер.
- Энәләге епте икенсе кешегә төйнәп бирмә - бәхет төйнәлә.
- Көйәнтәне атлап сығырға ярамай, аяғыңа шешек сығыр.
- Киҫәү таяғын, тәртешкәне ашатлап сығырға ярамай.
- Көрәкте һөйәп ҡуймайҙар - ҡәбер теләй.
- Күршең һөт индерһә, һауытын йыуып бирмә - быҙауың үгеҙ булыр.
- Ҡайсыны айырған килеш асыҡ ҡалдырырға ярамай.
- Утын киҫкәндә, өҙмәй ҡалдырма - бурысың өҙөлмәҫ.
- Тәҙрәнән тышҡа түкөрөргә ярамай.
- Мунсала доғаны күп уҡыма, шайтанға өйрәтәһең, тиҙәр.
- Төнөн мунса инмәйҙәр.
- Тауыҡ төнәгән ергә ултырырға, йәки ярау итергә ярамай.
- Ултырғысты өҫтәлдән йыраҡ ултыртмайҙар.

**Фәнирә ҒАЙСИНА.**
**(Дауамы бар).**

ӘСӘЙ ЯҘМАЛАРЫ

# МАЛАЙҘАР ТУЛЫ ДОНЪЯМ...

**Беҙҙең ғаилә башҡа ғаиләләрҙән бер нисек тә айырылмай. Өфө районының Шамонин ауылында йәшәйбеҙ, беҙҙең кеүектәр тотош бер ауыл, барыһы ла 2008-2009 йылғы махсус программала ҡатнашып, ҡулайлы ғына хаҡҡа йорт алып сыҡҡан йәштәр. Йорт һайын бала-саға, ул ваҡытта кемдеңдер беҙҙеке кеүек ике малай, кемдеңдер, киреһенсә, ике ҡыҙ, ә кемдеңдер алтын урталыҡ - ул менән ҡыҙ. Ғәҙәти ғаиләләр, ғәҙәти атай-әсәйҙәр. Голливуд киноиндустрияһының ҡалыптарына ярап ҡына тора - ҡала эргәһендәге шәхси йорт, ике бала, универсал кузовлы автомобиль...**

Яҙмыштар күктә яҙыла, ти ҡайһы берәүҙәр. Әгәр ҙә был тәғлимәт ысын булһа, беҙҙең Даян менән икебеҙҙе атай-әсәй булараҡ үҙгәрткән көн былайыраҡ булған. Аҡ ҡаластай ап-аҡ ҡына йоморо ҡуллы бер малай күктең етенсе ҡатынан Ергә ҡарап, үҙенә әсәй менән атай һайлап ултырған. Оҙаҡ та һайланмаған, әллә ни эш ҡыйратырҙай булып сәбәләнеп йүгереп йөрөгән миңә төртөп күрһәткән. "Юҡ, юҡ, - тиешкән фәрештәләр. - Күрәһеңме, уның ике бәләкәй улы бар, декреттан һуң яңы ғына эшкә сыҡҡан, дәртләнеп йөрөгән була. Туҡта, беҙ һиңә тағы бер апайҙы күрһәтәбеҙ..." "Юҡ, мин әсәйемде һайланым!" - тип еңмешләнеп китә аҡ ҡаластай аҡ ҡулдарҙың эйәһе. Фәрештәләр уға ҡарап әҙерәк уйланып тора ла: "Былай еңмешлегең уларҙың тоҡомона тартҡан, шикелле", - тип, фатиха бирә.

Ә был ваҡытта ерҙәге мин, ниндәй тылсым эйәһе булыуымды аңламай, тыпырсынып алам: "Яңы ғына эшкә сыҡҡайным бит, яңы проектым бар..." Эшем эйәһе. Аҡ ҡаластай аҡ ҡулдарҙың хужаһы ашыҡмай ҙа, һуңламай ҙа, теп-теүәл табиптар әйткән көндө донъяға килә. Тәүҙә шартына килтереп илап ала. Фәрештәләргә: "Мин тыуҙым, бөтәһе лә яҡшы!" - тип хәбәр итеүе инде был. Шунан инде үҙенә тәғәйенләнгән ҙур эшкә тотона. Беренсенән, әсәһенең, йәғни минең, теҙгенен әҙерәк тартып ҡуя. Трр, йәнәһе, ҡайҙа ашығаһың, ғүмер алда әле. Икенсенән, донъяға ҡарашты үҙгәртә. Шулай тейеш, һымаҡ ҡабул итеп алған ике ҙур улыма һөйөүем тағы ла артҡандай була. Дөрөҫ тәрбиә бирәйем, тип сәбәләнеүҙән туҡтайым. Әммә, зекер әйткәндәй, көнө-төнө ғүмер, һаулыҡ, бәхет, тәүфиҡ теләүҙән туҡтамайым. Өс баҫаһы урынға бер баҫыр, сабыр ғына әсә булырға өйрәнәм. Өр-яңынан өйрәнәм. Аҡ ҡаластай ап-аҡ ҡулдар мине шуның өсөн һайлаған бит! Машаллаһ!

Әйткәндәй, улдарым менән яҡыныраҡ таныштырыр ваҡыт етте, шикелле. Шулай итеп, беҙҙең ғаиләлә өс малай үҫә: Бәхтейәр, Баязит һәм Байназар. Өс малай, өс таған, өс бер туған. Өсөһөндә - өс төрлө холоҡ. Ҡайһы саҡ, ысынлап та, исемдәре есеменә йоғонто яһайҙыр, тигән һығымтаға киләһең. Мәҫәлән, өлкән улыбыҙға исем һайлағанда баш баланың исемендә мотлаҡ "р" өнө булһын, ә "тимер" һүҙе булмаһын, тигәйне беҙгә өлкәндәрҙән кемдер берәү. Оҙаҡ һайлап, ғаиләбеҙҙе ҡотло иткән бәләкәй генә кешекәй үҙе лә даланлы булһын тип, Бәхтейәр исемен ҡуштыҡ. Уға хәҙер 8 йәш, мәктәптә уҡый. Хис-тойғоло исем булғанғамы, ул нескәрәк күңелле. Һүрәт төшөрөргә, әкиәт тыңларға ярата. Шул уҡ ваҡытта Бәхтейәрҙең холҡонда малайҙарса ҡатылыҡ та, шуҡлыҡ-шаянлыҡ та, ҡыҙыулыҡ та бар. Һуғышып та ала, сөнки яратыуын, һағыныуын, һөҡланыуын үҙенә йомоп йәшерә белһә лә, асыуын йүгәнләп өйрәнмәгән әле.



Уртансыбыҙ Баязитҡа 6 йәш. Ғәрәп теленән тәржемә иткәндә исеме "алдан барыусы" тигәнде аңлата. Мосолман донъяһы тарихында Баязит исемле бөйөк сардарҙар күп булған икән. Был хәрби исем уртансыбыҙға тап килеп кенә тора кеүек. Әкиәт тыңламай, һүрәт төшөрмәй. Ағаһы артынан эйәреп уйнауға ҡарағанда, үҙенең дуҫтары төркөмөн булдырыуҙы хуп күрә. Бер-ике иптәше янында булһа, уларҙы әйҙәп-өйөрөп алып йөрөтә: "Хәҙер йәшенмәк уйнайбыҙ, әйҙә, баҫтырышабыҙ, киттек, велосипедта йөрөйбөҙ..."

Бына ошо ут һәм һыу, боҙ һәм ялҡын кеүек ике малай янына терәк булып өсөнсө улыбыҙ тыуҙы. Уға әле ике йәш. Байназар исеменә "яҡшы ниәт" мәғәнәһен биргәндәр. Өсөнсө улыбыҙ тормошобоҙҙо үҙгәртте. Ғаиләбеҙ күп балалы тигән социаль статус алды, шул уҡ ваҡытта беҙ һан яғынан ғына артманыҡ, күңелебеҙ ҙә байыны. "Тағы бер балаға иғтибарыбыҙ, һөйөүебеҙ етерме?" тигән борсолоу юҡ беҙҙә. Һөйөү кәмемәй, арта ғына, уны үлсәп тә булмай, бер йә ике балаға ғына, тип бүлгеләү ҙә мөмкин түгел икән. Тағы бер бәпес барлығы ике ағайҙың холҡона ҙур үҙгәреш индерҙе. Хәҙер береһе - икеләтә ағай, ә икенсеһе, бәпес булыуҙан туҡтап, иңенә яуаплылыҡ алып өйрәнә. Ағайҙарына бына шундай матур бурыстар, ғаиләбеҙгә яҡшы үҙгәрештәр өҫтәп донъяға килде ул Байназар.

Кешенең исеме бөтөн булмышына, хатта яҙмышына йоғонто яһауына борондан ышанғандар. Йәш аралары ҙур булмағас, улар бергә уйнай, бергә шаяра, хатта бергә эш боҙа. Берсә саҡырып, берсә яратып, берсә киҫәтеп, "Бәхтейәр! Баязит! Байназар!" тип уларға тәүлегенә әллә нисә тапҡыр өндәшәбеҙ. Тимәк, көнө буйы беҙҙең өйҙә өс малайға бер юлы "Бәхетле бул!", "Әйҙәүсе бул!", "Яҡшы ниәтле бул!" тигән матур теләктәр яңғырап тора.

Шулай итеп, мин хәҙер ғәҙәти әсәй түгел. Малайҙар әсәһе мин. Ике ул үҫтергәне малайҙар әсәһе түгелме ни, тиерһегеҙ. Юҡ, әсәйҙәрҙең хаҡын һис кенә лә кәметмәйем. Ике ул үҫтергәне лә, ҡыҙҙар ғына һөйгәне лә, ул менән ҡыҙ тәрбиәләгәне лә һоҡланыуға лайыҡ. Тик... бер-бер артлы тыуған өс малай әсәһе булыу... саҡ ҡына икенсерәк. Һеҙ ризамы? Беренсенән, һәм иң мөһиме, малайҙар әсәһе һәр ваҡыт малайҙар араһында, малайҙар уртаһында, малайҙар ҡосағында. Улар бөтөн ерҙә лә. Малайҙар өйҙә. Малайҙар тышта. Малайҙар кухняла, йоҡо бүлмәһендә, йыуыныу бүлмәһендә. Малайҙар диванда, карауатта, шкаф эсендә, өҫтәл аҫтында... Бәпес булыуҙан туҡтағас, һәр ир балаға малай төҫө инә башлай. Һәм башланаааа... Малайҙар тауыш ярата, әммә үҙҙәренә тауыш күтәргәнде яратмай. Малайҙар тыңламай, әммә үҙҙәрен тыңлауҙы талап итә. Малайҙарҙы өҫтәл артына ултыртыуы еңел түгел. Ултырһалар инде, умырғансы ашайҙар, әммә арттарынан бер оя себештәрҙе туйҙырырлыҡ ризыҡ ҡала. Түккән аштарының туҡмасы ҡолаҡтарында эленеп торһа ла, етди булып ҡала беләләр. Йәки, матур күлдәк-салбар кейҙереп, бабочкалар тағып, тәрбиәле итеп күрһәткең килә, ә улар Маугли ҡыланмағанды ҡылана. Уларҙың үҙҙәре генә белгән серҙәре бар, үҙҙәренең законы, үҙҙәренең генә донъяһы. Улар таш ташлап, сәпкә тейһәләр ҙә, ағасҡа үрләһәләр ҙә, мунса башына менһәләр ҙә, ат башындай алтын тапҡандай ҡыуана. Ғөмүмән, ябай ғына нәмәләргә шатлана улар - карауатҡа менеп һикерһәләр, мендәр йөнөн туҙҙырһалар, резина итек эсенә һыу тулғансы яҙғы күләүек кисһәләр. Малайҙар - йомғаҡ. Был йомғаҡҡа ҡыҙыҡһыныусанлыҡ менән тиктормаҫлыҡ ептәре сиратылған. Был йомғаҡ, ҡояш энергияһын туплап эшләгән батарея кеүек, һәр ваҡыт хәрәкәттә. Малайҙарҙы бөтә нәмә лә ҡыҙыҡһындыра - тутыҡҡан иҫке бәке, метеорит, кеҫәртке һәм ауылдың тегеееее осондағы берәүҙәрҙең мунсаһынан сыҡҡан төтөн. Һорауҙар? Ә һорауҙарҙы уйлап сығарыусы донъя-

✓ *Бер-беребеҙҙе быңдай ғәйбәттәрҙән тыйып тороу кәрәк. "Тел һөйәкһеҙ" тиҙәр. Әммә уның һөйәкһеҙ булыуы телдең хужаһын аҡламай. Һәммәләребеҙҙең аҡылы теле менән идара итергә тейеш.*



лағы иң ҙур фантазия фабрикаһы малайҙарҙың башында урынлашҡан.

Малайҙар арыта, малайҙар арманһыҙ итә. Малайҙарҙы түрбаштан, йоҡо бүлмәһенән, ваннанан ҡыуып сығарып була. Ә йөрәктән - юҡ. Сөнки малайҙар бөтә ерҙә лә. Тишек туптың эсенә ҡом тултырып, "груша" эшләп ҡуйған атайҙың эсендә лә бәләкәй малай бар. Олатайҙарҙың да эсендә шаян тиктормаҫ йәшәй. Хатта бәпембәләй ап-аҡ башлы ике ҡартатай ҙа ҡайһы берҙә хас та малайҙарса шаяра, ҡыуана...

Малайҙар телефондан шылтырата, малайҙар итәктән тарта, малайҙар иғтибар талап итә. Малайҙар өйҙә, малайҙар тышта, малайҙар бөтә ерҙә лә. Минең донъям шул шаян, тиктормаҫ йән эйәләре менән тулы.

Уллы булыу бәхетенә өлгәшкән барлыҡ әсәйҙәр ҙә минең менән ризалыр: ир балаға әсә булыу саҡ ҡына икенсерәк. Быны мин өс тапҡыр бала табыу йортоноң палатаһында ятҡан малайҙар әсәһе булараҡ әйтәм. Өсөнсөгә әсәй булғас, палатаға улым менән һуң ғына, төндә килеп урынлаштыҡ. Дүрт ҡатынбыҙ, бәләкәстәребеҙҙең тәгәрмәсле карауаттарын янъыбыҙға терәп ҡуйып, хазиналарыбыҙға сытырман йәбешкәнбеҙ. Йыуыҙ имеп туйған улым йоҡлап китте. Мин дә, улым йоҡлағанда серем итеп алайым, тип яттым, тик йоҡлармын, тимә. Палаталағы бер бәпес тызылдығын сыҡты төнө буйы. Йоҡо аралаш бәләкәстең көслө генә тауышын баһалап, "малай шикелле" тип уйланым да, күҙҙәрҙе сытырлатып йомоп йоҡларға тырыштым, сөнки беләм - иртәгә йоҡоһоҙ төн минеке буласаҡ. Шулай булды ла. Иртәгеһен төндә йоҡоһоҙҙар вахтаһына мин дә тороп баҫтым тыҙ-быҙ килгән улымды күтәреп. Ә теге ике әсәй йоҡлай! Алһыу ғына одеялдарына төрөнөп, мыш-мыш йоҡлаған ҡыҙҙарын сәғәткә ҡарап "имеҙергә ваҡыт" тип уятып алалар ҙа тағы йоҡлайҙар. Ә беҙ һаҡта торабыҙ, ҡыҙҙарҙың йоҡоһон һаҡлап. Малайҙар бит, буласаҡ ил һаҡсылары, тиғән булып көлөшәбеҙ үҙебеҙ, йоҡоһоҙлоҡтан шешенгән күҙҙәрҙе саҡ асып.

Әйтәм бит, ир балаға әсәй булыу икенсе. Йоҡоһоҙ төндәрҙән башланып китә лә, йоҡоһоҙ төндәр менән сиратлаша, аҙаҡ уларҙы йоҡоһоҙ төндәр алмаштыра. Их, ҡыҙ саҡта шул йоҡоно запасҡа туйҙырып ҡуйып булһа икән ул! Бәләкәсең менән йоҡоң туймай киткән саҡтарҙа, һыуытҡыстан ит алған кеүек, йәһәт кенә запасҡа һалып ҡуйған йоҡондо һөйрәп килтереп сығарһаң да... әсәй тағы матур, яғымлы, яҡты йөҙлө. Ә былай... Төндә карауатында илап ятҡан бәпесенде бәүетәм икән, тип, атаһының ҡулбашын дер һелкеткән саҡтар ҙа булғылай.

Шул йоҡоһоҙ төндәр сәбәпсеһе булған бәләкәй кешекәйгә ҡарайһың да, тағы иҫең китә. Ҡалай оҫта итеп атаһына тойолғарын белдерә! Тыуғандан алып эргәһендә инә ҡаҙҙай тыпырлайһың, ә ул тәүге тапҡыр атаһына йылмая. Тешһеҙ ауыҙын мөнтәйтеп, тауыш сығарғанын көтәһең, ә ул атаһына тәүҙә һүҙ ҡуша. Һин сәпәкәй итергә өйрәтәһең, ә ул атаһының эштән ҡайтыуына ҡул сабып ултыра. Имгәкләп күрһәтәһең, атларға өйрәтәһең, ә ул тәүге аҙымдарын атаһына эйәреп яһай. Шуға, атаһы эштән ҡайтыуға, һине һағынған, тип ҡулына тотторһаң да, "сәй бөткән, тоҙ юҡ, шырпы кәрәк" тиғән һылтау табып тышҡа атылаһың. Кистең аяҙ саф һауаһы ниндәй рәхәт, тип һоҡланып та өлгөрмәйһен, кеҫәндә телефон шылтырай: "Ыштаны ҡайҙа?" Тәнкләп кенә һалып ҡуйған таҙа кейемдәре ҡайҙа булғандыр. Ҡайтаһың инде. Әсәйҙең бәләкәй генә ялы тамам һәм тағы ла бәләкәс кеше эргәһенә вахтаға тороп баҫаһың. Һүҙемдең башында уҡ беҙ Шамонин ауылында йәшәйбеҙ, тип юҡҡа ғына әйтмәнем мин. Шамон, Шамония тигән булабыҙ үҙебеҙ йәшәгән ауылды. Ҡайһы бер журналистар, шаяртып, "Башҡортостандың баш ҡалаһы" тип арттырып ебәрә. Ризабыҙ уныһына ла, сөнки хәҙер Башҡортостанда "Ҡайҙа ҡарама - Баймаҡ" тиғән лаҡап түгел, "Бөтөн ерҙә - шамониндар" тиғәне киң таралған. Кем менән генә танышһаң да, кем менән генә табындаш булһаң да, мотлаҡ берәй уртаҡ танышығыҙ Шамонинда йәшәй килеп сығасаҡ. Шулай, бөтөн юлдар Шамонинға илтә һәм беҙҙең ауылда, хас та Грецияларға кеүек, бөтә нәмә лә бар. Биҙәндереп төҙәндерәләр, сәсте ҡырҡып тарайҙар, тырнаҡ игәп буяйҙар. Шул арала баланды ҡарап торалар, мәктәптән йә садиктан алалар. Матур күлдәк һайларға ярҙам итәләр, хатта сауҙа үҙәгенә алып бара алалар. Күлдәк итәген тамалап, салбар балағын да ҡыҫҡартып бирәләр. Ҡунаҡ киләме? Аш һалырға ит тә һатыла - ҡош-ҡорт, ваҡ мал, эре мал. Сәйгә ҡуйырға тәмле бәлештәр, ҡупшы торттар, фырт кап-кейктар. Ҡунаҡ булып йөрөп артыҡ һимереп киттеңме? Бер минут! Һеҙҙе тиҙ генә ябыҡтырырҙар.

Шундай егәрле, бөтмөр халыҡ йәшәй беҙҙә. Әйткәндәй, был эштәрҙең күбеһе менән нәфис заттар булыша. Ир-ат баш ҡалаға йөрөп эшләй, ә ҡатын- ҡыҙҙарҙың күпселеге өйҙә, балалар ҡарай. Әүҙем әсәйҙәр ауылда матур саралар ҙа үткәреп тора. Олораҡ быуын апайҙар ағинәйҙәр төркөмө ойоштороп ебәрҙе. Һүҙ башында әйтеп үткән ғәҙәти ғаиләләр түгел хәҙер Шамонинда. Һәр йортта кәмендә ике бала, өсөнсө генә түгел, дүртенсе, хатта бишенсе бала алып ҡайтҡандар ҙа бар арабыҙҙа. Хәҙер беҙ Голливуд ҡалыптарына һыймайбыҙ, үҙебеҙсә, саф башҡортса ҡалыптарға ярап йәшәп ятҡан сағыбыҙ.

Ауыл урамы буйлап үтһәң, 2009 йылдағы һымаҡ бер иш йорттарҙы күрмәҫһең дә хәҙер. Бәпес алып ҡайтабыҙ ҙа өй ҙурайтабыҙ, тип шаяртабыҙ был йәһәттән. Кемдер икенсе ҡат күтәрә, кемдер төкәтмә һуға, кемдер машинаһына гараж эшләй, кемдер мунса бурай... Быңа шундай байбыҙ. Төп байлығыбыҙ - балалар. Йән биргәнгә - йүн биргән, йәки һәр бала үҙ ризыҡы менән тыуа, тиғән әйтемдәрҙең хаҡлығын ғәмәлдә иҫбатлаусы ғаиләләр йәшәй беҙҙең Шамонинда.

**Гөлсинә ИШТАНОВА.**

### СӘЙЕР ҒӘҘӘТ

# УРЛАҒАН - БЕР ҒӘЙЕПЛЕ,

## йәки Аҡылыбыҙҙан алда телебеҙҙе йөрөтмәйек!

**Берәй әйберен юғалтҡан кеше, ғәҙәттә, "Моғайын, фәлән кеше алғандыр, ошо тирәлә уралғылап йөрөй ине...", йәиһә, "Шул әҙәм ундай-быңдай нәмәгә ҡулсыр була торған, шунан башҡа бер кемдең дә эше түгел..." тип, аныҡ берәү хаҡында фекер йөрөтә башлаусан. Ә бәғзеләр уйлап ҡына ҡалмай, ошо турала башҡалар араһында хәбәр ҙә таратып өлгөрә, хатта үҙе фаразлаған "бур"ҙы ҡарғап та ҡуя... Тик күпмелер ваҡыттан әлеге юғалтҡан әйберен үҙе үк табып ала: ҡасандыр бер ергә һалып, оноттҡан булған икән, йә булмаһа, үҙе төшөрөп ҡалдырған, йә үҙ балаларының береһе алып торған. Әлеге әйбер ысынлап та урланған осраҡта, ысын бурҙың кем икәнлеге лә һуңынан асыҡланыуы мөмкин. Затлы әйберен ҡабаттан тапҡан был әҙәм был хаҡта шунда уҡ онота һәм, һис бер ни булмағандай, артабан ғүмер кисереүен дауам итә...**

Бер яҡлы ғына уйлап ҡарағанда, ҡәҙерле туғандар, бында бер ни ҙә булмаған һымаҡ. Ә шулаймы икән? Боронғо ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған ошондай әйтем бар: "Урлаған - бер гәйепле, юғалтҡан - мең гәйепле". Бала сағымда әсәйем мәрхүмәнән ишетеп хәтеремдә ҡалдырған ошо мәҡәлдең мәғәнәһе хаҡында йыш ҡына уйланып ала инем. Эйе, урлаған кешенең "бер ғәйебе" һәр кемгә аңлашыла. Ә быңа юғалтҡан кешенең ниндәй ғәйебе бар һуң? Өҫтәүенә, бур кешенекенә ҡарағанда лә күберәк.

Шәриғәт ҡанундарына ярашлы, кемделер нахаҡҡа ғәйепләү, урлау һымаҡ уҡ, бик ауыр гонаһ һанала. Ошо хаҡта бер ни ҙә белмәгән йәки динебеҙ талаптарын танырға теләмәгән кеше, юғалған әйбере табылғанға ҡәҙәре йә ысын бур фашланғансы, әллә күпме танышын "гәйепләп" өлгөрә! Әгәр ул был турала эстән генә уйлап йөрөгән булһа (башҡа ниндәй генә уйҙар килмәй), бынан һис зарар юҡ. Әммә, телен тыя алмай, түҙемһеҙләнеп, үҙенең фараздарын таратып та өлгөрҙә икән, был - ҡурҡыныс! Ниңәһе ҡурҡыныс, тиер бәғзеләр, шик төшкән кешеләр был хаҡта бер ни ҙә белмәне бит... Һис бер ғәйебе булмаған, әммә зыян күреүсе тарафынан "гәйепләнеп" өлгөргән әлеге кешеләр, ысынлап та, был турала бөтөнләйгә хәбәрҙар булмауы ла мөмкин, әлбиттә. Әммә... Бар нәмәне ишетеүсе (Әс-Сәмиғ) һәм күреүсе (Әл-Бәсир) Аллаһтың иғтибарынан хатта бик кескенә нәмә лә ситтә ҡалмауын белергә тейешбеҙ. Изге Ҡөрьән-Кәримдә әйтелә: "...Бер кеше тұҙан ауырлығы саҡлы ғына боҙоҡлоҡ эшләгән булһа ла, уны (ғазабын) күрер..." ("Әз-Зәлзәлә сүрәһе, 8-се аят). Кемдәлер ниҙәлер гәйепләүҙән алда ошо хаҡта һәр саҡ уйлап алыу фарыз.

Күптәребеҙ әллә ни иғтибар итмәһәк тә, оло үкенескә, тирә-яғыбыҙҙа быңдай күренештәр ифрат күп. Быңа шуға күрә лә, арабыҙҙа берәй яҡыныбыҙ йә танышыбыҙ "моғайын, шул..." тип кемдер хаҡында шикле хәбәр һөйләй башлай икән, бер-беребеҙҙе быңдай ғәйбәттәрҙән тыйып тороу кәрәк. "Тел һөйәкһеҙ" тиҙәр. Әммә уның һөйәкһеҙ булыуы телдең хужаһын аҡламай. Һәммәләребеҙҙең аҡылы теле менән идара итергә тейеш.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

### БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Филипп НЕФЕДОВ*

# ХАЛЫҠ БАТЫРЫ САЛАУАТ

Аҡ батшаның Ҡаҙанды алыуын ишеткәс, башҡорттар Рус дәүләтенә ҡушылырға ҡарар ҡылып, ҡыш саңғыла Мәскәүгә юллана. Грозный илселәрҙе тыңлай, башҡорт еренең ниндәй байлыҡтары барлығын һораша һәм борондан килгән ҡанун буйынса башҡорттарға үҙ ерҙәренә тулы хоҡуҡлы хужа булыу тураһында грамота тапшыра. Унда яҙылыуынса, батша үҙе һәм вариҫтары исеменән башҡорт ерҙәрен ҡырғыҙ һәм себер барымтасыларынан һаҡларға вәғәҙә бирә. Шул уҡ ваҡытта ул башҡорттарға бал, ҡиммәтле тиреләр менән, шулай уҡ аҡсалата яһаҡ бурысы йөкмәтә. Башҡорттарҙың күбеһен батша яһаҡтан азат ҡылып, аҫабалыҡ хоҡуғында быға тиклем хужаһыҙ ерҙәр бүлеп бирә, быңың өсөн башҡорттарға батшаның саҡырыуы буйынса хәрби хеҙмәт бурысы йөкмәтелә. Был яңы дәрәжәле ҡатлам тархандар тип йөрөтөлә башлай.

Подданныйлыҡтан һуң тиҙҙән Башҡортостанда урыҫ нығытмалары төҙөлә башлай. Урыҫ воеводалары, баяр балалары, стрелецтар, тупсылар һәм кәнсәләр чиновниктары килеп тула. Башҡорттар улыстарға һәм даруғаларға бүленә: Себер, Ҡаҙан, Нуғай һәм Уса. 1574 йылда воевода Иван Нагой Өфө ҡәлғәһенә (ҡалаһына түгел! Боронғо карталарҙа Өфө территорияһында биш ҡала теркәлгән. Өфө ҡалаһы Өфө ҡәлғәһенән байтаҡҡа боронғораҡ. - **Ред.**) нигеҙ һалыу эшенә тотонғас, Нагой менән бергә килгән баяр балаларына, ҡала хеҙмәте чиновниктарына буласаҡ ҡәлғә биләмәһе сиктәренән ер бүлеп бирелә. Ағиҙел һәм Әй буйы башҡорттары, нуғайҙар урыҫ нығытмалары төҙәүгә ҡаршылыҡ күрһәтә. 1584 йылда колонизациялау башлана: татарҙар, мишәрҙәр, мариҙар һәм башҡа төрлө сит-ят халыҡтар башҡорттар янына күсеп ултыра башлай һәм уларҙан да, башҡа әтәмбайҙар кеүек, яһаҡ түләтелә; ә урыҫтар тәүҙә Себер слободаларында (Силәбе өйәҙе) йәшәй, һуңынан башҡорт ерҙәрен иңләй башлай. Башҡорт ерҙәрен тартып алыуҙар башлана. Батшалар алмашынған мәлдәрҙә воеводалар Мәскәү менән бер ниндәй бәйләнешһеҙ генә Башҡортостанда хакимлыҡ итә: күсенеп йөрөүҙәрҙе тыя, өйҙәр төҙөргә ҡуша, халыҡты ҡыҫырыҡлап, һәр төрлө хаслыҡтар ҡыла башлай. Был халыҡта ризаһыҙлыҡ тыуыуҙара һәм шау-шыу башлана. Тиҙҙән улар баш күтәрә. Башҡорттар Минзәләне ҡамап ала. Ләкин бола баҫтырыла, ғәйепләләр язалана. Был яҡтарҙарғы хәл тороушо хаҡында Мәскәүгә лә хәбәр килеп етә. 1649 йылғы Собор Уложениеһы менән Башҡортостанға күсенеп ултырыу һәм башҡорт ерҙәрен талау "тыйыла". Был закон ерҙәрҙе урыҫтар тарафынан тартып алыуҙарға ҡағыла. Ләкин воеводалар һәм һәр төрлө чиновниктар үҙ эштәрен дауам итә.

**(Дауамы бар).**

✓ **Байке булып йөрөү миңә оҡшаны. Ғөмүмән, ҡырғыҙҙар ир кешене нығыраҡ хөрмәтләйҙәр - ир кешенең бәҫе бөтмәгән. Беҙҙә шул матур йола онотолған. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ уҙаллы, алдан йөрөйҙәр. Ә ҡырғыҙҙарҙа ир культы ныҡ көслө.**



**Ҡырғыҙстанда үткән Бөтә донъя күсмәндәр уйындарында донъяның 74 иленән 1900 спортсы, шул иҫәптән Рәсәй йыйылма командаһы составында Башҡортостандан 36 спортсы ҡатнашты һәм командалар араһында 3-сө урын алды. Башҡортостандар, нигеҙҙә, көрәш төрҙәре буйынса төрлө дәрәжәләге ете миҙал яулаһа, бөркөт менән һунар ярышында ир-аттар араһында берҙән-бер гүзәл зат булараҡ ҡатнашҡан милләтебеҙҙең сая ҡыҙы Гөлгөнә Баймырҙина икенсе урынға лайыҡ булды. Күсмән халыҡтарының олимпиадаһынан алған тәьҫораттары менән бүлешергә редакцияға еңеүсе Гөлгөнә БАЙМЫРҘИНАны һәм уҡ атыу буйынса айырым төрҙә 4-се урын яулаусы Рәйес НИЗАМЕТДИНОВты саҡырҙыҡ.**

# САЛ УРАЛДАН - бөгөнгөнән -

**▸ Төрлө ерҙәргә сығып, төрлө кимәлдәге сараларҙа ҡатнашып тораһығыҙ. Шулай ҙа был юлы күңелегеҙҙә ниндәй тәьҫораттар ҡалды? Гәзит уҡыусыларҙы ниндәй кисерештәр менән тиҙерәк таныштырығығыҙ килә?**

**Р. Низаметдинов:** Электән, беҙҙең ата-бабалар, боронғо кешеләр нисегерәк йәшәгән, нисек һунар иткәндәр, нисек ултырып ашағандар, ғөмүмән, йәйләү нисек була икән, күрһәң ине, тип хыялланa инем. Аллаһы Тәғәлә алдыма сығарып ҡуйып, юлымды асып күрһәтте. Заманса тормоштан боронғолоҡтоң туп-тура эсенә барып ингәндәй булдыҡ, сөнки Салбуурун тигән урын беҙҙенсә "сал боронғо" тигәнде аңлата. Иң боронғо ярыш төрҙәре шунда үтеүе юҡҡа түгел. Шул биләмәгә килеп инеү менән боронғолоҡ аңҡыһын, боронғолоҡ еҫе сығып торһон өсөн, ойоштороусылар әйтеүенсә, 1000 тирмә, улай уҡ булмаһа ла, 600 тирмәнән торған этноауыл эшләнгән. Ауыл эсендә һәр бер өлкә үҙенә айырым бер нисә йөҙ тирмә ултыртҡан, квартал-квартал булып, ҙур ауыл булып ултыралар. Йәйләү-ҡала урамы эсенән китеп барған кеүекһең. Бер өлкәнең территорияһына инеп китһәң, унда көнө буйына йөрөргә мөмкин. Уҡ атышҡан урында һәр ил үҙенең флагын ҡуйған. Күҙ алдына килтерегеҙ: төрлө-төрлө флагтар елберҙәй, кеше милли кейемдәрҙә йөрөй. Ҡаршыла сал тауҙар тора, уларҙың баштарында ҡар ята, болот ҡунған. Шарт та шорт уҡ аталар...

**Г. Баймырҙина:** Мин инде Ҡырғыҙстанда икенсе тапҡыр булдым, гәмәлдә, ысынбарлыҡ менән боронғолоҡ араһында күҙгә күренмәгән ниндәйҙер сикте үтеп, әкиәт иленә барып ингән кеүекһең. Төҫкә ҡырғыҙҙар беҙҙең ялан яҡ башҡорттарына оҡшап китә. Башҡорттар ҡырғыҙҙарҙан сыҡҡан, тип, төрлө ҡыҙыҡ версиялар килтерәләр, беҙ тиҙ генә, юҡ, һеҙ беҙҙән сыҡҡанһығыҙ, тип төҙәтеп ҡуябыҙ. Башҡортмон тиһәң, туғандар тип, үҙ итәләр. Башҡорттарҙы баш ҡырғыҙҙар, тип, алдынғы ҡуялар, ҡайһы берәүҙәр үҙҙәренсә, баш ҡырғыҙ, тип тәржемә итеп ҡуя.

**▸ Ҡырғыҙҙар беҙҙе алдынғы ҡуя, тиһегеҙ. Был нимәлә сағыла?**

**Р. Низаметдинов:** Ғөмүмән, беҙ күкрәк һуғып йөрөргә өйрәнмәгәнбеҙ. Ҡырғыҙстанға барғас та үҙгәреп китмәнек, әлбиттә, әммә шул тиклем матур ҡәҙер итә беләләр. Уларҙың үйфиғелдәре, ҡыланыштары, һөйләштәре, менталитеты башҡорттарға ныҡ оҡшаған. Ябай халыҡ. Делегацияла иң олоһо мин булғас, байке (ағай) тип кенә йөрөттөләр. Шуға саҡ ҡына ризаһылыҡ белдерһәм дә, ҡаршы һүҙ әйтеү юҡ, хәҙер, тип йүгерешеп йөрөйҙәр. Йәһәтләп ултырта һалалар, ыңғайына ғына торалар. Иң башта ризыҡ байке алдына ҡуйылырға тейеш, иң башта уға һүҙ бирелә. Байке булып йөрөү миңә оҡшаны. Ғөмүмән, ҡырғыҙҙар ир кешене нығыраҡ хөрмәтләйҙәр - ир кешенең бәҫе бөтмәгән. Беҙҙә шул матур йола онотолған. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ уҙаллы, алдан йөрөйҙәр. Ә ҡырғыҙҙарҙа ир культы ныҡ көслө. Башҡортостан ирҙәренең бер өлөшө Себерҙә йөрөй, бөтөн донъяны ҡатын-ҡыҙ һөйрәй, донъя менән ул идара итә. Ҡатын-ҡыҙ донъя тотҡаһына әйләнеп бара. Ә тегендә аҡһаҡалдар аҡһаҡал булып йөрөй. Беренсенән, шулай йөрөрлөк аҡһаҡалдар бар, икенсенән, уларҙы ололайҙар, хөрмәтләйҙәр, уларҙың һүҙе лә үтә. Шул ныҡ һиҙелә.

**Г. Баймырҙина:** Үҙенә оҡшаған кешене шунда уҡ ҡабул итәһең бит. Ҡырғыҙҙар беҙҙе үҙҙәренеке итеп ҡабул итте. Беҙ ҙә унда Башҡортостандағы кеүек иркен, ергә ныҡ баҫып йөрөнөк. Нисектер үҙеңдең өйөңдә, үҙ территорияңда йөрөгән кеүек тойғо ҡалды: ҡайҙалыр сит илдәмен тигән ҡурҡыу юҡ, уңайһыҙланмайһың, ҡайҙа булһа ла иркен һөйләшеп, аңлаша алаһың. Ысынлап та, ололарҙы, аҡһаҡалдарҙы, ағинәйҙәрҙе хөрмәт итеү, уларҙы алдан йөрөтөү йолаһы һаҡланған. Мәҫәлән, сараның асылыуына инергә торабыҙ. Оло ғына аҡ һаҡаллы бер бабай килде. Барлыҡ сит ил делегацияларын ситкә ҡыуып, шул бабайҙы етәкләп тигәндәй индереп ебәрҙеләр. Сит илдән килгәнһеңме, кемһең, сиратта тораһыңмы - уларҙың эше юҡ: оло кеше килгәйне, шунда уҡ бөтөн игтибар уға күсте лә ҡуйҙы. Хатта махсус һаҡта тороусылар ҙа бер һүҙ өндәшмәне. Беҙҙә булһа, этеп-төртөп кире сығарырҙар ине.

Шул уҡ ваҡытта унда ҡатын-ҡыҙҙар бик баҫылып ҡалған тип тә әйтеп булмай. Уларҙың үҙ йөҙө, абруйы бар. Шундай ҡатындарҙы Ҡырсын буйына ла, Чулпан-атала үткән асыу-ябыу тантаналарына ла саҡырғандар. Дәрәжәләренә ҡарап, кейемдәре лә айырыла. Баштарына элечек кейгәндәре лә, ҡашмау кеүектең өҫтөнән бөркәнсеген ябынғандары ла бар - һәр береһе үҙ төбәгенең кейемендә... Биҙәктәре лә башҡорттарҙыҡына оҡшаған. Уларҙың күп нәмәләре күндән һәм кейеҙҙән. Ювелирҙар һаҡланған. Уларҙы көмөшсөләр тиҙәр. Көмөш биҙәүестәре барыһы ла ҡулдан эшләнгән. Беҙҙә ундай оҫталар бер нисәү генә, бөтөнләй ҡалмаған тиерлек. Ҡырғыҙҙарҙа улар бик күп һәм төрлө райондарҙа йәшәйҙәр.

**Р. Низаметдинов:** Беҙгә ихтирамдары тағы нимәлә сағылды - сараны тантаналы асыу ваҡытында ҡатнашыусыларҙың параeasy булды. Шунда Салбуурун ассоциацияһы президенты Алмаз Акунов, Ҡаҙағстандың рәсми вәкиле сығыш яһаны һәм беҙҙән "Мәргән уҡсы" хәрәкәтен етәкләүсе Юлай Ғәлиуллин телмәр тотто.

**Г. Баймырҙина:** Юлайҙың тәбрикләү-ҡотлау һүҙҙәренә Рәйес ағай ҡушып ҡурай уйнап ебәргәйне, тотош стадион гөр итеп ҡалды...

**▸ Бөгөн этнотуризм тураһында күп һөйләйбеҙ. Уны нисек үҫтереү тураһында баш ватабыҙ, туристарҙы нисек ылыҡтырыу юлдарын эҙләйбеҙ. Ҡырғыҙстанға туристарҙы нимә менән ылыҡтырырға мөмкин, мәҫәлән, сит ил ҡунаҡтары унан нимә алып ҡайта ала...**

**Р. Низаметдинов:** Тирмәләр йәйләүендә лә һәр биләмәлә магазиндар, күргәҙмәләр эшләнә. Уларҙа бөтөн нәмә тәбиғи. Тик ағастан, тик күндән, көмөштән ҡул менән эшләнгән әйберҙәр генә һатылды ошо этноҡүргәҙмәлә. Беҙҙең егеттәр үҙҙәренә әйәр алып ҡайтты. Оҫоҙ, әммә шул тиклем сифатлы. Джигитовка өсөн әйәрҙәрҙе йә Златоуста, йә Өфөлә эшләтәбеҙ. Ундай оҫталар берәм-бөртөк кенә. Сағыштырып ҡарағанда, ҡырғыҙҙарҙың әйәре күпкә осһоҙораҡ һәм 3-4 тапҡырға сифатлыраҡ. Сөнки уларҙа һыбай йөрөүселәр бик күп. Дөрөҫөн әйткәндә, завод-фабрикалары булмағас, бөтөн халыҡ ауылда йәшәй, боронғоса ғүмер итә, ҡул эштәре менән булыша.

Баҙарҙа йөрөгәндә нимәгә иғтибар иттем: ҡырғыҙҙар башҡорттар кеүек һатыулаша белмәй. Минең холҡомда әҙерәк һатыулашыу бар, һатыулаша башлаһам, эй уңайһыҙланалар. Хатта улар уңайһыҙланғанға миңә оят булып китә. Сауҙа эше менән шөғөлләнеп өйрәнгән башҡа төрки халыҡтары менән сағыштырғанда, бөтөнләй әрһ-



✓ *Традицион уйындарҙы тергеҙеүгә хөкүмәт ярҙамы кәрәк. Мәҫәлән, Ҡырғыҙстанда беренсе урынға приз - 70 мең. Ә беҙ Башҡортостанда шундай суммаға тотош бер байрам үткәрәбеҙ - уға ашауы ла, йәшәүе лә, бүләге лә - барыһы ла инә.*

# САЛБУУРУНҒА,

## сал тарихҡа...

еҙлектәре юҡ. Баҙарҙа торһа ла үҙ тауарын һатырға үҙе ояла.

**▸ Салбуурун уйындарында милли кейемдә йөрөү - төп шарттарҙың береһе булған, шуға ла барса халыҡ милли кейемдә йөрөгән. Ә бына башҡа урындарҙа ҡырғыҙ милли кейеме бөгөн дә һаҡланып ҡалғанмы, әллә көнбайыш модаһы уларҙы ҡыҫырыҡлап сығарғанмы?**

**Г. Баймырҙина:** Ҡырғыҙҙарҙа әлеге ваҡыттағы мода - һырылған, сигелгән әйберҙәр. Сапан булһынмы ул, куртка, жилет - бөтөн нәмә боронғо традицияларҙан сығып, замансалаштырып эшләнгән. Көн эҫеме, һыуыҡмы - барыһы ла һырылып тегелгән сапан кеүек кейемдәрен кейеп йөрөйҙәр. Шул яҡтан ҡырғыҙҙар барыһынан да айырылып тора. Европа модаһы унда бөтөнләй инмәгән, үҙҙәренең модаһы өҫтөнлөк итә.

**Р. Низаметдинов:** Был йәһәттән ҡырғыҙҙарҙан өлгө алырға кәрәк, сөнки улар ауылда булһынмы, ҡалаламы - барыһы ла милли кейемдә йөрөй. Беҙ көндөҙ ҡолаҡсынлы бүректә йөрөһәк, беҙҙән көләләр. Әйткәндәй, эҫелә малахай эсенән түбәтәй кейһәң, баш тирләмәй. Башҡорттарҙың элек эҫелә лә бүрек менән йөрөүҙәренең сере шунда. Ҡырғыҙстанда саҡ ҡына ел өрһә лә һыуыта, икенсенән, киске сәғәт алты булһа, ҡояш юғалһа, һыуыҡ - тауҙарҙан боҙ һыуығы килә, ел күтәрелә, ҡар яуыр һымаҡ. Шул ваҡытта бөтөн халыҡ илай башлай, беҙ бүректәрҙе төшөрөп кейеп алабыҙ ҙа рәхәтләнеп йөрөйбөҙ. Аяҡта ситек түгел, итектәр бит инде. Шуға беҙгә ныҡ уңайлы булды. Кейемдәребеҙ ҙә реконструкцияланған, башҡорттарҙың боронғо кейеме. Йылы ла, матур ҙа. Шуға беҙгә лә йәйләп милли кейемдәрҙе көндәлеккә әйләндерә барырға кәрәк.

**▸ Ҡабат ярыштарға урап ҡайтһаҡ, Гөлгөнә Вәлит ҡыҙы, һеҙ ошо уйындарҙа ирҙәр араһында Бүркүт салуу (бөркөт сөйөү) ярышында ҡатнашҡан берҙән-бер ҡатын-ҡыҙ булдығыҙ һәм барыһының да һушын алып, икенсе урын яуланығыҙ. Ошо хаҡта ентекләберәк һөйләгеҙ әле...**

**Г. Баймырҙина:** Килеп төшкәс, ярыштарға теркәлеү башланыр алдынан мине бөркөтсөләр ярыштары ҡыҙыҡтырҙы. Минең ҡыҙыҡһынғанды күргәс, сығыш яһағыҙ киләме, тип һоранылар. "Күнекмәләр буламы һуң?" тием. "Була", тиҙәр. Бөркөттән бер аҙ шөрләһәм дә, "Оҫталыҡ дәресе үткәрәһегеҙме?" тием. Ғүмер буйы шуның менән шөғөлләнгән бөркөтсөләр "Ҡурҡыныс түгел ул", тигән була. Уҡсыларҙың тренеры булып барған инем, шуға, етәкселектән рөхсәт алып, бөркөттәр менән булыштым. Уҡсылар бер яҡта, мин икенсе яҡта... Ярыштар барған майҙан осонда хеҙмәттәшем Юлай Ғәлиуллинды күреп, тиҙ генә уға оҫталыҡ дәрестәре тәьҫораттары тураһында һөйләп киттем. Ул, "Әйҙә, әйҙә", тип дәртләндерә. Күнекмәләр араһында өс бөркөт алмаштырҙым. Береһен, тотоп ҡарайбыҙ, тип, ғәрәптәр ҡурҡытты, ахры, тауҙарға осто. Тренерым Сыңғыҙ тигән егет, үҙе 2-3 тапҡыр призер булған, үҙенең бөркөтөн биреп, уны тыңлатыу серҙәренә өйрәтте: "Иң мөһиме - бөркөттән ҡурҡма, уға ҡурҡҡаныңды һиҙҙермә. Һин тыныс, унан өҫтөнөрәк, көслөрәк булырға тейешһең". Был егеттән бөркөттө нисек тотоу, ҡарау, тәрбиәләү, ашатыу нескәлектәренә төшөндөм.

Ярыш ике этаптан торҙо. Беренсеһендә төлкөгә һунар, йәғни команда биреп, алдан ат менән сабып сығып киткән, арҡанға бәйләнеп ерҙә һөйрәтелеп китеп барған төлкөгә бөркөттө ебәрәһең. Бөркөтөм уны тиҙ ауланы. Иң ауыры икенсе этап - бөркөттө ҡулға ултыртыу, сөйөү булды. Билдәле бер арауыҡта (500-1000 м) артың менән тораһың, ҡулыңда күгәрсен ите, уның ҡанаттары. Шуларҙы елпеп, ҡулыңдағы табышты күрһәтеп, команданы дөрөҫ итеп бирергә кәрәк. Команда булыу менән бөркөттөң башлығын асып осоралар, ул һинең ҡулыңдағы иткә һөжүм итеп, килеп ҡунырға тейеш. Ҡош, әлбиттә, үҙенең хужаһының тауышына өйрәнгән, шуға рефрендар, нисек ул һине тыңланы икән, тип аптыраны һуңынан. Ҡошто - бөркөт булһынмы ул, ыласынмы, ҡарсығамы - яратырға, арбарға кәрәктер, тигән һығымта яһаным инде...

**▸ Афарин, тиергә генә ҡала. Ә, ғәмәлдә, борон ата-бабаларыбыҙ ҡош почтаһын да ҡулланған, ҡоштар менән һунар иткән...**

**Г. Баймырҙина:** Бөтә донъя бөркөтсөләре, ыласын тотҡан ҡошсолар берекмәһенең рәйесе Бахыт ағай Карнакбаев менән үткән йылғы уйындарҙа ҡатнашҡанда танышып алғайныҡ. Ул үҙе Ҡаҙағстанда йәшәй. Уның менән был юлы ла ҡумаҡлап һөйләшеп ултырҙыҡ. Ул борон башҡорттарҙың ыласын менән һунар итеүҙәре тураһында һөйләне, ныҡ маҡтаны. Элек батша ғәскәрҙәрен бөркөттәр, ыласындар менән иң яҡшы тәьмин итеүселәр башҡорттар, иң яҡшы ҡоштар Башҡортостанда булған, ти. "Һеҙ, башҡорттар, алдыңғы булғанһығыҙ, ни өсөн бөгөн һеҙҙә был төр ярыштар юҡ", - тип борсолоуын белдерҙе. Юлай Ғәлиуллин менән һөйләштеләр, ул оҫталыҡ дәрестәре үткәрергә Башҡортостанға килергә ризалашты.

**Р. Низаметдинов:** Мин Серик тигән ҡаҙаҡ менән һөйләшкәйнем, ул Ҡаҙағстанда ла бөркөт, ыласын һунарын тергеҙәләр, беҙҙә шөғөлләнгән 90-лап кеше бар, ти. Ярышта приз фонды, мәҫәлән, 1 миллион сом, ти. Йәғни еңеүсе 1 миллион сом алып ҡайтып китә. Был уларҙа системаға һалынған һәм ошо ярыштарҙы хөкүмәт финанслауында бәҫле, әһәмиәтле итеп үткәрәләр. Ҡайһы бер осраҡта хатта машинаға тиклем уйнатыла.

Ҡырғыҙҙар тайған менән талпарҙарҙы - бүре ала торған быҙау ҙурлыҡ эттәр - юғалған ҡырғыҙ тоҡомон ауылдарҙан йыйып алып, саф тоҡом үрсетеп, тергеҙгәндәр. Уларҙы бит йыйып алғас та ҡарарға, тәрбиәләргә, ашатырға кәрәк. Был эш уларҙа хөкүмәт кимәлендә яйға һалынған. Салбуурун ярыштарында ҡатнашыусыларҙы йыйып, ике аҙна әҙерләнеү мөмкинлеге биргәндәр. Шул уҡ ваҡытта эш урындарында уртаса эш хаҡы ла һаҡлана.

**▸ Боронғо уйындар беҙҙә саҡ тергеҙелә башланы, бәлки, киләсәктә юғарылағылар ҙа уларға иғтибарҙы арттырыр, тип өмөтләнәйек. Ә бына уҡсылар ниндәй уңыштар менән һөйөндөрҙө һәм ниндәй проблемалар асыҡланды?**

**Р. Низаметдинов:** Уҡсылар призлы урын ала алманыҡ. Урынды күпселеге өс ил - Төркиә, Венгрия, Ҡырғыҙстан һәм Татарстан алды, сөнки уларҙа уҡтан атыу шул уҡ хөкүмәт иғтибарында. Татарстанда 10 йыллап уҡ атыу менән шөғөлләнәләр, әммә традицион уҡсылар түгел, ә спортсылар. Америка асмағандар, спортсыларға традицион ян тотторалар ҙа, зал бирәләр, кейендерәләр, ашаталар-эсерәләр, унда-бында йөрөтәләр. Улар, кәрәк икән, спортсы булараҡ сығыш яһай, кәрәк икән, традицион уйындар буйынса ярыша. Беҙгә шул дүрт лидер менән көс һынашырға тура килде, әммә бер-ике йыл ғына уҡтан ата башлап, ошо хәтле олимпиада кимәленә күтәрелгән күсмәндәр уйынында еңел генә еңеү яулап булмай, күнекмәләр, тәжрибә кәрәк.

Командала 11 кеше инек, шуларҙың дүртеһе - учалылар, береһе - Сибайҙан, икеһе - Бөрйәндән, ҡалғандары - Өфөнән. Учалынан ирле-ҡатынлы Руслан Әхмәҙиев менән Лиана Ихсанова барҙы. Лиана алты айлыҡ ауыры менән йөрөп ҡайтты. Шул килеш ҡатын-ҡыҙҙар араһында яҡшы һөҙөмтә күрһәтте - 35 метрҙан атыуҙа 5-се урын. Уның был аҙымын батырлыҡҡа тиңләргә мөмкин, әлбиттә. Республика исеменән 5-се урын яулау - ул юғары күрһәткес.

**Г. Баймырҙина:** Уҡсылар Башҡортостанда 2016 йылдан ғына шөғөлләнә, ә шулай ҙа ошондай яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшә алдылар. Рәйес ағай үҙе 4-се урында, Лиана - 5-се урында. Сибайҙан Хөрмәт ағай 7-се урында (70 метр). Ысынлап та, беренсе көндәрҙә тын алыуы ауыр булды. Был беҙҙең ярыш һөҙөмтәләрендә сағылыш тапты.

**▸ Ни сыҡһа, шул баймаҡтарҙан сыға, тигәндәй, улар республикала тәүгеләрҙән булып ылаҡ уйынын тергеҙҙе, Ҡырғыҙстандағы Бөтә донъя күсмәндәр уйындарын асыу тантанаһына Баймаҡ районының флагын тотоп сыҡтылар. Үҙҙәре булмаһа ла, уларҙың сығыштары хаҡында ла әйтеп китегеҙ әле.**

**Р. Низаметдинов:** Улар Чулпан-ата тигән ҡалала тороп ҡалды һәм ярыштар стадионда үтте, шуға уларҙың уйнағанын тамаша ҡыла алманыҡ. Беҙҙең ылаҡсылар беренсе уйында ҙур иҫәп менән еңелә, икенсе уйында французҙарҙы тар-мар итеп, 5-се урынға сыға. Әммә, дөрөҫөн әйткәндә, ылаҡ ҡайһы илдә үтә - шул илдең командаһы еңә. Ни өсөн? Ылаҡта тәүге шарт - атың һәйбәт булырға тейеш. Ә уйындарҙы ойоштороусылар үҙҙәренә иң яҡшы аттарҙы һайлап ала.

Ә беҙҙә? Алдағы көндәргә фараз иткәндә, ошондай темптар менән барһаҡ, ылаҡсылар бер ваҡытта ла еңеүгә өлгәшә алмаясаҡ, сөнки беҙҙә ылаҡ уйыны шул тиклем түбән кимәлдә, саҡ башланып ҡына тора. Һабантуй етһә, иҫебеҙгә төшә лә, һуңынан тағы онотола. Көслө дәғүәселек тыуҙырыр өсөн, беренсенән, хөкүмәттән ярҙам булырға тейеш. Икенсенән, аттарҙы өйрәтергә кәрәк. Беҙҙә ялан тулы йылҡы аттары, ә өйрәтелгән менге аттары бик аҙ. Иң идеаль вариант: баймаҡтарҙың варианты, уларға "Афарин!" тиергә генә ҡала. Быйыл Яҡтыкүлдә һайлап алыу уйындары үтте. Баймаҡтар унда барыһын да еңде, сөнки улар ярыштарҙа ҡатнаша, аттарҙы белә, атта сабалар, нисек уйнарға самалау, тойомлау, тактика бар. Башҡалар баймаҡтарға ҡарағанда бер нисә баҫҡысҡа түбән тора. Ә баймаҡтар Ҡырғыҙстанда ҡатнашҡан командаларҙан ҡалыша. Киләсәктә ниндәйҙер уңышҡа өлгәшәбеҙ тиһәк, ат тотҡан фермерҙарға дотация биреп, улар үҙҙәре команда тотоп, чемпионаттар үткәреп, даими шөғөлләнергә кәрәк.

**Г. Баймырҙина:** Икенсе яҡтан, ҡырғыҙҙарҙа тыуған көн булһын, юбилей булһын, туй булһын - ылаҡ уйнайҙар. Көн һайын булмаһа ла, ниндәйҙер сара һайын. Юлдан китеп бараһың, юл буйҙарында тайҡаҙандар, ылаҡ уйнай торған урындар бар. Ҡырсында, уйындар үткән йәйләүҙә, һыбайлылар күп, ат өйрәтәләр.

**▸ Башҡортта шундай матур мәҡәл бар бит инде: сит ерҙәргә барып фәһем ал, тигән. Дөйөмләштереп әйткәндә, ошо уйындарҙан, хәлебеҙгә һәм мөмкинлегебеҙгә ҡарап, Башҡортостанға ниндәй матур өлгөләрҙе күсерергә мөмкин булыр ине?**

**Р. Низаметдинов:** Беренсенән, кейеҙҙән ысын тирмәләр эшләүҙе тергеҙеү. Ҡырғыҙстандағы тирмәләрҙе күреп ҡайтҡас, беҙҙең һабантуйҙарҙағы тирмәләребеҙҙең пародия ғына икәненә инандым. Быға тиклем уларҙы шул тиклем матур, тип уйлай торғайным. Бөтөн ғәләм шундай тирмәләр тегеп, һатып алып бөттө, хәҙер уларҙы нисек ҡабат кейеҙ тирмәләргә ҡайтарырға - белмәйем.

Икенсеһе, әйтеп киткәнемсә, ҡырғыҙҙар үҙҙәренең кейеҙ баш кейемендә йөрөй. Шуны өлгө итеп алырға кәрәк. Хәҙер беҙҙә ҡатын-ҡыҙҙар йәйләп милли элементтарҙы ҡуллана, һаҡалдар, селтәрҙәр тегә башланылар. Ирҙәргә лә был йүнәлештә эшләргә, иң элек тирмә формаһында, һигеҙ өлөштән тегелгән, башҡа ятып, һылашып ҡына торған милли түбәтәйҙе тергеҙергә кәрәк. Ни өсөн һылашып тора, сөнки бүрек аҫтынан кейергә кәрәк. Эстән түбәтәй кейгәндә ҡолаҡсын малахай бүректе йәйен дә, ҡышын да кейергә була.

Традицион уйындарҙы тергеҙеүгә хөкүмәт ярҙамы кәрәк. Мәҫәлән, Ҡырғыҙстанда беренсе урынға приз - 70 мең. Ә беҙ Башҡортостанда шундай суммаға тотош бер байрам үткәрәбеҙ - уға ашауы ла, йәшәүе лә, бүләге лә - барыһы ла инә. Рәхмәт Учалы районы хакимиәтенә, ике тапҡыр уҡ атыу буйынса ярыш үткәрҙек - ике йыл финансланы.

**Г. Баймырҙина:** Һуңғы ике-өс йыл эсендә Башҡортостанда халыҡ уйындарын, этник спорт уйындарын да тергеҙеү башланды ул. Был сараларҙы Ҡырмыҫҡалы районында тәү башлап ойошторғайныҡ. Шулай уҡ быйыл "Мәргән уҡсы" фестивален үткәргән Учалы һәм Иглин райондары хакимиәт башлыҡтарына ҙур рәхмәтлебеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быйыл Әбйәлилдә беренсе тапҡыр күсмәндәр уйыны үтте. Тимәк, башҡорттар ҙа яйлап боронғо уйындарҙы тергеҙеүгә йөҙ борҙо. Әммә мөмкинлектәр ихтыяжға тап килһен өсөн, һәр матур башланғыс хөкүмәт тарафынан яҡлау табырға, хуплап күтәрелеп алырға тейеш. Әлегә был эш яралғы кимәлендә генә. "Сараны кәм тигәндә ике көн үткәрергә кәрәк. Сөнки кил дә, ярыш та ҡайтып кит - ул бит туризм түгел. Әйткәндәй, "Яҡтыгүл" шифаханаһына һәм уның директор урынбаҫары Салауат Нафиҡовҡа уҡсылар, ылаҡсылар исеменән ҙур рәхмәт белдерәбеҙ, сөнки ошо сәфәргә улар ныҡ ярҙам итте. Шулай уҡ Республика Хөкүмәтенә лә рәхмәтлебеҙ - әлегә тиклем бөтөн ергә үҙ аҡсабыҙға йөрөһәк, был юлы беҙҙе иғтибарға алып, спорт кейемдәре биреп, юл сығымдарын түләп ебәрҙеләр", - ти Гөлгөнә Вәлит ҡыҙы. Был - оло юлда тәүге аҙым.**

Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА
әңгәмәләшсе.

***✓ Иртәнсәккә оло ғауға ҡупты. Ҡайнашҡан йылҡыларҙы йыйып алырлыҡ түгел. Ғифриттәй айғыр, башҡалар араһынан әллә күпмегә ҡалҡып ҡаҡайып, бейәләренә дәғүә иткәндәй айғырҙарҙы ҡарауыллай.***



Алама кейеҙ менән ҡаплап яһалған сатыр янында Айыухан уны сабырһыҙланып көтә ине. Тыныс ҡына ашап ултырған булһа ла, күҙҙәре асыуҙан ялтырай. Шым ғына килеп, янына сүгәләгән ҡыҙҙың ҡулына ағас сеүәтә тотторҙо ла сәнсеп ҡарап алды.

- Тағы ҡайыҙланғың килеп йөрөйһөңмө?

- Буҙатты ысҡындырҙым.

Айыухан һүҙҙәрен теш араһынан ҡыҫып сығарҙы:

- Бисура! Аҙыраҡ көтөп булмай инеме?

- Юҡ, - ҡыҙ ҙа уға секерәйеп ҡараны, - Тышаулы көйө уның көндәре һынаулы. Әле өйөрҙө ҡабаттан үҙенеке итеү өсөн дә ваҡыт кәрәк буласаҡ. Малды беҙ айғырһыҙ бер ни ҙә эшләтә алмайбыҙ, ә айғырҙы алып киткәндә өйөр уға эйәрәсәк.

- Әгәр һинең ҡул икәнде белһәләр?

- Эйәрҙә ултыра алмаған бөкөрө малайҙың шундай айғырға яҡын барырына кем ышанһын?

- Ярай, булды. Ҡабат китәһе булма.

- Йә, - тип йәһәт кенә килешһә лә, күҙҙәренең ҡәнәғәт йылмайыуына ҡарағанда тыңламаясаҡ ине ҡыҙ уны. Быны Айыухан белә. Шуға икеләтә йәне көйә.

Иртәнсәккә оло ғауға ҡупты. Ҡайнашҡан йылҡыларҙы йыйып алырлыҡ түгел. Ғифриттәй айғыр, башҡалар араһынан әллә күпмегә ҡалҡып ҡаҡайып, бейәләренә дәғүә иткәндәй айғырҙарҙы ҡарауыллай, ҡарауыллап ҡына ҡалмай, ҡойон шикелле өйөрөлтмәк уйнатып килеп һөжүм итә лә, көтөүселәр сабышып килеп еткәнсе, өркөп ҡасырлыҡ хәлгә еткерә. Ҡарышып маташҡандарға мулыраҡ та эләгә. Шундай бер-икәүһе оҙаҡ ҡына өйәҙәп ятып-ятып, саҡ ҡалҡынып тороп китте. Буҙаттың үҙенә лә ҡамсы ҡаты төштө, әммә күҙҙәренә ҡан һауып алған малға был ғына кәртә түгел. Иркен далала уларҙың шул ҡамсынан артыҡ көс күрһәтә алмаҫтарын да белә әллә. Шуға үҙе лә хаяһыҙланып, көтөүселәрҙең дә аттарын таларға ынтылды. Тегеләре ҡасырға тайшанған менгеләренән ҡолап, айғыр тояғы аҫтына ҡалыуҙан ҡурҡып, ҡул һелтәнеләр. Тамам үҙ иркенә ҡалған айғыр иһә, өс-дүрт көн эсендә хакимлыҡҡа ынтылған дошмандарын еңеп, берәүҙәрен баш һалдырып, икенселәрен өйөр артынан эйәреп кенә йөрөрлөк итеп, үҙ дәрәжәһен ҡайтарып алды. Хәҙер был йылҡы диңгеҙенә ҡайһы ваҡытта ғына күҙ һалһаң да, араларында ҡаҡайып торған дәү башты күрәһең. Был - Буҙат, ырыуы именлеге һағында.

* * *

Аҙна самаһы юл үтеп, баштарында ала ҡар ятҡан үркәсле тауҙар итәгенә килеп еттеләр. Бында далалағы кеүек саң юҡ, әммә һыуығыраҡ. Уның ҡарауы, үлән күпереп ята, тау битләүҙәренән йүгерешеп төшкән ваҡ шишмәләр үҙәндәрҙе йәшеллектә тота, күрәһең.

Бында ҡышлау урыны. Көнбикәләр менән мал ҡыуып килгәндәрҙең ғаиләләре лә, тағы күпмелер халыҡ ошонда көн итә икән. Айыухан икеһенә ҙур булмаған ғына тирмә ултыртты. Ҡаҙаҡтар, торлағынды ҡалынораҡ итеп көплә, тау аҫтында ҡыш елһеҙ булһа ла һалҡыныраҡ, тиһәләр ҙә, моңһоҙлоҡҡа һалышҡан булып, ҡул һелтәне. Уларҙың бит ҡышҡа ҡалырға уйҙары юҡ. Айғырҙың ныҡлап һауығыуын да, быларҙың үҙ мәшәҡәттәренә күсеүен генә көтәләр. Ысынлап та, торлаҡтарына килеп еткән ҡаҙаҡтар йылҡыны үҙ иркенә ҡуйып, һәр береһе көнкүреш хәстәрҙәренә сумды. Малдарҙың ҡайһы тәңгәлдәрҙә йөрөүенә күҙ һалып тороусылар ҙа истәктәр, йәғни алпауыт Сайран менән көмөрө Мырҙан булып ҡалды. Был ике ҡамғаҡ кеүек булып йөрөгән әҙәмгә тамаҡ хаҡынан башҡа бер ни кәрәкмәй.Ана, хатта ҡышлар урындарын да йүнләп ҡора белмәйҙәр, тип көләләр уларҙан бындағылар.

Көнбикәгә Айыухан менән бер тирмәлә йәшәү генә ауыр. Ҡалғанына өйрәнде лә хәҙер. Ике-өс көнгә бер Айыухан уның битенә теге ҡайырыны иҙеп һөртә. Арҡаһындағы көмөрөһөн үҙе лә нығытып бәйләй ала. Ҡулдарын йәшереп, еңен һәлберәтеп йөрөүе лә айырыуса һәпрәлек бирәлерме, әллә йөҙөнөң күберсеп тороуынан ситләшепме, уға яҡынлашыу ғына түгел, артыҡ күҙ һалмаҫҡа ла тырышалар. Көнбикә өсөн был да ҡулай, өлкән көтөүсе аҡырып-баҡырып йомош ҡушмағанда мәғрүр тау итәктәрен ҡыҙырып йөрөп килә, әҙәм күҙе күрмәҫ урындарҙа көләпәрәһен сисеп, сәстәрен туҙғытып ултырып ала, күгүләндә аунап, зәңгәр күк төпһөҙлөгөнә ҡарап ята.

Әле лә шулай, хыялында Урал үркәстәрендә йөрөй ине, тау үренән төшөп килгән һынды күреп, йәһәт кенә башлығын батырып, сәстәрен ҡолаҡсындары аҫтына йәшереп тыҡты. Үтеп




барыусыны күрмәмеш булып китеп барырға ла ниәтләгәйне лә, уның бығаса ла ауылда аңғарған зәғиф ҡатын икәнлеген шәйләп, ташында ултырып ҡалды. Ҡатын да, килә торғас, күҙәтеүсе барлыҡты төшөндө. Үҙе лә, бер ҙә ҡарашын күсермәй, текәлеп килә бирҙе. Йәнәшләгәс, ике яҡ та бербереһен һынап ҡараны. Хәрәкәт иткәндә өйрәк шикелле булып ике яҡҡа аушанлап атлаған һәм был ҡиәфәте менән ҡатлы-ҡатлы алама бишмәттәргә төрөнгән сүрәте бигерәк шөкәтһеҙ булып күренһә, туҡтағанда ул төҙ генә икән. Ел-ямғырға ҡарайып ялтыраған йөҙө нәфис... юҡ, улай ғына ла түгел, сибәр... бик сибәр ҡатын ине был. Көнбикә, ҡаршыһына килеп туҡтап ҡалған ҡатынға аҫтан өҫкә ҡарап, төбәлеп ҡалды. Тегеһе лә уны бик һынсыл итеп ҡарашы менән һөҙҙө. Унан, көтмәгәндә, бер аҙ ҡаҙаҡ юҫығындараҡ, әммә башҡортса өндәште:

- Ҡайһы яҡтан һеҙ?

Ҡыҙ ҡапылда яуаплай алмай, тотлоғоп ҡалды. Керфектәрен генә елпетте бары.

- Телһеҙ түгел икәнлегеңде беләм, йырлағаныңды ишеттем үткәндә. Йылға ярында йөрөй инең, мин ҡамыш араһында кер сайҡаным.

Көнбикәнең ҡобараһы осто, әммә һаман ауыҙын асыр көс тапманы. Ҡатын йәнәшәләге ташҡа терәлеп, ҡулындағы үлән төргән урамаһын алдына һалды:

- Ҡурҡма, һатмам, миңә күптән кеше хәле ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та түгел.

- Һин... Мин...

- Ағиҙел буйында үҫкән башҡорт ҡыҙымын. Кәүсәриә, тиҙәр ине. Ун алты йәшемдә ҡаҙаҡтар ҡарымта менән килгәндә урлап китте. Был яҡтарға алып килгәс, баҙарға һатыуға сығарҙылар.

- Һат-тыу-ға?..

- Эйе. Ҡолдар баҙары бар. Йылҡы һатҡан кеүек итеп ҡыҙҙарҙы, балаларҙы, әсирҙәрҙе һаталар был яҡта.

- Һине лә... һаттылармы?

- Байым өс дөйәгә алмаштырып алды, икенсе ҡатынлыҡҡа. Алып ҡайтыуы булды - ҡастым. Артымдан ҡыуа сығып, тоттолар.

Артабан инде Көнбикә ҡатынға һорау бирә алманы, бары күҙҙәрен киң асып ҡараны ла ултырҙы. Ә Кәүсәриә, һорамаһа ла һөйләне:

- Бик ҡаты туҡмалдым, әммә күнә алманым. Тағы ла ҡастым. Был юлы, табандарымды ярып, ҡыл һалдылар. Унан ошо хәлгә ҡалғас, байым, мине тиңһенмәй, хеҙмәтсеһенә бирҙе.

- Итбайғамы?..

- Итбайға...

Икеһе лә тынып ҡалды. Көнбикә ҡанһыҙ Итбай ҡулындағы ҡатындың хәлен самалай ҙа ирекһеҙҙән бармаҡтары йоҙроҡҡа йомарлана. Ҡатын уның ағарып ҡыҫылған ҡулдарына ҡарай бирепултыра ла тағы ла көтөлмәгәндә ярып һала:

- Йөрәкле бисә һин.

Ҡыҙ тағы ла ауыҙын асты ла кире япты, һүҙе табылманы.

- Тәнемде зәғифләп бөтһәләр ҙә, күҙҙәрем үткер минең. Эйәрҙә ултырыуыңды, атлап китеүеңде сәйерһенеп күҙәттем. Бына әле ҡулдарыңды күреп торам. Унан килеп... эргәндә йөрөгән алпауыт күҙ яҙҙырмай...

- Ул минең ағайым.

- Юҡты һөйләмә. Әйтәм бит, минең күҙҙе алдап булмай.

Көнбикә әгәр ошо ваҡыт, былай буялған булмаһа, моғайын, шулай уҡ булып ҡыҙарыр ине. Кәүсәриәнең бер еп булып ҡымтылып ҡатҡан ирендәре аҙ ғына яҙылғандай итте, ҡарашы йомшарҙы:

- Йә, ярай... Берәйһен эҙләйһегеҙме? Әллә йәшенәһегеҙме?

- Беҙ... - ҡыҙ әйтергәме-юҡмы тип икеләнде лә, инде алдауҙан фәтеүә юҡлыҡты аңлап, дөрөҫөн асты, - йылҡы артынан килдек... Буҙат артынан.

Ҡатын ишеткәндәренә ышана алмай, ҡыҙҙың ауыҙына төбәлеп ҡалды:

- Йылҡы... артынан?..

- Эйе. Йәй уртаһында атайымдың һәм тағы ла ике-өс йәйләүҙең йылҡыһын ҡыуып алып киттеләр. Ҡатын-ҡыҙ менән бала-сағаны яу менән алып ҡалдыҡ, ә мал артынан ҡыуып китер әмәл булманы.

- Һеҙ икәүҙән-икәү ошо араға шул малды юллап килдегеҙме?

- Атайым Оло һыу буйына китте лә ҡайтманы... Буҙат уның төҫө... Ул... үләсәк был далала... зарығып...

- Зарығып?.. - Кәүсәриә ҡараштарын тау бөткән ерҙән йәйрәп киткән дала тигеҙлегенә күсерҙе. - Ҡайһы бер йәндәрҙең яҙмышы зарығып йәшәүҙән ғибәрәт...

Көнбикә өндәшмәне. Ҡатын ҡабаттан уға боролдо:

- Был йылҡыны оло яу менән дә алып булмаҫын аңламайһығыҙмы ни? Ҡайһынығыҙ мал ҡыуа ла, ҡайһынығыҙ көтөүселәргә ҡаршы тора? Үлем эҙләп йөрөйһөгөҙ бары, быларҙан ҡасып ҡотолоп булмай.

Ҡатын тағы бер аҙ ултыра бирҙе лә, нисек ҡапыл пәйҙә булған булһа, шулай йәһәт кенә тороп, китеп барҙы. Уның табандарына баҫа алмай әллә үксәһенә, әллә табан ҡырына терәлеп аушанлап атлауына ҡарап, йөрәген усына ҡыҫып тотоп тороп ҡалды ҡыҙ. Бахырҡа-а-ай... Ҡайһы бер йәндәр зарығып йәшәүгә дусар, тинеме...

* * *

Көҙ үҙ көсөнә инәлер, күрәһең. Бында, түбәләре күккә олғашыр тауҙар итәгендә йәшеллек тә, һиллек тә. Әммә даланан килеп еткән ҡоро елдәр ҡатыраҡ иҫә, ер һыуына, ямғырҙар йышая башланы. Бындай осорҙа, бигерәк тә көн йонсоуында, мал да аяҡланып бармай, быны белгән көтөүселәр ҙә хәҙер күп ваҡытын тирмәләрендә үткәрә. Ҡара яҙҙан мал артынан эйәреп йөрөгән ул бисараларға ла арҡа яҙыр мәлдәр тыуҙы.

Айыухан менән Көнбикәнең дә тәпәшәк тирмәләрендә көн күреп ятҡандары. Айыухан, Итбай ҡушыуы буйынса, ҡороҡтар үрә, ә ҡыҙ тирмә түбәһе уйымы аҫтында егеттең бишмәтенең бүҫелеп сыҡҡан еңен ултыртып маташа. Тирмәлә саҡта улар артыҡ һөйләшеп -аралашып бармайҙар. Тирмәне лә урталайға бүлеп алғандар. Терәүҙең кейеҙ менән бүленгән бәләкәй өлөшөндә Көнбикә йоҡлап йөрөй, иркенерәк яғында - Айыухан. Кистәрен башта ҡыҙ инеп, үҙ мөйөшөнә сумһа, егет, ғәҙәттә, һуңлап ҡына инеп ята ла, таң яҡтырыр-яҡтырмаҫтан сығып та китә. Әле ямғырлы мәлдәрҙә сараһыҙҙан икеһе лә тирмә тоҡҡоно булып ултыра. Көнбикә был тынлыҡтан тамам арыған, әйтерһең, ул ҡаҙаҡтар өсөн генә түгел, ә Айыухан алдында ла телһеҙ булып ҡалған. Ахырҙа түҙмәне, үҙ алдына һөйләнгән кеүек итеп, һуҙып ҡуйҙы:

- Ҡышлайбыҙҙыр беҙ бында...

Айыухан уны әллә ишетмәне, әллә шулайға һалышты ғына, һәр хәлдә яуап бирмәне. Тик Көнбикәнән улай ғына ҡотола алмаҫын да белә егет. Бына уның түҙеме лә оҙаҡҡа етмәне, эшен ҡуйып, утлы ҡарашын атты ла:

- Өндәшмәҫ булһаң, бер үҙем сығам да китәм.

Айыухан да һыр бирмәй:

- Ҡайҙа сыҡмаҡсыһың?

- Ҡайтыуға.

- Сабыр ит, ҡабаланып-ҡарһаланып башҡара торған нәмә түгел.

Көнбикә түҙмәй, тороп, тар тирмәлә ялпылдап улай-былай йөрөп алды:

- Минең... егет түгел икәнде аңғарған кеше бар. Берәү төшөнгәс, икенселәре лә аңлар, йәһәтерәк китә һалайыҡ.

Айыухан ишеүенән туҡтап ҡалды:

- Кем һиҙгән? Ҡайҙан белдең?

- Итбайҙың бисәһе.

- Итбайҙың?.. Анауы зәғифме?

- Ул зәғиф түгел! Уның табанын ҡырҡып, ҡыл һалғандар, баҫа алмай, - Көнбикә быныһын үтә иңрәп әйттеме, егет уға текәлеп ҡалды. - Башҡорт ҡатыны ул, Ағиҙел буйынан. Бында уны тотҡонда тоталар... Буҙат кеүек итеп.

- Көнөкәй, һин ул ҡатын менән һөйләштең дәме әллә? - ҡапыл Айыуханға эштең асылы барып етте.

- Һөйләшмәҫ тә инем, тик ул дөрөҫөн белә ине инде. Ул шундай... ҡарай ҙа барыһын әйтә лә ҡуя.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Һуңғы һигеҙ йыл эсендә Рәмил Ғәйзуллинға донъяның утыҙ дүрт оркестры менән бер сәхнәлә сығыш яһау бәхете тейә. Төрлө фестиваль-конкурстарҙа ҡатнаша, еңеүҙәр яулай.***



*АФАРИН!*



**Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмил Ғәйзуллин милли сәнғәтебеҙгә һәләтле ҡурайсы, музыкант булып килеп инде. Республикабыҙҙа берҙән-бер булған Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестрына нигеҙ һалыусы ла ул. Рәмил Мәүлит улы етмеш ете һөнәр эйәһе, әммә улар араһында иң әһәмиәтлеләре тип уның башҡорт халҡының милли музыка ҡоралдарын һаҡлауға һәм үҫтереүгә ҙур өлөш индереүен билдәләргә кәрәк. "Урал ауазы" Халыҡ-ара оркестрҙар һәм халыҡ уйын ҡоралдары ансамблдәре конкурс-фестивале тип аталған ижади проекты ла ошоға дәлил. Башҡорт дәүләт филармонияһы коллективы ошондай оло хеҙмәтен юғары баһалап, Рәмил Ғәйзуллинды Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына тәҡдим итте.**

# ҠУРАЙ МОҢОН...

## донъяға танытты

### Ижад һуҡмағы инеше

Уны Хоҙай юҡҡа ғына хозур тәбиғәтле, Инйәр буйында тауҙар ҡосағына һыйынып ултырған Татлы ауылында донъяға килтермәгәндер. Бәлки, тап ошо матурлыҡ һәм серлелек Рәмил Ғәйзуллиндың талантлы, данлыҡлы ҡурайсы кимәленә күтәрелеүенә сәбәпсе булғандыр.

...Бесән мәле. Рәмил был күп көс талап иткән һөнәрҙе беренсе класта уҡ үҙләштерә. Бесән саба беләһең икән, тимәк, һин ысын ир-егет. Бер мәл Рәмил теше һыҙлауға уянып китә. Әсәһенең дауаханаға алып барыр әмәле юҡ, сөнки бөткөһөҙ донъя мәшәҡәттәрен үҙҙәре генә тарта. Атайҙары утыҙ бер генә йәшендә алты балаһын ҡатынына ҡалдырып, баҡыйлыҡҡа күсә. Иң кескәйҙәре Рәмилгә ни бары бер генә йәш була. Фәүзиә апай: "Мә, ошоно өрһәң, баҫылыр", - тип, улына ҡурай үләнен тоттора. Рәмил үҙе белгәнсә тиштектәр уйып, ҡурайын быжылдата башлай. Теш һыҙлауы ла баҫылғандай була, ҡурайҙа өлкәндәр һымаҡ тауыштар сығара алыуы ла уны дәртләндерә. Ошо ябай ғына көпшә кескенә малайҙың ғүмерлек юлдашына әйләнеп, киләсәктә уны оҫта ҡурайсы булараҡ ярты донъяға танытасағы береһенең дә уйына инмәй ул ваҡытта. Дүртенсе класҡа Белорет интернат-мәктәбенә уҡырға барғас, Мөхәррәм Сәлимов етәкселегендәге түңәрәктә ҡурайҙа уйнау нескәлектәрен үҙләштерә үҫмер. Татлы ауылы клубында беренсе тапҡыр "Азамат" көйөн башҡарып, халыҡтың хуплап ҡыҫҡырғанын бөгөн дә хәтерләй музыкант. Рәмил Ғәйзуллинға был Өфөгә ҡурай йүнәлеше буйынса уҡырға инергә, юғарыға үрләргә, киләсәккә ышаныс менән барырға ҙур этәргес бирә.

Башта ул Өфө сәнғәт училищеһында белем ала, артабан Өфө сәнғәт институтында Башҡортостандың халыҡ артисы Ришат Рәхимов етәкселегендә ҡурай серҙәренә өйрәнә. Шул уҡ ваҡытта БАССР-ҙың халыҡ артисы Ғата Сөләймәновтан оҫталыҡ дәрестәре ала. Әйткәндәй, маэстро ғаиләһендә барыһы ла ниндәй ҙә булһа музыка ҡоралдарында уйнай. Кемеһе - ҡурайҙа, кемеһе - баянда, кемеһелер мандолинала. Әммә сәнғәт юлын, моңдо ғүмерлек юлдашы итеп Рәмил генә һайлай.

Сәнғәт училищеһын егет бер юлы ҡурай һәм борғо класы буйынса тамамлай. Өсөнсө курста уҡығанда оркестрҙа дирижер булып йөрөй. Һуңынан әрме хеҙмәтенә барғас, был тынлы музыка ҡоралында уйнай белеүенең кәрәге тейә егеткә. "Мин тынлы музыка ҡоралдары оркестрында хеҙмәт иттем. Хәҙерге заман студенттарына ла ике йүнәлеште үҙләштерергә кәңәш итер инем. Был тормошта ныҡ ярҙам итә. Музыка ҡоралдарын сағыштырып ҡарау ҙа үҫтерә һине", - ти Рәмил Мәүлит улы.

### Филармония артисы

1987 йылдың йәйендә Рәмил Ғәйзуллин Өфөгә филармонияға эшкә килә. Профессиональ хеҙмәт юлын Рамаҙан Йәнбәков бригадаһында башлай. Баймаҡ, Белорет районлдарында үткән беренсе гастролдәрен һаман хәтерләй ҡурайсы. Халҡыбыҙҙың моңло һандуғастары Мәүлетбай Ғәйнетдинов, Роза Аккучукова, Фәнил Ишморатов, Миңлеғәли Ханов, Фәрит Шәйхетдиновты берләштергән төркөмдө бөтөн ерҙә ихлас ҡаршы алалар, алҡышлап оҙаталар. Концерттар аншлаг менән үтә. Асия һәм Илфаҡ Смаковтар менән бергә ижад итеү уның өсөн ҙур тәжрибә була. Шулай гастролдән гастролгә йөрөй торғас, Рәмилдә республикабыҙҙың иң олпат коллективтарының береһе - "Йәдкәр" фольклор-эстрада төркөмөнә тәғәйенләйҙәр. Һәләтле йәш артисты коллектив үҙ итә. Ғәли Хәмзин, Тәнзилә Үҙәнбаева, Мәүлетбай Ғәйнетдиновтар кеүек мәшһүр йырсыларыбыҙ сәхнәләрҙә уның ҡурайына ҡушылып йырлай.

Ошо уҡ осорҙа ул Силәбе сәнғәт һәм мәҙәниәт академияһының дирижерҙар бүлеген тамамлай. Ҙур хыялдар менән янып йөрөгән егет бер аҙ ваҡыт үткәндән һуң үҙ төркөмөн булдыра. Төркөмдә бер генә кеше - үҙе. Кеше-оркестр тип таный башлайҙар уны. Ҡамыштан һәм ағастан яһалған ҡурай, бер нисә төрлө ҡумыҙ, шулай уҡ төрлө милләт уйын ҡоралдары, мәҫәлән, ҡырғыҙҙарҙың чопо-чоор, венгрҙарҙың дапл фруяһында уйнай, улар араһында үҙе уйлап тапҡан музыка ҡоралы хайран да бар. Ҡайҙа ғына сығыш яһамаһын - республиканың ҡала-райондары, Рәсәй төбәктәре, сит илдәр булһынмы, бар ерҙә лә уны ихлас ҡабул итәләр.

### Тарихҡа ингән оркестр

Донъяла булған милли оркестрҙарға ҡарап, башҡорт милли уйын ҡоралдары оркестрын ойошторорға ине, тип гел хыяллана Рәмил Мәүлит улы. Музыканттың был ниәтен етәкселек хуплай һәм уның тырышлығы менән 2001 йылда Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры барлыҡҡа килә. Коллективҡа 40-тан ашыу музыкант эшкә алына һәм бөгөн уның репертуарында 300-ҙән ашыу әҫәр бар. Рәмил Ғәйзуллин оркестр менән 15 йыл етәкселек итә. Ошо осорҙа коллектив Рәсәйҙең байтаҡ төбәктәрендә сығыш яһап, республикабыҙҙың мәҙәни йөҙөн күрһәтеп, данға күмелә. Бынан тыш, оркестр ике тапҡыр халыҡ-ара, бер тапҡыр Рәсәй конкурсында Гран-при яулай, Рәсәйҙең беренсе Президенты призына лайыҡ була, Ҡаҙанда, Мәскәүҙә үткән конкурс-фестивалдәрҙә беренсе дәрәжә лауреат тип танылa. Былар барыһы ла Рәмил Ғәйзуллиндың фиҙаҡәр хеҙмәт һөҙөмтәһе.

Һуңғы һигеҙ йыл эсендә Рәмил Ғәйзуллинға донъяның утыҙ дүрт оркестры менән бер сәхнәлә сығыш яһау бәхете тейә. Төрлө фестиваль-конкурстарҙа ҡатнаша, еңеүҙәр яулай. Шулай илдәр буйлап гиҙә торғас, Рәмил Ғәйзуллинға бер уй килә. Халыҡ уйын ҡоралдары оркестрҙары ҡатнашлығында конкурс ойошторорға теләй ул. Был хыялды тормошҡа ашырыр өсөн уға күп көс түгергә тура килә. 2012 йылда Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығы ярҙамы менән тәүге бәйге үтә. Унда республиканың оркестрҙары һәм халыҡ уйын ҡоралдары ансамблдәренән тыш, Ҡытайҙан, Төньяҡ Осетиянан да коллективтарҙың ҡатнашыуы сараға мәртәбә өҫтәй. Конкурстың шарты: оркестрҙар мотлаҡ башҡорт халҡының музыкаһын да уйнарға тейеш. Шуныһы ҡыуаныслы, тап ошо бәйгенән һуң сит төбәктәрҙән, илдәрҙән килгән һәр коллектив үҙенең репертуарына башҡорт халҡының әҫәрҙәрен индерә.

**Шулай итеп, Рәмил Ғәйзуллин милли мәҙәниәт үҫешенә тос өлөш индергәне, башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарына ҡарата һөйөү, һоҡланыу, ғорурланыу тойғолары уятҡаны, милли рух тәрбиәләгәне өсөн дә Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына лайыҡлы тип иҫәпләйбеҙ.**

**Эльнара ШАФИҠОВА.**

*ЗАУЫҠ*

*Радик ХӘКИМЙӘНОВ*

### МӘСӘҒҮТ БАҘАРЫ

Ҡыйғыларҙан Мәсәғүткә
Ҡарамай араларға,
Дүшәнбикә, Рухтин аша
Йыш барҙыҡ баҙарҙарға.

Аҙна һайын иң ҙур баҙар
Ошонда гөрләй ине,
Ит-май күҙләп, кейем эҙләп,
Бик күптәр йөрөй ине.

Иван - "знакум" ошонда
Ни генә һатмай ине,
- Әйҙә, һайла! Ал да ал, - тип,
Тауарын маҡтай ине.

Ризыҡ, кейемдәр байтаҡ та,
Кеҫәләр ине "таҡыр",
Көмөш тәңкәләр һирәк шул,
Күбеһе булды "баҡыр".

Шуға ҡайсаҡ "знакум"ға
Бурысҡа ла керелде,
Баҡса ҡаҙып, утын ярып,
Тамаҡ өсөн йөрөлдө.

Тормошобоҙ яйланһын тип,
Төрлө эштәр башҡарҙыҡ:
Бесән саптыҡ, урман киҫтек,
Бер аҙ кейем, "аш" алдыҡ.

Ауыр ине шул йылдары,
Әрнетте шулар йәнде,
Беҙ өмөт менән йәшәнек,
Бәхет көтөп һәр таңды.

...Тағы килдем Мәсәғүткә,
Күпме ай-йылдар үткән?
Баҙарҙары һаман гөрләй,
Шаҡтай ҙа ҙурыраҡ икән!

Баҙарҙарҙа бары ла бар,
Хаҡтар һаман "тешләшә",
- Әйҙә, һайла! Ал тауарҙы, -
Кемдер миңә өндәшә.

Баҙар шауы, баҙар моңо
Ул бер серле тамаша!
Хәтирәләрҙе яңыртам
Уйҙарҙа йылдар аша!
Уйҙарҙа йылдар аша!

### УЯУ БУЛАЙЫҠ

*Һуғыш осоро балаларына бағышлана*

Беҙҙең тыуыу шатлыҡ булды микән?..
Тыуғанбыҙ бит һуғыш башланғанда,
Халҡым өсөн иң ҡайғылы мәлдә,
Ил өҫтөнә дошман ташланғанда.

Тыуған көндән башлап, ғүмер буйы
Аҙмы күрҙек тормош михнәттәрен?
Һуғыш балалары: малай, ҡыҙҙар -
Мәхрүм булдыҡ йәшәү рәхәтенән.

Бер туйғансы ашар ризыҡ булмай,
Көн кисерҙек йүнле кейемдәрһеҙ.
Мәңгелеккә кәмһетелгән быуын,
Тороп ҡалдыҡ етем - атайҙарһыҙ!

Әсәйҙәр ҙә иртә ҡартайҙылар,
Яу ҡырынан көтөп ил ирҙәрен.
Хәтәр ғәрәсәтте еңдек бергә,
Бағышланыҡ илгә ғүмерҙәрҙе!

Йылдар үтһәләр ҙә, йөрәктәрҙә
Мәңге төҙәлмәҫлек тәрән яра,
Атайҙарын күрмәй үҫкәндәрҙең
Ғүмерҙәре инде уҙып бара!..

...Ил - имен дә! Донъя - имен түгел,
Ниңә ерҙә һуғыш уты тынмай?!
Эй, кешеләр! Уяу булайыҡсы,
Һуғыш яралары һаман һыҙлай!
Һуғыш яралары һаман һыҙлай...

### ЙОНДОҘЛО ҠАПҠАЛАР

*Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған ауылдаштарымдың яҡты иҫтәлегенә*

Ауылымдың урамдарын үтәм
Иркен һулап шәрбәт һауаһын.
Тирә яҡҡа гөлдәр хуш еҫ бөркә,
Йәнгә табам сихәт-дауаһын.

Ҡарап барам таныш өй-йорттарҙы,
Шатлыҡ тула берсә күңелгә,
Яҡташтарым, һеҙҙе һағынып ҡайттым,
Ауылым ҡапҡаларын күрергә!

Һаҡта торған ауылым ҡапҡалары
Һыҡрап ҡуя хәтер еленән,
Яуҙа ҡалғандарҙың иҫтәлеге,
Йондоҙ итеп шунда эленгән.

Шул ҡапҡалар хәтирәләр һөйләй:
Үткәндәрҙе, һуғыш йылдарын,
Биш йөҙ батыр яуҙа ятып ҡалған
Ауылымдың аҫыл улдары!
Һиҫкәнеп тә китә уйҙарым!

Ҡапҡаларҙа янған йондоҙҙар ул,
Яҡташтарҙың яуҙа ҡалғаны,
Бер нигеҙҙән дүрт-биш яугир мәрхүм -
Улар ҡәҙәр һуғыш ҡорбаны!

Шығыр-шығыр килә ник ҡапҡалар?
Йәнде өтә әрнеү тауышы,
Әллә елдәр алып ҡайтҡан микән,
Ятып ҡалғандарҙың һағышын?

"Онотмағыҙ беҙҙе, онотмағыҙ!"
Ҡайҙан килә икән ҡайтауаз?
"Беҙ үҙебеҙ ҡайта алмаһаҡ та,
Йәндәребеҙ илгә ҡайталар!"

Был йондоҙҙар - батырҙарға хөрмәт,
Ауылдаштарҙың ул - хәтере,
Тын баҡсала яугирҙарға һәйкәл,
Яндарында гөлдәр гел тере!

...Мәңге шулай балҡып торһон ине,
Батырҙарҙың йөрәк нурҙары,
Онотмаһын яңы килгән быуын,
Ғәрәсәтле һуғыш йылдарын!

✓ *Һуғышты өлкән сержант званиеһында тамамлай һәм күкрәгенә "Ҡыҙыл Йондоҙ", "Ватан һуғышы" ордендарын, "Хәрби ҡаҙанышы өсөн", "Ҡыйыулыҡ өсөн", "Германияны еңгән өсөн", "Японияны еңгән өсөн" миҙалдарын тағып ҡайта.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БАНАН ЙОҠЛАТА

■ Төндә насар йоҡлаһаң, йоҡларға ятыр алдынан физик күнекмәләр эшләп ал, тип кәңәш итә ғалимдар. АҠШ-ның Йоко милли фонды үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар яуаптары буйынса бер нисә төркөмгә бүленгән: уларҙың ҡайһылары күнекмәләрҙе даими яһаған, ҡайһылары еңелсә генә спорт менән шөғөлләнгән, ҡайһылары бөтөнләй күнегеү эшләргә яратмаған. Кем ниндәй ҙә булһа күнегеү төрө яһаған, улар яҡшыраҡ йоҡлаған. Кемдәрҙер матур төштәр күреүен дә билдәләгән. Көнөнә 10 минут ҡына йәйәү йөрөү ҙә йоҡоноң сифатын күпкә яҡшырта, ти белгестәр.

■ Баш мейеһенә даими энергия кәрәк, шуға ла эш ваҡытында нисек тукланырға кәрәк һуң? Ғалимдар раҫлауынса, бөтөн ризыҡтар ҙа баш мейеһенең эшмәкәрлеген әүҙемләштермәй. Мәҫәлән, сейә кеүек фабрикалы емештәр мелатонин күп, шуға ла улар йоҡоно килтерә. Ҡәһүә эскәндән һуң 60-90 минут ваҡыт үткәс кенә уның тәьҫирен тойорға була. Офиста банан ашау ҙа кәрәкмәй. Ул шулай уҡ йоҡоно килтерә. Көнбағыш, палтус балығы, тәм-том да шундай уҡ һөҙөмтәгә алып килә. Шулай булғас, эш урынында нимә ашарға һуң? Белгестәр билдәләүенсә, эремсек, йогурт кеүек һөт ризыҡтарына, төрлө бутҡаларға, йәшелсәгә, алмаға, йөҙөмгә, грушаға өҫтөнлөк бирергә кәрәк.

■ Аҙ йоҡлаған балалар икенсе типтағы диабет менән йышыраҡ ауырый. Төнгө йоҡоноң һәр өҫтәмә сәғәте артыҡ ауырлыҡты юғалтыу, мускул массаһын үҫтереү һәм ҡандағы глюкоза кимәлен түбәнәйтеү менән бәйле. Яңы тикшеренеүҙәрҙә 9-10 йәшлек 4525 бала ҡатнашҡан. Улар йоҡо режимы тураһындағы һорауҙарға яуап биргән. Уҡыу йылы дауамында балалар уртаса 10,5 сәғәт йоҡлаған. Ҡатнашыусыларҙың йоҡо оҙайлығы 8-12 сәғәт тәшкил иткән. Тикшеренеүҙәр шуны күрһәткән: башҡаларға ҡарағанда аҙыраҡ йоҡлаусыларҙа инсулинға тәьҫир түбәнәйгән. Бынан тыш, был балаларҙа артыҡ ауырлыҡ күҙәтелгән. Йәғни, аҙыраҡ йоҡлаусыларҙа икенсе типтағы диабет хәүефе ҙурыраҡ булған. Америка педиатрия академияһы тәҡдиме буйынса, 6-12 йәшлек балалар сәләмәт булыр өсөн 9-12 сәғәт йоҡларға тейеш.

■ Нью-Йорк университетында үткәрелгән яңы һынауҙар күрһәтеүенсә, бала мәктәпкә бармаған саҡта уҡ әйҙә уның менән китаптар уҡыу, баланың аңын үҫтереүсе уйындар уйнау, улар менән төрлө темаларға һөйләшеү баланың когнетив һәләттәрен камиллаштыра икән. Белгестәр бер төркөм балаларҙы тыуғандан алып 5-се класҡа тиклем күҙәткән. Өй шарттарында бала менән шөғөлләнеү уның телмәрен, башҡа һәләттәрен яҡшы үҫтергән, шуға ла улар мәктәпкә ҡайтҡан булып сыҡҡан ла, тиҫтерҙәре менән аралашыуҙа ла проблемалар тыумаған. Балағыҙҙың мәктәптә уңышлы булыуына тап һеҙ йоғонто яһай алаһығыҙ, ти ғалимдар.

■ Авокадо сәләмәтлеккә бик файҙалы. Американың Nutrion Impact компанияһы тикшеренеүселәре авокадо кеше организмында матдәләр әйләнешен нормаға килтерә ала, тип иҫәпләй. Ғалимдар 7 йыл дауамында 17,5 мең кешене күҙәтеп, көн һайын авокадо ашаусыларҙа метаболик синдром үҫеше хәүефе ныҡ түбәнәйеүен асыҡлаған. Әлегә сәләмәтлеккә авокадоның йоғонтоһо тулыһынса өйрәнелеп бөтмәгән. Яуап биреүселәрҙең сәләмәт өлөшө шулай уҡ йәшелсә, емешләк һәм витамин, микроэлементтарға бай ризыҡтарға өҫтөнлөк биреүе тураһында белдергән.

АТАЙҘАР МӘКТӘБЕ

# ЕТМЕШ ТӨРЛӨ ҺӨНӘРЛЕ ИНЕ...

**Былтыр беҙ атайыбыҙ Баймырҙин Мәхмүт Шаһимарҙан улының 100 йыллығын билдәләнек. Ул 1917 йылдың 3 августа Баймаҡ районы Ысмаҡай ауылында Баймырҙин Шаһимарҙан Лотфулла улы менән Биктимерова Хәйерниса Хаммат ҡыҙы ғаиләһендә тыуған, шунан улар Йомаш ауылына күскәндәр.**

Ул йылдарҙағы билдәле ваҡиғалар - Ваҡытлы хөкүмәт, Октябрь революцияһы, граждандар һуғышы, аслыҡ, башҡорт халҡының алдына килеп баҫҡан бик ауыр һәм ҡатмарлы дини һәм милли мәсьәләләр - бер генә ғаиләне лә урап үтмәгәндер. Ауылға йә аҡтар, йә ҡыҙылдар килеп, үҙ талаптарын һөрәләр, ҡорал тоторҙай ир-егеттәрҙе алып китәләр. Иртәгә ни булырын берәү ҙә аныҡ әйтә алмаған осор. Етмәһә, Баймырҙиндар ғаиләһе билдәле муллалар тоҡомонан була. Рәсәй мосолмандары Баш мөфтөйөнөң Урал аръяғындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле, имам-ахун, хажи Ғариф әфәнденең тикшеренеүҙәренән белеүебеҙсә, Баймырҙиндар тоҡомонан XVIII быуат уртаһынан XX быуат башынаса 8 кеше йә имам, йә мәсеттә мөғәллим булған. Шуларҙан күренекле дин әһеле - Шаһисолтан бин Мөхәмәтшаһ Баймырҙин 1840-1854 йылдарҙа Мәншүрлы (Указлы) мулла була. Уның ҡәберендәге ҡолпа ташын Йомаш зыяратына ингән ерҙә күрергә була. Ошоларҙы иҫкә алғанда, 1920 йылдарҙа 25 йәшлек Шаһимарҙандың ғаиләһен ниндәй ҡурҡыныс көткәнен аңларға була, сөнки уның атаһы Лотфулла Баймырҙин да ул йылдарҙа ауыл мәсетендә имам була һәм ауыл мәҙрәсәһендә ир балаларҙы уҡыта (1927 йылда мәрхүм була). 1935-1936 йылдарғаса Йомашта, күрше Ысмаҡай, Ислам ауылдарында мәсеттәрҙе емереп бөтәләр. Золом дәһшәте көсәйә. Шаһимарҙан һәм уның өлкән улы Мәхмүт өҫтөндә лә ҡара болоттар ҡуйыра. Метрикалар яҙыу мулла, имамдар ҡулында булыуҙан файҙаланып, беҙҙең атайыбыҙ Мәхмүтҡә 1916 йылда тыуған тип документ яҙып бирәләр һәм 1937 йылдың 27 октябрендә уны әрмегә оҙаталар. Бер аҙна үтеүгә, 1937 йылдың 4 ноябрендә Шаһимарҙан ҡартатайҙы ҡулға алалар (Ул шул китеүҙән кире әйләнеп ҡайта алмай. 1957 йыл аҡлана). Ә беҙҙең атай ул көндө әрме юлында була. 13 ноябрь Украинала Кирово ҡаласығында хеҙмәт итә башлай. Ауылда үҫһә лә, арыу ғына грамотаһы булған йәш һалдатты тәүге йылды уҡ хәрби аэродромда телеграфист итеп ҡуялар. Хәрби бүлектең оҫтаханаһында токарь һөнәрен дә ныҡлап өйрәнеп ала ул. 1939 йылда фашистар Польшаға бәреп ингәс, илебеҙҙең көнбайыш сигендә хеҙмәт итеүселәргә ҙур ауырлыҡтар төшә. Беҙҙең атай көнбайыш Украинаны - Тернополь, Львов, Станиславов (хәҙерге Ивано-Франковск), Коломыя ҡалаларын азат итеүҙә, унан һуң Северная Буковинаны азат итеүҙә ҡатнаша. Әрменән 1940 йылдың декабрь айында ауылға ҡайта.

Ләкин ауылда ярты йыл ғына булып, хәрби хеҙмәтте онотоп та өлгөрмәй, һуғыш башлана. Әлбиттә уны, күпмелер яугир тәжрибәһе булғанлыҡтан, районда тәүгеләр рәтендә фронтҡа оҙаталар. Төньяҡ Көнбайыш фронтта Старая Русса ҡалаһы өсөн, Курск Орел дуғаһында, Киев өсөн һуғыштарҙа ҡатнаша. Гитлерсыларҙы илебеҙҙән ҡыуып сығаргас, Венгрияны, Румынияны азат итеүҙә ҡатнаша. 1945 йылда Мәскәүҙә хәрби политик училищелә (ВПУ им. В.И. Ленина) уҡыуға ҡалдырыла. Һуңынан көнсығышҡа - Япон самурайҙарына ҡаршы һуғышҡа ебәрелә. Унда ул Хинган тауҙары, Эске Монголия аша үтеп, Ҡытайҙың Жэхэ ҡалаһына барып етә. Һуғышты ул өлкән сержант званиеһында тамамлай һәм күкрәгенә "Ҡыҙыл Йондоҙ", "Ватан һуғышы" ордендарын, "Хәрби уңыштары өсөн", "Ҡыйыулыҡ өсөн", "Германияны еңгән өсөн", "Японияны еңгән өсөн" миҙалдарын тағып, тыуған ауылға 1945 йылдың декабрь айында ғына ҡайтып төшә.

Атайыбыҙ тәүге йылдары Йомаш мәктәбендә хәрби әҙерлек дәрестәре алып бара, колхозда партком, физрук була. Хәҙерге йәштәргә сәйер тойолалыр, әммә ул ваҡытта ауылда хатта волейбол уйнай белгән кеше лә булмай. Ул волейбол майҙансығы эшләп, сетка алып ҡайтып, йәштәрҙе уйнарға өйрәтә. Һуңғараҡ колхоз оҫтаханаһында токарь-механик булып эшләй башлай. Колхоз баҡсаһына һыу һиптергес ҡуласа эшләргә була, тигән тәҡдим менән колхоз рәйесе Латипов Ғәзим Ғәлим улын дәртләндерә һәм Һаҡмар буйына ауыл оҫталары менән бөтә районды шаулатҡан һыу ебәргес ҡуласаны эшләп тә ҡуялар. Һуғыштағы электрик, элемтәсе һөнәре лә бушҡа китмәй. Колхозға килгән барлыҡ электр көсө менән эшләгән яңы техниканы көйләү, ремонтлау эштәрендә ҡайнай. Дизель ултыртып, ауылды электрлаштырыу, радиоүҙәк ҡуйып, һәр өйгә ҡалпаҡ-радио үткәреү эштәрен етәкләй. Ауылда беренсе киномеханик та, дизелдә лә, радиоүҙәктә эшләүсе лә ул була.

Шундай ҡаты һуғышта булып, күп илдәрҙе, кешеләрҙең йәшәйешен күргәнгәме, үҫмер сағы ҡурҡыныс һәм шомло йылдарҙа тура килгәнгәме - ул күп һүҙле булманы, ҡулынан килгән барлыҡ эште лә ерене еткереп башҡарырға тырышты һәм башҡаларҙан да шуны талап итте. Ҡул ҡаушырып тик ултырмаҫ, тынғыһыҙ кеше ине ул. "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ" тигән мәҡәл тап беҙҙең атай кеүектәргә әйтелгәндер. Ғөмүмән, алты баланы (шуларҙың дүртәүһе ир бала) тәрбиәләү, уҡытыу, эшкә өйрәтеү еңелдән булмағандыр. Әммә беҙҙең өсөн атайыбыҙ тәрбиәһе хәҙерге күҙлектән ҡарағанда хатта эталон һымаҡ та күренә. Беҙгә берәй эш ҡушһа, мотлаҡ рәүештә эшләргә бурыслы инек. Эшләгәндә лә исем өсөн генә түгел, ә нисек был эште енелерәк һәм яҡшыраҡ, ниндәй инструмент менән башҡарыу юлдарын бик ентекләп аңлата ине. Үҙебеҙҙең ишек алдында махсус оҫтахана булды - ниндәй генә инструмент юҡ ине унда! Тимер менән эшләү өсөн, ағас эшкәртеү өсөн, электр приборҙары, төрлө үлсәү приборҙары һ.б. Һәр береһе күҙ алдында, үҙ урынында булды - үҙенә күрә ҡаты тәртип. Колхоз эше күп булһа ла, ул йортта ла тик ултырманы. Йыш ҡына үҙенең оҫтаханаһында ауылда берәй өй һалған кешенең заказын - тәҙрә рамдары, яҡтары һәм йөҙлөктәре-фәлән эшләр ине. Өйгә инһә, күберәк беҙҙең менән шөғөлләнде. Ул "ҡара хисап"ҡа шәп булды. Хәтерләйем, 5-7 кластағы математиканан хәрәкәткә, тиҙлеккә арналған мәсьәләләрҙе ул миңә аңлашылмаған, бик тә сәйер һәм үҙенсәлекле юсулдар менән сисер ҙә ҡуйыр ине.

Өйҙә төрлө атлас-карталар күп булды. Шуларҙы ҡарап ултырырға ярата ине атай. Беҙгә лә бәләкәй саҡта шул карталар менән булышыу юҫулын уйлаған бит - берәй атластың ныҡ сыбар, ваҡ яҙыулы битен аса ла, бына шул исемле ҡаланы (мәҫәлән, Станиславов - ул хеҙмәт иткән ҡала) кем таба ала, тип ҡалдырып китә ине. Был беҙҙең өсөн үҙенә күрә уйын ғына. Әйткәндәй, өйҙә һәр ваҡыт шашка, шахмат булды, атай төрлө башватҡыстар менән дә булышырға ятарты. Китапхананан (элеккесә избачтан) башватҡыстар китабы алып, ағастан, тимерсыбыҡтан, шнурҙан әллә ниндәй башватҡыстар эшләп, беҙҙе лә шулар менән ҡыҙыҡһындыра торғайны. Берәй кеше килһә, бигерәк тә ҡунаҡ саҡырғанда, шулар менән булышып мәрәкәләшәләр ине. Ул хатта ҡартайғас та ейәнсәрҙәре менән ярышып, кубик-рубикты уйнап ултырҙы.

Өйҙә балаларға эш һәр ваҡыт табылып торҙо. Ишек алдында оялар яһап, бер нисә йыл кролик үрсеттек. Уларға ҡайҙан алып, нәмә ашатырға, балаларын нисек тәрбиәләргә, ауырымаһындар өсөн ни эшләргә - бөтәһен дә белергә кәрәк. Өйҙә аквариум булды. Унда төрлө үтә күренеп торған матур балыҡтар йөҙә ине. Уларҙы ашатыу, һыуын дөрөҫ алыштырыу, таҙартыу кеүек эштәр ҙә байтаҡ тәжрибә талап итә. Һунарҙан ул бер заман тереләй төлкө балаһы тотоп алып ҡайтҡан. Шуны эт һымаҡ сылбырҙа тотоп, ҙурайғансы тәрбиәләп йөрөнөк. Был да беҙҙең өсөн тәбиғәт менән аралашыу ине. Миңә 10 йәш тирәһе ине, ҡайҙандыр бер ҡарттан, Ишбирҙе ауылынан, буғай, ат арбаһына тейәп, ояһы-туһылы менән умарта алып ҡайттыҡ. Шул бер оянан бер нисә йылда үрсетеп, артабан 8-15 умарта ҡорт тоттоҡ. Әлбиттә, ояларҙы, рамдарҙы һатып алманыҡ, уларҙы матурлап, стандарт размерҙа атай үҙе эшләй ине. Бал күп булды. Беҙ флягалар тейәп, Баймаҡ, Магнит баҙарҙарында ла йөрөнөк. Минең бер ҡустым ауыл хужалығы институтын тамамлап, умартасылыҡ белгесе булып сыҡты.

Беҙҙең Йомаш ауылында элек 8 йыллыҡ мәктәпте бөткәнсе балалар, гәҙәттә, русса һөйләшә белмәне. Атай бер заман, русса өйрән, тип, мине Өфө аръяғына, Иглин районы Красный Восход ҡасабаһына, ҡарағайҙар араһындағы шифахана-мәктәпкә алып барып ташланы. 1960-1961 йылдарҙа 6-сы класты тулыһынса шунда русса уҡыным. Тәү осорҙа русса бер нәмә лә аңламағас, малайҙар миңә ҡарап нимәлер һөйләһә, мин

✓ **Шуларҙы тәҙәтәм тип атай көндәр буйы булышҡанда, беҙгә, малайҙарға ла техниканы өйрәнеү ҡыҙыҡ та, файҙалы ла булғандыр. Минең ике ҡустым нефть институтында уҡып, юғары белемле инженер булып сыҡтылар.**



"Нет!" тип кенә ебәрә инем. Дөрөстә лә гуманитар фәндәрҙән бер нәмә лә аңламайым. Тик "телһеҙ" булһам да, математиканан таҡта янында ла, контроль эштәрҙе лә яҡшы эшләй инем. Атай, әсәй Яңы йыл каникулында ғына мине күрергә килделәр. Минең күҙҙәрҙә ҡайтыу өмөттәре күренгәнгәме, атай минә руссалап "Тяжело в учении, легко в бою!" тине лә, аңланыңмы тип, тағы ла ниндәйҙер һүҙҙәр менән тынысландырып, йыуатып, иртәгеһенә үк ҡайтып та киттеләр. Йомаш мәктәбенә кире ҡайтҡанда мин инде русса бик яҡшы һөйләшә, уҡый-яҙа белә инем. Ауылда 8 йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, атай мине Өфөләге 1-се республика интернатмәктәбенә уҡырға алып барҙы. Интернатты алтын миҙалға тамамлап, 1965 йылда, 16 йәштә МГУ-ға математика булегенә уҡырға индем.

Тағы ла шуны өҫтәгем килә. Атайҙың ҡолағына, халыҡ әйтмешләй, "айыу баҫҡан" ине. Шулай ҙа ул (бәлки, тап шуның өсөндәр ҙә) музыка, йыр тыңларға яратты. Һуғыштан алып ҡайтҡан пластинкаларҙы патефонда йыш тыңланы, радиоузелда эшләгәндә бөтә ауылға ла шуларҙы һәм башҡорт йырҙарын яңғырата ине. Беҙҙең әсәй уҡытыусы ине, матур йырсы ла булды. Атай бер көндө өр-яңы мандолина алып ҡайтты. Үҙе матур ғына итеп "Карабай" көйөн уйнап күрһәтте лә, ябай ғына схема һыҙып, ҡайһы ергә баҫып, нисә тапҡыр һуғырға икәнен яҙып минә бирҙе. Ауылда атайҙың ике туған ҡустыһы Салауат ағай (билдәле ҡурайсы, Биктимеров Рушандың атаһы) мандолинала, скрипкала бик оҫта уйнай ине. Ул мине бик күп көйҙәр уйнарға өйрәтте. 6-сы класта урыҫ мәктәбендә уҡығанда балалар араһында минең "абруй" ҙур булды, сөнки бөтә концерттарҙа ла мандолинала башҡорт көйҙәре уйнап ҡатнаша инем. Хатта студент булғас та, каникулда йәштәр менән күрше ауылдарға барып, концерт ҡуйып йөрөнөк.

Беҙ бәләкәй саҡта атайҙың ике тәгәрмәсле "Иж" мотоциклы булды, ауылда улар бер нисәү генә ине, һуңғараҡ "кәзә" мотоциклдары күбәйҙе. Хатта һабан туйҙарында Һәкмәр буйында шул бәләкәй мотоциклдарҙа уҙышыу ҙа бар ине. Мото-, электро-, радио- техниканы ярайһы уҡ яҡшы белгәнгәләр, беҙҙең ишек алды тулы йүнәтергә тип ауылдаштар килтергән боҙоҡ мотоциклдар, караут-урындыҡ аҫты тулы радио, патефон булды. Шуларҙы тәҙәтәм тип атай көндәр буйы булышҡанда, беҙгә, малайҙарға ла техниканы өйрәнеү ҡыҙыҡ та, файҙалы ла булғандыр. Минең ике ҡустым нефть институтында уҡып, юғары белемле инженер булып сыҡтылар.

Мин был мәҡәләлә атайыбыҙҙың күберәк минә ҡағылышлы булған эштәре тураһында ғына яҙҙым. Әммә ул, әлбиттә, бөтә балаларына ла ҙур иғтибар менән һәм тигеҙ ҡараны. Атай-әсәйебеҙ беҙгә, бер ниндәй ауырлыҡтарға ҡарамай, алты баланы үҫтереп, һәр ваҡыт беҙҙең янда булып, бөтәбеҙгә лә юғары белем алырға ярҙам итеү генә түгел, иң мөһиме - үҙҙәре белгән бөтә төрлө һөнәргә өйрәтеүҙәре менән дә ҡәҙерле. Беҙ улар менән ысын күңелдән ғорурланабыҙ, һәр саҡ йылы иҫтәлектәр һәм ҙур хөрмәт менән иҫкә алабыҙ.

**Мәжит МӘХМҮТОВ,**
**хеҙмәт ветераны,**
**Юғары профессиональ белем биреү буйынса Рәсәй Федерацияһының почетлы хеҙмәткәре.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Шундай һығымта яһағандан һуң бөгөн ғалимдар иҫтәлектәрҙе һаҡлауҙың ысулдарын эшләй. Беҙ уларҙың ярҙамы менән файҙаланып, уҡыусыларҙы мәғлүмәти көсөргәнеш һәм хаос менән нисек көрәшергә, файҙалы мәғлүмәтте файҙаһыҙынан айырырға өйрәнергә тейешбеҙ. Йәғни уларҙы айырым "папка"ларға, махсус "кәштә"ләргә һалып, кәрәкмәгәнен шунда уҡ ташларға. Ошо алымдарҙы ҡулланыусы мейе мөмкинлектәрен тәртиптә һаҡлай, тимәк, еңеүсе була аласаҡ, тип белдерә психологтар. Бөгөн кемгә нимәне хәтерендә һалып ҡуйыу кәрәклегенән башлайыҡ.

## "Тамашасы"ға нимә ярҙам итә?

Хәтерҙә ҡалдырыу ысулдарын психологтар "елем" тип атай. Кемдер күҙе менән "йәбештерә". Уларҙы "тамашасы" тиҙәр. Был категория үҙ күҙҙәре менән күргәнде яҡшыраҡ аңлай һәм хәтерендә яҡшыраҡ ҡалдыра. Тап ошо төр һеҙҙеке икәнен нисек белергә? Мәҫәлән, һөнәр төрө буйынса китап менән эшләгәндә, уны үҙ алдығыҙға, шым ғына уҡығанда материалды яҡшыраҡ үҙләштереүегеҙҙе тояһығыҙ. Йәки бер тапҡыр таныш булмаған йортта булһағыҙ ҙа, һуңынан ундағы әйберҙәрҙе аныҡ урыны менән әйтеп һөйләй алаһығыҙ. Был төр хәтерҙең иң юғары кимәле - "фотоға төшөрөү", йәғни бындай һәләткә эйә кешеләр секунд эсендә предметты, биҙәкте йәки документты ҡарап, һуңынан уны бәләкәй генә деталдәренә тиклем һөйләп бирә ала, әйтерһең дә күсермәнән алғандар. Икенсе төр - ассоциатив хәтер. Ассоциация - беҙ күргән нәмәләрҙе быға тиклем күҙ иҫләгән күренештәр менән нығытып ҡуйыуҙың күҙгә күренмәгән ысулы. Күптәр ассоциацияны яңы һүҙҙәрҙе хәтерҙә ҡалдырыу өсөн ҡуллана. Табип, философ Ибн Сина (Авиценна) Бохара хакимының китапханаһында 10 мең китап уҡый. Бер нисә йылдан һуң нуғыш ваҡытында китапхана янып, юҡҡа сыға. Ибн Сина, инде оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, уларҙың барыһын да хәтерендә тергеҙә һәм 40 писаргә текстарҙы яттан әйтеп, яҙҙыра.

Наполеон бер ваҡыт, поручик булған ваҡытында, гауптвахтаға эләгә һәм унда, күңелһеҙлектән, Рим хоҡуҡиәте буйынса китап уҡый. Ике тиҫтә йылдан һуң ул унан ҡайһы бер цитаталарҙы һүҙмә-һүҙ килтерә. Суворов ҡартайғансы үҙ армияһы һалдаттарын йөҙгә генә түгел, исемдәре менән иҫләгән. Академик Абрам Иоффе ғүмеренең һуңынаса логарифмдар таблицаһын яттан белгән. Ә был бер-береһе менән бер нисек тә бәйләнмәгән төрлө йөҙҙәрсә һан. Сатрашсы Александр Алехин бер юлы 30-40 дәүҙәүсе менән бер үк ваҡытта хәтерҙән генә шахмат уйнай алған.

## "Тыңлаусы"ларға нимә ярҙам итә?

Икенсе категория ҡолаҡтары менән "йәбештерә". Уларға тауыш оҡшай, улар һүҙҙәргә ҙур әһәмиәт бирә. Үҙегеҙҙең "тыңлаусымы", юҡмы икәнлегегеҙҙе нисек белергә? Бының өсөн ишеткәнегеҙҙе (лекция, доклад) йәки үҙегеҙҙең ҡысҡырып уҡығанығыҙҙы хәтерегеҙҙә яҡшыраҡ ҡалдырыуығыҙҙы асыҡларға кәрәк. Бынан тыш, һеҙ бер тапҡыр ишеткән музыкаль әҫәрҙе хәтерегеҙҙә ҡалдырырға тейешһегеҙ. Уңдай кешеләрҙә "Угадай мелодию" кеүек теле- һәм радиотапшырыуҙарҙа еңеүсе сифатында күрергә мөмкин.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

*СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ*

# ФИНИК АША ЛА...

♦ Ашҡаҙан-эсәк трактында һауа барлыҡҡа килгәндә, тарттырылған ҡара әнис (черный тмин) ҡушылған пресланған финик ашарға кәрәк.

♦ Керпектәрегеҙҙе үҫтереү һәм оҙонайтыу өсөн бер нисә пресланған финикты яндырырға һәм тарттырырға, йоҡлар алдынан ошо онтаҡты күҙ тирәләй һөртөргә.

♦ Туҡ эсәк ауыртҡанда һәм уның эшмәкәрлеге боҙолғанда ас ҡарынға 1 ҡалаҡ бал һәм һуңынан пресланған 7 финик ашарға. Йоҡлар алдынан 1 балғалаҡ дөйә сәнскәге үләненән әҙерләнгән (верблюжья колючка, верблюжье сено) майҙы ҡабып, 100 мл ҡара әнис төнәтмәһе эсеп ҡуйырға.



♦ Дистрофия булғанда финик менән дөгө төнәтмәһен йыш эсергә.

♦ Баш өйәнәге (мигрень). Тәү сиратта арҡаға һәм муйынға массаж эшләргә кәрәк. Артабан табип гомеопатик препараттар тәғәйенләй. Бынан тыш, көн һайын йәшел ҡытай сәйе эсеү зарур, сөнки ул баш һөйәге эсендәге баҫымды төшөрә. Дауалана башлағандың тәүге аҙналарында баҫыу ҡырҡбыуыны (полевой хвощ) үләненең төнәтмәһен (көнөнә өс тапҡыр стакандың 1/5 өлөшөн) эсергә һәм көн һайын 50-100 грамм финик ашарға кәрәк.

♦ Нервы ауырыуҙарынан финик ашап, артынан бер стакан һөт эсеп ҡуйырға кәрәк.

♦ Ябыҡлыҡтан финикты сәтләүектәр, мәҫәлән, арахис менән бергә ашарға.

♦ Ҡаҡырыҡ бүленеп сығыуын яҡшыртыу һәм быуындарҙағы ауыртыуҙарҙы бөтөрөү өсөн финик балы эшләп, көнөнә өс тапҡыр эсергә.

♦ Яман шештән финик, бал, ҡара әнис һәм Александрийская сенна (кассия) япрағын тигеҙ өлөштә алып, уларҙы бергә болғатабыҙ. Бәләкәй өлөштәр менән ҡулланабыҙ.

♦ Нығытыусы (тонуста тотоусы) сара булараҡ пресланған финик, дөйә сәнскәге, ҡара миробалан, имбер, дәрсенде (корица) тигеҙ күләмдә алып тарттырырға һәм талғын утта йылытып, барыһын бергә бал менән болғарға. Һуңынан массаға кокос һөтө һалып, ҡайнатма кеүек ашарға.

♦ Потенцияны күтәреү өсөн бер стакан финикка 2 стакан һыу һөт, 1 балғалаҡ дәрсен онтағы һалып, яҡшылап болғарға, һалҡын урында бер тәүлек төнәтергә. Финиктарҙы көн дауамында ашап, артынан һөт эсеп ҡуйырға. Бындай ҡатнашманы көн һайын ашау енси теләкте арттырып, орлоҡто көслө итәсәк. Бигерәк тә ул көҙ-яҙ осоронда файҙалы.

♦ Эс ҡатыуҙан рецепт. 5 финикка 0,5 литр һыу ҡойоп, уны компот кеүек ҡайнатырға. Һыуынған төнәтмәне стаканға ҡойоп, ас ҡарынға эсергә. Ҡалған "компотҡа" бер үс һоло киҫәксәләре (хлопья) һалып болғап, 30 минутҡа ултыртып ҡуйырға ла, килеп сыҡҡан массаны иртәнге аш урынына ашарға.

♦ Инсультты һәм йөҙ нервыһы фалижын дауалау. Йомшаҡ финиктарҙың төштәрен алып, ит турағыс аша үткәрергә һәм килеп сыҡҡан массаны көнөнә өс тапҡыр, ашағандан һуң, 2-3 бал ҡалағы ҡабып ҡуйырға. Йотоуы ауыр булғанда саҡ ҡына һөт йәки һары май ҡушырға мөмкин. Дауаланыу курсы - бер ай һәм күберәк.

♦ Ашҡаҙан эшмәкәрлеге боҙолғанда (боронғо рецепт) финик менән дөгө төнәтмәһе - яҡшы дауа: 5 емешкә бер стакан һыу һалып 15 минут ҡайнатырға, һуңынан һыуытып, төштәрен алырға, емеште йомшартырға һәм төнәтмәне ҡушырға. Килеп сыҡҡан массаны бер стакан бешкән дөгө менән ҡушып, десерт урынына ҡулланырға мөмкин. Әммә финикты артыҡ күп ашарға ла ярамай: баш ауыртыуы ихтимал.

♦ Эсәктәр яҡшы эшләһен өсөн 5 туралған финикты 1 балғалаҡ һары май һәм 2 семтем ҡара борос ҡушып болғатығыҙ. Был ҡатнашманы иртән - алтынсы яртынан алтыға тиклем арауыҡта ашарға һәм ике сәғәт дауамында бер нәмә ашамай-эсмәй торорға кәрәк. Был ҡатнашма эсәктәрҙең һурыу һәм ассимиляция функцияһын көсәйтеүгә ярҙам итә, шулай уҡ һөйәк тұҡымаһы тукланыуын, нәжес формалашыуын, мускулдар тонусын яҡшырта.

Һары май - үҙенең молекуляр структураһы буйынса башҡа хайуан майҙарынан айырыла. Ул организм енел үҙләштергән май кислоталарынан тора, туҡлыҡлы һәм тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, әгәр уны артыҡ күп ашамағанда, ҡандағы холестерин күләме артмай.

♦ Аҙ ҡанлылыҡ, енси ҡеүәтһеҙлек, хроник арығанлыҡтан, йөклөлөк ваҡытында иртәнге ауырыҡһыныуҙан 10 финикты 1 литр самаһы һары майлы банкаға һалығыҙ, 1 балғалаҡ имбер, балғалаҡтың 1/8 өлөшө кардамон һәм бер семтем зәғфәрән өҫтәгеҙ. Банканы ҡапҡас менән ябып, бер аҙнаға йылы урынға ҡуйығыҙ. Бер аҙна үткәндән һуң иртән бер финик ашағыҙ.

♦ Йөрәк ныҡ типкәндә һәм күкрәк ситлегендә ауыртыу булғанда ваҡланған ике финикты 2 балғалаҡ бал менән болғап ашарға.

♦ Ҡан баҫымы юғары булғанда. Әгәр сирленең ҡандағы шәкәр күләме күтәрелмәһә, һәр көн иртән ашау алдынан 50-100 грамм финик ашарға мөмкин. Дауаланыу курсы - өс аҙна. 10 көн ял иткәндән һуң дауаланыуҙы ҡабатларға мөмкин.

♦ Ҡарлығыу һәм ҡоро йүткелдән ярты литр һыуҙа 10 финикты ярты сәғәт бешерергә. Төнәтмәне ҡайнар килеш эсергә. Шулай уҡ 6-7 кипкән финикты 1 стакан һөттә ҡайнатып эсергә лә мөмкин.

♦ Йәшәү тонусын күтәреү өсөн финиктан эсемлек: 5 финикты бер стакан һыуҙа төнгөләккә ҡалдырығыҙ. Икенсе көн емештәрҙең төштәрен алып, шул уҡ һыуҙа блендер менән иҙеп эсегеҙ. Эсемлек йәшәү дәртен уятыр һәм энергия өҫтәр.



## 24 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 24 сентября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.10 Т/с "Паук". [16+]
1.15 "На самом деле". [16+]
2.15 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.15 Модный приговор.
4.10 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Акварели". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Майор полиции". [16+]
3.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**14.00 Новости недели (на рус. яз.).**
**14.45 Учим башкирский язык. [0+]**
**15.00 Наука 102. [12+]**
**15.30 "Книга сказок". [0+]**
**15.45 "Борсаҡ". [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Перекличка". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Современник. [12+]**
**17.00 Наши годы. [12+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 "Дороги дружбы. Башкортостан - Венгрия". [12+]**
**18.15 Бизнес-проба. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**18.50 Хоккей. КХЛ. "Трактор" (Челябинск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Дантон". [16+]**
**3.00 Бәхетнамә. [12+]**
**4.00 "Последнее море Чингисхана". Спектакль. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 25 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 25 сентября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.10 Т/с "Паук". [16+]
1.15 "На самом деле". [16+]
2.15 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.15 Модный приговор.
4.10 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Акварели". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Майор полиции". [16+]
3.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Дубровский". [16+]**
**11.00 Следопыт. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Бизнес-проба. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [0+]**
**15.30 Йырлы кәрәҙ. [6+]**
**15.45 Бауырһаҡ. [0+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Семәр". [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Современник. [12+]**
**17.00 Дознание. [16+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**18.00 Бай баҡса. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Интервью. [12+]**
**19.30 Автограф. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Деловой Башкортостан. [12+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Весело живем. [12+]**
**0.00 Х/ф "Девушка на мосту". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Х/ф "Молодые сердца". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 26 СЕНТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 26 сентября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.10 Т/с "Паук". [16+]
1.15 "На самом деле". [16+]
2.15 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.15 Модный приговор.
4.10 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Акварели". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Майор полиции". [16+]
3.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Дубровский". [16+]**
**11.00 Наука 102. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Тәмле. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**15.30 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.45 "Ал да гөл". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Физра". [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Замандаш. [6+]**
**17.00 Д/ф "Сыны Отечества". [12+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [6+]**
**17.45 Имею право. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Интервью. [12+]**
**19.30 Алтын тирмә. [0+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.45 Новости (на рус. яз.).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. "Динамо Мн" (Минск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**0.00 Новости (на баш. яз.).**
**0.30 Х/ф "Опасное везение". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Резной трон". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 27 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 27 сентября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "На самом деле". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера. "Большая игра". [12+]
23.30 "Вечерний Ургант". [16+]
0.10 Т/с "Паук". [16+]
1.15 "На самом деле". [16+]
2.15 "Мужское / Женское". [16+]
3.00 Новости.
3.05 "Мужское / Женское". [16+]
3.15 Модный приговор.
4.10 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Акварели". [12+]
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.00 Т/с "Майор полиции". [16+]
3.40 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Дубровский". [16+]**
**11.00 Д/ф "Моя планета - Башкортостан". [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45 Весело живем. [12+]**
**15.00 У дачи. [12+]**
**15.30 Байтус. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Гора новостей.**
**16.15 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Замандаш. [6+]**
**17.00 Учим башкирский язык. [0+]**
**17.15 Орнамент. [6+]**
**17.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**17.45 Точка зрения ЛДПР. [16+]**
**18.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Интервью. [12+]**
**19.30 Башҡорттар. [6+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**20.45 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Интервью.**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Опасное везение". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 28 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.15 "Сегодня 28 сентября. День начинается".
9.55 Модный приговор.
10.55 "Жить здорово!" [16+]
12.00 Новости.
12.15 "Время покажет". [16+]
15.00 Новости с субтитрами.
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
17.00 "Время покажет". [16+]
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.25 "Время покажет". [16+]
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.55 "Поле чудес". [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Голос 60+". [12+]
23.35 "Вечерний Ургант". [16+]
0.30 Д/ф Премьера. "Бедные люди. Кабаковы". [16+]
2.30 Модный приговор.
3.30 "Мужское / Женское". [16+]
4.20 "Давай поженимся!" [16+]
5.10 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Доброе утро, республика!
9.55 "О самом главном". [12+]
11.00 Вести.
11.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
13.00 "60 минут". [12+]
14.00 Вести.
14.40 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Т/с "Морозова". [12+]
17.00 Вести.
17.40 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
19.00 "60 минут". [12+]
20.00 Вести.
20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 "Петросян-шоу". [16+]
23.20 Х/ф "Медовая любовь". [12+]
3.15 Х/ф "Отпуск летом". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Дубровский". [16+]**
**11.00 Автограф. [12+]**
**11.30 Новости (на рус. яз.).**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Спектакль "Прости меня". [12+]**
**14.00 Күңелем моңдары. [12+]**
**14.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**15.45 "Шәп арба". [6+]**
**16.00 "Гора новостей". [6+]**
**16.15 "Зеркальце. [6+]**
**16.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.45 Победить себя... [6+]**
**17.00 Д/ф "Прошу вашей руки и генов". [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Хазина о Хазине. [12+]**
**19.30 Бала-саға. [6+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Полезные новости. [12+]**
**20.45 Новости (на рус. яз.).**
**21.20 Хоккей. КХЛ. "Витязь" (Московская область) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**0.00 Новости (на баш. яз.).**
**0.30 Х/ф "Сделка с Адель". [12+]**
**2.30 Спектакль "Прерванная свадьба". [12+]**
**5.00 Весело живем. [12+]**
**5.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.45 Д/ф "Прошу вашей руки и генов". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз.).**

## 29 СЕНТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.45 Т/с "Любимая учительница". [16+]
6.00 Новости.
6.10 Т/с "Любимая учительница". [16+]
7.55 Играй, гармонь любимая!
8.45 М/с "Смешарики. Новые приключения".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря.
10.00 Новости.
10.10 Д/ф Премьера. "Инна Ульянова. В любви я Эйнштейн". [12+]
11.05 Д/ф Премьера. "Елена Летучая. Без мусора в голове". [16+]
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 "Идеальный ремонт".
13.25 "В наше время". [12+]
16.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.15 Премьера сезона. "Эксклюзив" с Дмитрием Борисовым. [16+]
19.45 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 Время.
21.20 "Сегодня вечером". [16+]
23.00 Х/ф Премьера. "Любовь-морковь по-французски". [18+]
0.40 Х/ф "Воды слонам!" [16+]
2.50 "Мужское / Женское". [16+]
3.45 Модный приговор.
4.40 Контрольная закупка.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
9.20 Сто к одному.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Праздничный концерт.
13.25 Х/ф "Вопреки судьбе". [12+]
15.00 "Выход в люди". [12+]
16.20 Субботний вечер с Николаем Басковым.
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Училка". [12+]
1.00 Х/ф "Поверь, всё будет хорошо..." [12+]
3.10 Т/с "Личное дело". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Друзья навсегда". [0+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**9.45 Посмотрим... [0+]**
**10.15 "У дачи". [12+]**
**10.45 "Большой чемодан. [6+]**
**11.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**12.00 Тәмле. [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.00 Замандаш. [6+]**
**13.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**13.30 "Бай". [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**16.00 "Байыҡ-2018". [12+]**
**17.00 "Бейеү-шоу". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Колесо времени. [12+]**
**20.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**20.30 "Песня года". [12+]**
**21.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**21.15 Победить себя... [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Посмотрим... [6+]**
**22.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018". [12+]**
**0.00 Х/ф "Последний бриллиант". [16+]**
**2.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.45 Спектакль "Ҡаһым түрә". [12+]**
**4.15 Башҡорттар. [6+]**
**4.45 Х/ф "Последний бриллиант". [16+]**
**6.30 Новости (на рус.яз.). [0+]**

## 30 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.15 Т/с "Любимая учительница". [16+]
6.00 Новости.
6.10 Т/с "Любимая учительница". [16+]
7.30 М/с "Смешарики. Пин-код".
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.00 Новости.
10.10 Д/ф "Леонид Куравлев. "Это я удачно зашел". [12+]
11.15 "Честное слово" с Юрием Николаевым.
12.00 Новости с субтитрами.
12.15 Д/ф "Инна Макарова. Судьба человека". [12+]
13.20 Х/ф "Дорогой мой человек".
15.25 "Видели видео?"
17.00 Премьера. "Три аккорда". Концерт в Государственном Кремлёвском Дворце. [16+]
19.25 Премьера. "Лучше всех!"
21.00 Воскресное "Время".
22.00 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр.
23.10 Д/ф Премьера. "Элвис Пресли: Искатель".
1.10 Х/ф "Морской пехотинец: Тыл".
2.45 "Мужское / Женское". [16+]
3.40 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

4.50 Т/с "Лорд. Пёс-полицейский". [12+]
6.45 "Сам себе режиссёр".
7.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
8.00 Утренняя почта.
8.40 Местное время. Воскресенье.
9.20 Сто к одному.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 Т/с "Сваты-2012". [12+]
13.50 Х/ф "Ночь после выпуска". [16+]
18.00 "Удивительные люди-3".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
23.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 Д/ф "Мюнхенский сговор. Приглашение в ад". [12+]
2.00 Т/с "Пыльная работа". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.45 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 М/ф "Фиксики". [0+]**
**8.30 Бай баҡса. [12+]**
**9.00 "Йома". [0+]**
**9.30 "100 дней до совершенства". [12+]**
**9.45 Медовая страна. [6+]**
**10.00 "Перекличка". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [0+]**
**10.30 "Иволга". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 Байтус. [6+]**
**11.15 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 "Гора новостей". [6+]**
**11.45 Алтын тирмә. [0+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Учим башкирский язык. [0+]**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Дарю песню. [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [6+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Юбилейный концерт Розы Сахаутдиновой. [12+]**
**19.00 Бизнес-обзор. [12+]**
**19.15 Деловой Башкортостан. [12+]**
**19.30 Твой дом. [12+]**
**19.45 Моя Республика. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Лидеры региона. [12+]**
**20.45 Имею право. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15 Свидание с джазом. [12+]**
**23.15 Х/ф "Пиковая дама: Черный обряд". [16+]**
**1.00 Спектакль "Анфиса". [12+]**
**3.30 Х/ф "Пиковая дама: Черный обряд". [16+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**5.30 Историческая среда. [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**6.45 Учим башкирский язык. [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ҺАРЫСАЙ ЮБИЛЯРҘАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**37-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Саған. Зураб. Әрәсә. Иләү. Атаман. Интеграл. Манн. Насыри. Бесән. Индиго. Вәлиди. Генерал. Шешҡолаҡ. Наян. Наза. Лава. Ниәт. Оҫта. Срок.

**Вертикаль буйынса:** Изабелла. Иртәнсәк. Нөгөш. Әүернә. Ҡолмой. Ғиззәтуллин. Ананас. Әкиәт. Алҡа. Абдрахманов. Спартак. Солтан. Манты. Нәжми. Иҙән.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1440 һижри йыл.*

| Сентябрь (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (14) дүшәмбе | 5:36 | 7:06 | 13:30 | 17:38 | 19:08 | 20:38 |
| 25 (15) шишәмбе | 5:38 | 7:08 | 13:30 | 17:36 | 19:06 | 20:36 |
| 26 (16) шаршамбы | 5:40 | 7:10 | 13:30 | 17:33 | 19:03 | 20:33 |
| 27 (17) кесе йома | 5:42 | 7:12 | 13:30 | 17:31 | 19:01 | 20:31 |
| 28 (18) йома | 5:44 | 7:14 | 13:30 | 17:28 | 18:58 | 20:28 |
| 29 (19) шәмбе | 5:46 | 7:16 | 13:30 | 17:26 | 18:56 | 20:26 |
| 30 (20) йәкшәмбе | 5:48 | 7:18 | 13:30 | 17:23 | 18:53 | 20:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 сентябрь "Иң бәхетле төн!"** (А. Касона), мелодрама 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26 сентябрь "Йәшәгән ти..."** (М. Ладо), драмеди 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**22 сентябрь "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 0+

**23 сентябрь "Дюймовочка"** (Г.-Х Андерсен) 0+. Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## "АШҠАҘАР" СТӘРЛЕГӘ ҠАЙТА

**Стәрлетамаҡ башҡорт драма театры "Буранғолов. Ашҡаҙар" спектаклен әҙерләй. Яңы сәхнә әҫәре республиканың 100 йыллығына һәм башҡорт әҙәбиәте классигы, шағир, драматург һәм фольклорсы Мөхәмәтша Буранғоловтың тыуыуына 130 йыл тулыуға арналған.**

"Башҡорт театры Стәрлетамаҡта ойошторолған һәм Буранғоловтың "Ашҡаҙар"ы тәүге спектаклдәрҙең береһе булған. Уның мираҫы баһалап бөткөһөҙ, беҙ үҙебеҙҙе уның рухи варисҭары итеп тоябыҙ. Ошо ваҡиғаларға, театрҙы, республиканы ойоштороуға ҡатнашы булған шәхестәргә тейешле баһа бирергә, улар хаҡында тамашасылар менән һөйләшергә теләйбеҙ, һәм был пьеса бик ҡулай булып сыҡты, - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына режиссер Зиннур Сөләймәнов.

Спектаклдең жанры музыкаль драма тип билдәләнгән, тип асыҡлыҡ индерҙе режиссер. Унда документаль мәлдәр һәм фольклор күп. Спектаклдә ике - Буранғоловтың үҙенең һәм уның "Ашҡаҙар" пьесаһының сюжет һыҙаты була. Спектакль буйынса балетмейстер Сулпан Асҡарова, композитор Илшат Яхин, рәссам Лилиә Сөләймәнова эшләй. Тотош труппа ҡатнаша. Төп ролдәрҙә - Резеда Әмәкәсова һәм Илфир Баймырҙин, Буранғолов ролен Рафиҡ Хәсәнов уйнай.

## ЯҢЫ ИСЕМДӘР АСЫУ

**Өфөлә XVI Халыҡ-ара опера сәнғәте фестивале барышында Федор Шаляпин исемендәге II Халыҡ-ара йырсылар конкурсы уҙғарыла.**

"Конкурстың ойоштороу комитетына Рәсәй, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙең йәш башҡарыусыларынан 60-тан ашыу ғариза килгән. Беренсе турҙа ҡатнашыу өсөн донъяның ете иленән: Грузиянан, Ҡаҙағстандан, Үзбәкстандан, Монголиянан, Испаниянан, Болгариянан һәм Рәсәйҙең 12 ҡалаһынан: Өфөнән, Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан, Һамарҙан, Ҡаҙандан, Түбәнге Новгородтан һәм башҡаларҙан 45-тән ашыу йырсы һайлап алынған. Был юлы беҙ Гран-при хужаһын табырбыҙ тип ышанам", - тине матбуғат конференцияһында жюри рәйесе - Башҡортостандың халыҡ артисы, халыҡ-ара конкурстар лауреаты Асҡар Абдразаҡов. 24 сентябрҙә финал турына үткән конкурсанттар Артем Макаров етәкселегендәге симфоник оркестр оҙатыуында сығыш яһай. 25 сентябрҙә Федор Шаляпин исемендәге II Халыҡ-ара йырсылар конкурсы лауреаттары, опера сәхнәһе оҫталары менән бер рәттән, "Өфөлә Шаляпин кисәләре" опера сәнғәте фестивале концертында ҡатнаша. Конкурс барышында жюри ағзалары менән оҫталыҡ дәрестәре үткәреү күҙаллана.

## "ФАУСТ" СӘХНӘЛӘ

**Шарль Гуноның "Фауст" операһы Башҡорт опера һәм балет сәхнәһенә әйләнеп ҡайтты. 81-се театр миҙгеле һәм XVI "Өфөлә Шаляпин кисәләре" халыҡ-ара фестивале премьера менән асылды.**

"Фауст" - Башҡорт театры тарихында тәүге опералар҇ың береһе. Ул 1939, 1950, 1961, 1978, 1999 һәм 2007 йылдарҙа ҡуйылған. Яңы спектаклдең ҡуйыусыһы - өфөләргә яҡшы таныш режиссер, "Алтын битлек" лауреаты Георгий Исаакян. Был уның Өфө сәхнәһендәге бишенсе спектакле. Ҡуйыусы дирижер - Артем Макаров, яҡтылыҡ рәссамы - Ирина Вторникова, хормейстер - Александр Алексеев. Премьераның беренсе көнөндә Мефистофель партияһын Башҡортостандың халыҡ артисы Асҡар Абдразаҡов башҡарҙы (Мария театры), был уның ижади биографияһында иҫәп буйынса 12-се "Фауст". Доктор Фауст - Башҡортостандың һәм Татарстандың атҡаҙанған артисы, "Алтын битлек" лауреаты Илһам Вәлиев, Маргарита - Башҡортостандың халыҡ артисы Эльвира Фәтихова, Зибель - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Әлим Ҡәйүмов, Марта - Башҡортостандың халыҡ артисы Светлана Арғынбаева, Вагнер - Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Владимир Копытов, Валентин - Ян Лейше.

✔ *Атың насар булһа, һатып ҡотолорһоң; ағай-энең яман булһа, ҡасып ҡотолорһоң; ҡатының яман булһа, нисек ҡотолорһоң?*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# МӘМЕРЙӘ ЭСЕНДӘ...

## ҡурай моңо яңғыраны



**Ошо көндәрҙә Өфөлә Фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары халыҡ-ара советының (СИОФФ) 48-се Бөтөн донъя конгресы үтә. Уның сиктәрендә ойошторолған иң сағыу сараларҙың береһе булып Башҡортостандың Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестрының Шүлгәнташ мәмерйәһендәге концертын атарға булалыр. Оркестрҙың солисы, халыҡ-ара, Рәсәй, республика конкурстары лауреаты Гүзәл ҮМӘРҒӘЛИНА менән ошо хәҡта һөйләшәбеҙ.**

**▸ Донъяның иң ҙур һәм серле мәмерйәләренең береһендә концерт менән сығыш яһау тәҡдимен артистар ниндәй тойғолар менән ҡабул итте?**

- Беҙҙең республикала был беренсе концерт булһа ла, донъя кимәлендә бындай тәжрибә бар. Әйтәйек, күптәр ишеткәндер, Ҡырымда Беренсе халыҡ-ара "Юғары классика Евразия фестивале"ндә Ҡырым дәүләт филармонияһы оркестры Мәрмәр мәмерйәһе эсендә сығыш яһаны. Әлбиттә, беҙ, милли оркестрҙың артистары, бик тулҡынландыҡ. Сөнки Шүлгәнташ башҡорт халҡы өсөн изге урындарҙың береһе, беҙ уға бәйле легендаларҙы, риүәйәттәрҙе ишетеп үҫкәнбеҙ һәм ул һәр беребеҙ өсөн иң ғәзиз ер. Шүлгәнташ Уралдың бөтөн донъяға билдәле урыны, был мәҙәни акция уның данын тағы ла арттырырға булышлыҡ иткәндер, тип ышанам.

Шүлгәнебеҙ кеүек, ҡурайыбыҙ ҙа бик боронғо уйын ҡоралы, тәбиғәт үҙе уны халҡыбыҙға бүләк иткән. Беҙ халыҡ уйын ҡоралдарында аутентик музыка уйнаныҡ, шуға ла был бик тәбиғи килеп сыҡты. Тәбиғи акустика, тауыш шул тиклем матур яңғырай унда.

**▸ Был сара һәр кемдә ғорурлыҡ тойғолары менән бер рәттән, мәмерйәгә берәй төрлө зыян килеп ҡуймаһын, тигәнерәк хәүеф уятыуы ла тәбиғи. Һеҙ был турала уйландығыҙмы?**

- Был концерт ҡурсаулыҡ хеҙмәткәрҙәре, тәбиғәтте һаҡлау ойошмалары вәкилдәре менән кәңәшләшеп эшләнде. Улар үҙҙәре лә концертта булды. Интернет селтәрҙәрендә халыҡтың был тема буйынса бер килке шаулап алыуы тәбиғи хәл, әммә мәмерйәгә бер ниндәй ҙә зыян килмәне. Концерт уның әле туристарға күрһәтелгән залында үтте. Киләсәктә клип та төшөрөләсәк һәм унда милли оркестрҙың ошо сығышы ла инеп китәсәк.

Моң бит ул кеше менән бергә йәшәй. Шүлгәнташта, бәлки, кешеләр ҙә йәшәгәндер. Бәлки, миллион йылдар элек унда кемдер берәү ҡурайҙа, йә башҡа берәй уйын ҡоралында уйнап ултырғандыр, кем белә? Шуға ла бынан артыҡ хәүефләнеү кәрәкмәйҙер. Микрофондар ҡурай менән ҡыл ҡумыҙҙа ғына булды, бүтән уйын ҡоралдары шул көйө лә матур яңғыраны.

**▸ Оркестр был үҙенсәлекле концерттың тамашасыларына ниндәй программа тәҡдим итте?**

- Беҙҙең мәҙәниәтебеҙҙе лайыҡлы күрһәтерҙәй әҫәрҙәрҙән төҙөлгән ул. Сөнки был концертта абруйлы ҡунаҡтар ҙа булды. "Урал", "Зөлхизә" кеүек халыҡ көйҙәре, Шәүрә Сәғитова менән Урал Иҙелбаевтың оркестр өсөн яҙылған әҫәрҙәре яңғыраны. Концерт 40-45 минут тирәһе барҙы.

Ғөмүмән, был бик уңышлы программа тип иҫәпләйем мин. Башҡорт халыҡ көйҙәре тураһында әйтеп тораһы ла түгел, уларҙың донъяла тиңе юҡ. Ҡурай, думбыра, ҡыл ҡумыҙ ҙа ҙур уңыш менән сығыштары булды. Думбыра, ҡыл ҡумыҙ кеүек халыҡ уйын ҡоралдары тергеҙелә башлағанға күп ваҡыт үтмәгән әле. Шуға ла үткән быуатта йәшәгән композиторҙар был уйын ҡоралдары өсөн махсус программалар яҙмауын аңларға кәрәк. Алда әйтеп киткән композиторҙар ошо инструменттарҙың бөтөн мөмкинлеген белеп, урынлы ҡуллана. Шуға ла был әҫәрҙәрҙең тәьҫир көсө ҙур.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**яҙып алды.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ҠУНАҠТАР ҠАРШЫЛАРҒА ӘҘЕРБЕҘ

**Конгресс сиктәрендә СИОФФ Президенты Филипп Боссан, БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов, Рәсәй халыҡ ижады йорто директоры Тамара Пуртова журналистар менән дә осрашты. Унда һүҙ 2020 йылда Башҡортостанда үтәсәк Бөтөн донъя фольклориадаһы тураһында барҙы.**

БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Тәлғәт улы әйтеүенсә, 2015 йылдағы ШОС һәм Брикс саммиттары үткәндә бар иғтибар Өфөгә йүнәлтелә. 2020 йылдағы Бөтөн донъя Фольклориадаһында бар республика ҡатнашасаҡ. Фольклориада 2 аҙна барасаҡ һәм һәр район, һәр ҡала үҙҙәрендә ҡунаҡтар ҡаршылаясаҡ. Башҡортостандың фольклор коллективтарын ҡунаҡ булараҡ баш ҡалаға саҡырыу мөмкинлеге лә һөйләшелә. Бар сығыштар асыҡ һауала үтер тип көтөлә. Сараны тантаналы асыу "Аҡбуҙат" ипподромында, ябыу тантанаһы "Өфө-Арена"ла планлаштырыла, былар барыһы ла башҡорт мәҙәниәтен бар байлығында, бөтөн яҡтан күрһәтеү өсөн эшләнә.

"Һеҙ башҡорттарҙың, республикала йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренең мәҙәниәттәре менән таныша башланығыҙмы, башҡорттарҙы Парижда беләләрме?" тигән һорауға СИОФФ Президенты Филипп Боссан былай тип яуапланы: "Ошондай саралар тап башҡа милләттәрҙең мәҙәниәте менән яҡындан танышыу өсөн үткәрелә лә инде. Башҡортостан вәкилдәре беҙҙең төрлө сараларҙа йыш ҡатнаша, мин, мәҫәлән, "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамблен беләм. Рәсәй төрлө милләтле ил булһа ла, унда һәр милләттең мәҙәниәте һәм сәнғәте юғары кимәлдә үҫешкән булыуының асыҡ миҫалы ул был ансамбль. Беҙ Фольклориада үткәреү урыны итеп Өфөнө һайлағас, ул ҡайҙа ул, тип һораусылар күп булды. Килеп күрергә форсат сығыуы үҙе ҙур бәхет буласаҡ уларға". Тамара Валентиновна ла Башҡортостандың Бөтөн донъя фольклориадаһы үткәреү өсөн әҙер булыуын һәм бындағы кеүек мөмкинлектәрҙең башҡа ерҙә юҡлығын әйтте: "Башҡорттарҙың ҡурайы, балы һәм ҡамсат бүрке генә лә һоҡланыу тойғолары уята, фольклор үҫеше тураһында әйтеп тораһы ла юҡ", - тине ул. Баҙар шарттарында ла рухи ҡиммәттәрҙе өҫтөн күреп, һәр ауылда үҙешмәкәр коллективтар булдырып, шул рәүешле халыҡ ижады өлгөләрен һаҡлап йәшәүсе республика халҡы был сараға, ысынлап та, бөгөндән әҙер.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТАУҒА ҠАРАП, ТАУ БУЛМА,

## ағай-энегә яу булма...

⁂ Атың насар булһа, һатып ҡотолорһоң; ағай-энең яман булһа, ҡасып ҡотолорһоң; ҡатының яман булһа, нисек ҡотолорһоң?

⁂ Яҡшы ағай ил көтһә - йорт кәрәген үтенер, яман ағай ил көтһә - илгә дошман килтерер.

⁂ Илен ҡурсыған - ил ағаһы булыр, илен борсоған - ил буҫағаһы булыр.

⁂ Арғымаҡты яманлап, толпарҙы ҡайҙан табырһың?

⁂ Атай-инә ҡәҙерен балалы булғас белерһең.

⁂ Тауға ҡарап, тау булма, ағай-энегә яу булма.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре)**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:" Бер бай кеше ер һатып ала. Тик был төбәктә тәбиғәт көйһөҙлөктәре булып тора, гел генә көслө-ел дауыл сыға икән. Ер биләүсегә еңелдән булмай. Ошондай көйһөҙ урында эшләргә, йәшәргә теләүсе лә табылмай. Ер биләүсегә таныштары был урындарҙы ташлап китергә кәңәш итә. Әммә бындағы ерҙең уңдырышлы булыуы байҙы үҙенә ылыҡтырып тота. Ярҙамсылары булмаһа ла, ул ҙур хужалығында эшләүҙе дауам итә. Бер ваҡыт уға өлкән генә йәштәге кеше эшкә ялланырға килә. Байҙың иген сәсеү, урып-йыйыу кеүек ер эштәрендә толка белеүбелмәүе тураһындағы һорауына ҡаршы ҡарт былай тип яуаплай: "Беләм, һәр хәлдә, мин ел-дауыл ваҡытында ла тыныс йоҡлай алам". Ҡарттың эшкә бер ниндәй ҡыҫылышы булмаған һүҙҙәре ер биләүсене аптырата аптыратыуға, әммә башҡа сараһы булмағас, уны эшкә ялларға ризалаша.**

**Бергән-бер көндө төндә тағы дауыл сыға. Ер биләүсе ҡот осҡос шау-шыуға, йортоноң һелкенеп тороуына уянып китә. Урынынан һикереп тора ла, ҡарттың бүлмәһенә йүгереп инеп, "Тор, дауыл сыҡҡан бит! Бар нәмәне ҡуҡҡа күтәрмәҫ элек, берәй нәмә эшләй һалайыҡ!" тип ҡысҡыра. "Бер ниндәй ҡурҡыныс та юҡ, бүлмәгеҙгә ҡайтығыҙ ҙа, йоҡлағыҙ. Әйттем бит: мин дауылда ла тыныс йоҡлай алам", - ти ҡарт тыныс ҡына бер яҡҡа ҡабырғаһына әйләнеп ята. Хужаның уға бик нык асыуы килә һәм уны иртән ҡыуып ебәрергә кәрәк, тигән уй менән байлығын ҡотҡарыр өсөн урамға йүгереп сыға. Һалам өйөлгән кәбән эргәһенә барһа, уныһы нык итеп тарттырылып, дауылға бирешмәҫлек итеп бәйләп ҡуйылған. Һарайға йүгерһә, күрә: бар мал йыйылған, һарай ишеге йоҙаҡ менән бикләнгән. Хатта ихаталағы ҡоҙоҡ ауыҙы ла нык итеп ябып ҡуйылған. Өйөнә инһә, унда ла ишек-тәҙрәләрҙең нығытылғанын күрә. Ер биләүсе тыныслана һәм йоҡларға ята. Ә тышта дауыл ҡотороуын белә. Хужа йылмайып ҡуя һәм ҡарт хеҙмәтсеһенең бая әһәмиәт бирмәгән һүҙҙәренең ысын асылын аңлап, үҙ алдына ҡабатлап ҡуя: "Мин дауылда ла тыныс йоҡлай алам..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәррирәт:
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 21 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673
Тиражы - 4077
Заказ - 1672/09